*Әгәр ҙә йәш ғалим миндә ике йыл буйы эшләгәндән һуң, артабан нимә эшләргә, тип һораһа, мин уға был өлкәләге эшен ташларға кәңәш итәсәкмен, сөнки кеше ике йыл эшләгәндән һуң да артабан нимә эшләрен белмәгәс, ғалим булып китә алмай.*

*(Эрнест Резерфорд).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16 - 22 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле | №42 (408)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Гәҙел баһаны тарих бирә**



3,15

**"Һаумыһығыҙ! Мин һеҙҙең иҫәп алыусы"-**

Рәсәйҙә халыҡ иҫәбен алыу шундай сәләмләүҙән башланды



4

**Күп һәләттәребеҙҙе юғалтҡанбыҙ,**

яугирлыкты, йондоҙҙарға ҡарап эш итеүҙе, ысынбарлыкты тойоу хисен...



8-9

**Интернет селтәрҙәрендә...**

Башҡортостан һәм башҡорттар



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙа иң мөһим һорау ниндәй?

***Илдус ЗАРИПОВ, Краснокама районының Яңы Ҡайынлыҡ ауыл советы хакимиәте башлығы:*** Мине, тәү сиратта, милләт һәм мәшғүллек тураһындағы һорауҙар борсой. Сөнки бөгөн райондарҙа, Башҡортостанда ғына түгел, тотош Рәсәйҙә эшһеҙлек мәсьәләһе киҫкен тора. Халыҡ иҫәбен алыу ил буйынса халыҡтың күпмеһенең эше бар, күпме кеше эшһеҙ икәнен асыҡларға, аныҡ картинаны күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итәсәк.

Милләт мәсьәләһенә килгәндә инде, мин үҙем төньяҡ-көнбайыш башҡорттары вәкилемен. Диалектыбыҙ бик үҙенсәлекле, татар теленә лә яҡынырак, шуға беҙҙе татар тип атарға тырышыусылар күп. Милләт күптән барлыҡҡа килгән, ул берҙәм һәм бүленмәҫ. Ә диалекттар халыҡтың йәшәү урынынан ғына килеп сыҡҡан. Ата-бабаларҙан мираҫ булып ҡалған иң ҙур бүләк ул - башҡортлоҡ.

***Ильяс ТАКАЛОВ, Йылайыр районының "Ауыл уттары" гәзите мөхәррире:*** Минең өсөн иң беренсе урында милләт тураһындағы һорау тора. Сөнки иҫәп алыусы яуаптарҙы һин нисек әйтәһең, шулай тултыра. Ә инде милләтең тураһындағы графаны үҙ ҡулдарың менән тултырырға тейешһең. Ғорурлыҡ менән "башкир" тип яҙып ҡуясаҡмын.

Бөгөн беҙҙең район буйынса халыҡтың 60 процентын башҡорттар тәшкил итә. Милләтебеҙ һаны йылдан-йыл арта, демография күрһәткестәре үҙгәрә. Шуға минең өсөн иң мөһиме- үҙ халҡымдың артыуы.

***Артур ФӘТКУЛЛИН, Бөрө дәүләт социаль-педагогия академияһының төрки һәм финуғыр филологияһы кафедраһы мөдире:*** Филолог булараҡ, минең өсөн милләт һәм тел буйынса һорауҙар - иң мөһимдәре. Балаларым да башҡорт телендә һөйләшә. Беҙ уҡытыусылар әҙерләйбеҙ. Студенттарҙа, башҡорт теленең методикаһын, үҙенсәлектәрен, перспективаһын аңлатып, телгә ихтирам тәрбиәләйбеҙ. Сөнки телгә, милләткә һөйөү ул ысын патриоттарҙа ғына булалыр, ә беҙҙә төрлө студенттар бар. Шуға тәүҙә ихтирам тәрбиәләйбеҙ, ә һөйөү үҙе яйлап килер.

***Әкрәм ҒӘНИЕВ, Башкортостанстат идаралығы начальнигы:*** Иҫәп алыуҙа минең өсөн һәр һорау мөһим. Ғаиләлә кеше һаны, йәшәү шарттары, миграция мәсьәләләре, кешенең мәшғүллеге - барыһы ла бер-береһе менән тығыҙ бәйле. Бигерәк тә демография мәсьәләһе мөһим. Бөгөн тыуым арта, тибеҙ. Ә бит был бары тик ваҡытлыса ғына күренеш. Эйе, әсәлек капиталы һәм башҡа саралар тыуым артыуға булышлыҡ итте, әммә... Хәҙер 1990 йылда тыуған ҡыҙҙар репродуктив йәшкә етә, ә ул йылда тыуған ҡыҙҙар бик әҙ...

***Гүзәл СИРҒӘЛИНА, 2002 йылда Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙа ҡатнашҡан иҫәпсе:*** Үткән халыҡ иҫәбен алыуҙа иҫәпсе булып ҡатнашҡанлыҡтан, минең өсөн бар һорауҙар ҙа мөһим. Сөнки һорауҙар үҙ-ара бәйле. Ниңәлер, был кампанияны беҙ тик халыҡ һаның алыу тип кенә ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ, ә асылда ул бит илдең социаль-иҡтисади кимәлен күрһәткән иң дөрөҫ статистика.

Ҡайҙалыр төпкөл ауылда тормошона ҡәнәғәт булып, газһыҙ, интернетһыҙ йәшәп ятыусылар күпме, асарбаҡтар күпме, башҡорттар араһында эшҡыуарҙар күпме, күпме кеше ятаҡтарҙа йәшәй, күпмеһе кеше торлаҡһыҙ тапай - иҫәп алыу шуларҙың барыһын да асыҡлаясаҡ.

Үткән иҫәп алыуҙа, мәҫәлән, күп башҡорттар, кеше фатирында йәшәп, фатир хужалары рөхсәт итмәгәс, ишек асмайынса, иҫәпкә алынмайынса тороп ҡалды.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

ТАРИХЫНДЫ ТАНЫТ...

# НИСӘ ЙӘШТӘҺЕҢ, ӨФӨ?

## Башҡортостан Президенты Өфө-II ҡаласығында булғанда ошо һорауға яуапты асыҡланы

**Баш ҡаланың уртаһында, Пушкин урамы участкаһында, Ново-Мостовая менән Воровский урамдары киҫелешендә урынлашҡан Өфө-II ҡаласығы тураһында уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" гәзитендә әленән-әле баҫыла килгән яҙмалар аша яҡшы таныш. Беҙҙең эраның баштарында барлыҡҡа килгән һәм XV-XVI быуаттарға тиклем йәшәгән был ҡаласыҡтың ҙур административ, сауҙа үҙәктәренең һәм Урал-Волга буйы тарихының әһәмиәтле пункттарының береһе булыуын рус һәм сит ил тарихсы-сәйәхәтселәре материалдарында, карталарҙа ла күрәбеҙ. Республика Президенты Рөстәм Хәмитов күптән түгел "Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте һәм ЮНЕСКО араһында үҙ-ара хеҙмәттәшлек тураһында Килешеүҙе-Коммюникены тормошҡа ашырыу саралары планы" тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйғайны.**



(Дауамы 2-се биттә).

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# ТИК ИЗГЕ, ЙӘ... тик яуыз булып булмай

**ҺОРАУ: Мең доллар хаҡына яуыз булырға ниәт иткән кеше ошо хаҡтың яртыһына изге күңелле була аламы?**

**Ғүмәр ӘМИРОВ:** Шартлы булған өсөн дә был һорауға бер төрлө генә яуап табыуы ҡыйын. Шиғыр ҙа, енәйәт тә бер үк күңелдә ярала...

Был һорауға ниндәй күҙлектән ҡарайһың бит әле. Кеше абсолют изге, йәки абсолют яуыз була алмай. Әлбиттә, унда һәр ваҡыт ниндәйҙер тойғо өҫтөнлөк итә. Яуыз булған кеше лә әсәһен ярата бит.

Тарихи шарттар һәм килеп тыуған хәл кешегә йоғонто яһай, уны йә яуыз, йә изге эш эшләргә мәжбүр итә ала. Кешене үҙгәртә торған тағы бер сәбәп - ул аҡса.

Әгәр кешенең күңелендә изгелек өҫтөнлөк алған икән, яһалма рәүештә яуыз булам тигән маҡсатта ла, ул был йөктө оҙаҡ күтәрә алмай. Сөнки яуызлыҡ - бик ауыр йөк.

Фәҡирлек булған ерҙә иман булмай. Бер телем икмәккә зар-интизар булған кешегә, ҡулындағы бер телем икмәкте икенсе кешегә бир, тип әйтеп тә, ул был үтенесте үтәмәгәнгә генә уны яуыз тип әйтеп булмай. Яуызлыҡ - изгелеккә, йәки, киреһенсә, изгелек яуызлыҡҡа төрөнгән осраҡтар була. Кешенең яуызлығы башҡаларға шатлыҡ алып килә икән, уның яуызлығын изгелек, тип әйтеп буламы? Йәки, киреһенсә, эшләгән изгелеге башҡаларға ҡайғы алып килһә, был изгелек буламы? Минеңсә, булмай. Кеше ниндәйҙер әхләҡи нормаларҙан, үҙенә насарлыҡ килгән хәлдә лә, принциптарынан тайпылырға тейеш түгел.

## БЫЛ ҺОРАУҒА ТАҒЫ БЕР НИСӘ КЕШЕНЕҢ ЯУАБЫ:

- Ҡайһы бер кешеләр иң изге маҡсатын тормошҡа ашырыу өсөн енәйәт ҡылыуға тиклем барып етә. Әлбиттә, күңелендә изгелек осҡондары булған кеше тәүгеһенә ҡарағанда икенсе юлды һайлай - изгелек юлына баҫа.

-Юҡ, сөнки еңел аҡса түмен бер татыған кеше ул юлды бер ҡасан да ташламай.

-Изгелек тыуҙырыуы ҡыйын, уға күп көс сарыф ителә. Ә яуызлыҡ өсөн бары ахмаҡ булыу етә. Күп кешегә был һиҙат бирелмәй. Һирәктәр генә тәүбәгә килә ала.

-Төрлө кешеләр була. Донъяла иң яуыз тип һаналған кешелә лә аҙ ғына изгелек булыуы мөмкин. Мәҫәлән, мин бер ҡараҡтың кешеләрҙе күрә алмай, шул үк ваҡытта, сит бесәй балаһын иркәләтеп, хайуандарҙың изгелеге тураһында "фәлсәфә һатып" ултырыуына шаһит булдым.

- Әлбиттә, әгәр ул кеше шул тиклем хәйләкәр була икән, ваҡытлыса "һарыҡ тиреһе ябынған бүре" сүрәтенә керә ала. Тағы ла, кеше үҙ теләге мнән изге булып китә алмай. Шул уҡ ваҡытта, үҙе теләп, яуыз була алмай. Был теләккә генә түгел, ә кешенең тәбиғәтенә, гендарына һәм тәрбиәһенә бәйләнгән.

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# НИСӘ ЙӘШТӘҺЕҢ, ӨФӨ?



## Башҡортостан Президенты Өфө-II ҡаласығында булғанда ошо һорауға яуапты асыҡланы

(Башы 1-се биттә).

Ҡарарҙағы саралар араһында Өфө-II ҡаласығы археологик ҡомарҡы объектын фәнни өйрәнеүҙе дауам итергә, "Башҡорт" ҡалаһына нигеҙ һалыныу ваҡытын һәм уның үҫеш этаптарын билдәләү буйынса халыҡ-ара фәнни конференция үткәрергә, тигән пункттар бар. Яныраҡ тағы ла бер ҡыуанысллы ваҡиғаның шаһиты булдыҡ: Республика көнөнә арналған байрам саралары сиктәрендә Рөстәм Хәмитов Өфө-II ҡаласығына килеп, 2006-2010 йылдарҙа алып барылған археологик тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәләре менән ҡыҙыҡһынды.

БР Фәндәр академияһының вице-президенты, тарих фәндәре докторы Нияз Мәжитов әйтеүенсә, тарихи Өфөнөң уртаһында табылған был ҡаласыҡ ҡалдыҡтары урта быуаттарҙа уҡ әле был территорияла башҡорт ҡалаһы булыуы тураһында һөйләй. Өфө-II ҡаласығы эргәһендә тағы ла ошондай биш ҡаласыҡ, унлаған ауыл урындары һәм улар тирәләй V-XVI быуаттарҙа йәшәгән кешеләрҙең зыяраттары хәҙерге баш ҡалабыҙ Өфөнөң тарихи нигеҙен тәшкил итә лә инде. Баш ҡаланың Киров һәм Ленин районлары территорияларында 20-гә яҡын археологик ҡомарҡылар, шул иҫәптән, стеналарының бейеклеге 5 метрға еткән ҡәлғә урынлашҡан. Ҡаҙыныу эштәре барышында табылған боронғо көнкүреш әйберҙәрәре - алтын биҙәүестәр, тәңкәләр, балсыҡ һауыттар ҙа беҙҙең эраның V-VIII быуаттарына ҡарай. Өфө-II ҡаласығы урынында ҡасандыр тротуар ролен үтәгән 50 метрға һуҙылған түшәү таҡталары табылғандан һуң, Ҡаҙан һәм Мәскәүҙән килгән фәнни экспедициялар ҙа был урында эре ҡала булыуы мөмкинлеген раҫлай.

Был фәнни асыштар ҙа, төрлө яҙма ҡомарҡылар, шул иҫәптән боронғо карталар ҙа, Өфө ҡалаһына 1574 йылда воевода Иван Нагой килгәс кенә нигеҙ һалынған, тигән ҡарашты тулыһынса үҙгәртә. Тарихсылар фекеренсә, был урында XIV-XVI быуаттарҙағы Европа сәйәхәтселәренең карталарында билдәләнгән Башҡорт ҡалаһы булыуы факты бәхәсһеҙ. Ҡыҫҡаһы, өҫтә генә яткан бик күп дәлилдәргә, тарихи сығанаҡтарға нигеҙләнеп, Өфөгә 1500 йәш, тип билдәләп булыуын да бәхәсһеҙ ҡабул итеп була.

Өфө-II ҡаласығында тарихсылар, студенттар, аспиранттар, журналистар менән осрашып, уларҙың дәлилдәрен тыңлағандан, ҡаҙылдыҡ ҡомарҡылар менән танышҡандан һуң БР Президенты Рөстәм Хәмитов та Өфөнөң XVI быуатта буш урында барлыҡҡа килмәгәнлеге менән килешеп, яңы дәлилдәр табылғас та Өфөнөң йәшен дәүләт кимәлендә асыҡлау мәсьәләһенә кире ҡайтырға мөмкин буласаҡ, тип белдерҙе.

Ғалимдар менән аралашыу, экспонаттарҙы ҡарау барышында Рөстәм Зәки улы Өфө-II ҡаласығын һаҡлау, артабан фәнни яҡтан тикшереү идеяһын ҡуҙатып ҡына ҡалманы, Башҡортостандың башҡа төбәктәрендә урынлашҡан тарихи-археологик ҡомарҡыларҙың хәҙергә көндәге торошо тураһында ла ҡыҙыҡһынды. Шулай уҡ Өфө-II ҡаласығы урынлашҡан ошо урында Өфө ҡалаһының урта быуат тарихына бағышланған тарихи-мәҙәни музей комплексын төҙөү тураһындағы идеяны ла хупланы. Әлегә архитекторҙар буласаҡ музейҙың ике вариантын тәҡдим итә.

Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, был проектты тормошҡа ашырыу өсөн кәрәкле сараларҙың бер өлөшөн 2011 йылда уҡ республика бюджетына һалыу мөмкинлеге лә ҡараласаҡ. Шулай уҡ ҡаласыҡ территорияһында барған торлаҡ төҙөлөшө лә туктатыласаҡ, Өфө ҡала округы башлығы Павел Качкаев һүҙҙәре буйынса, төҙөүселәр һәм археологтар был мәсьәлә буйынса уртаҡ фекергә килгән дә инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғалимдар фекеренсә, урындағы етәкселәрҙең ҡаласыҡҡа иғтибары ла, археологик ҡомарҡыны һаҡлау маҡсатында музей комплексы төҙөү тураһындағы идея ла бик ҙур әһәмиәткә эйә. Өфө-II ҡаласығының Көнсығыш Европала булған башҡа ҡомарҡыларҙан айырылып тороуы, бындай мәҙәни ҡатламдың донъяла һирәк осрауын да иҫәпкә алһаҡ, был археологик ҡомарҡ халҡыбыҙ тарихында өр-яңы бит буласаҡ.**

ИҒТИБАР!

## МӨХТӘРӘМ МИЛЛӘТТӘШЕБЕҘ!

**14 октябрҙән 24 октябргә тиклем гәзит-журналдарға яҙылыу буйынса Бөтә Рәсәй декадаһы үтеүе һәм хаҡтарҙа бер аҙ ташламалар барлығы тураһында хәбәр итәбеҙ һеҙгә.**

Шулай итеп, 2011 йылдың беренсе ярты йыллығына ошо декада осоронда яҙылғандар өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - **313 һум 74 тингә**, ә 50673 индекслыһына ( предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) **342 һум 24 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

➔ "Киске Өфө" бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

➔ Гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияғыҙҙы һәм тыуған көнөгөҙ тураһындағы мәғлүмәтте редакцияға ебәреп, байрамығыҙ менән ҡотланырға, бүләк отторыуҙа ҡатнашырға ла онотмағыҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Ирәмәл тауының үҙенсәлекле тәбиғәтен һәм ҡырағай күркәмлеген һаҡлап ҡалыу маҡсатында Учалы һәм Белорет райондары биләмәһендә Милли парк булдырыу хаҡында ҡарар ҡабул итте. "Ирәмәл тауы урынында, һис шикһеҙ, Милли тәбиғәт паркы ойоштороға кәрәк, - тине Президент. - Сараға аҡса 2011 йыл бюджетында планлаштырыласаҡ". Учалы һәм Белорет райондары хакимиәттәре башлыҡтарына "Ирәмәл" милли паркын булдырыу буйынса саралар планы әҙерләргә ҡушылды.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев бойороғо менән башҡа эш төркөмдәренә өҫтәп тағы ла экология ҡануниәтен үтәүгә контроль буйынса эш төркөмө булдырылды. Республиканың экологик торошон өйрәнеү, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау өлкәһендәге ҡануниәтте камиллаштырыу буйынса тәҡдимдәр эшләү маҡсатында ойошторолған төркөмгә депутат В.И. Лебедьков етәкселек итә.

✓БР Фәндәр академияһының Социаль-иҡтисади һәм хоҡуҡи тикшеренеүҙәр институты үткәргән соцтикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре буйынса, республика халҡы Президенттың тәүге аҙымдарына ыңғай баһа бирә. Ундайҙар бөтөн һорау алыусыларҙың 76,6 процентын тәшкил иткән. Респондентарҙың 1,9 проценты кире баһа биргән. Һорау алыуҙа республика ҡалалары һәм райондарынан 1 мең кеше ҡатнашҡан.

✓Былтырғы иктисади мониторинг һөҙөмтәләре буйынса Өфө Рәсәй Федерацияһындағы ул тиклем таҙа булмаған биләмәләр иҫәбендә тип табылған. Мәҫәлән, баш ҡала һауаһында этилбензиндың тейешле норманан 5 тапҡырға артып китеүе билдәләнгән. Иң бысраҡ һауа Орджоникидзе районы биләмәһендә. Был хаҡта экологик форумда БР-ҙың баш санитар врачы урынбаҫары Нина Кондрова хәбәр итә. Уның әйтеүенсә, Өфө халҡы араһындағы ауырыуҙар осрағының 80 проценты насар һауа арҡаһында барлыҡҡа килә. Һауала 400-ҙән ашыу төрлө химик матдәләр барлығы асыҡланған. Былар - сәнәғәт предприятиелары ҡалдыҡтары һәм автотранспорттан сыҡҡан ҡалдыҡтар. Республикала автомобилдәр һаны йылдан-йыл арта, һауа бысраныуының 60 проценты автомобиль ҡалдыҡтарына тура килә. Был онкосирлеләр артыуына ла килтерә. Һуңғы йылдарҙа Өфөлә бындай ауырыуҙар 12 процентка арткан.

*✓ 600-700 битлек отчет "Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты" тип атала. Ул татарлашҡан башҡорттарҙың телендә - лексикала, фонетикала бик күп башҡорт теле элементтары таба.*



ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...

**Иғтибарығыҙға тәҡдим итәсәк был әңгәмәне журналист Зәйтүнә Ханова 1999 йылда "Башҡортостан" гәзитендә баҫтырып сығарҙы. Уны "Башҡортостан" гәзите ошо көндәрҙә яңынан баҫтырҙы. Беҙ ҙә уны гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итергә булдыҡ. Хәҙер инде фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күскән күренекле этнолог, Көнсығыш белгесе, тарихсы, Рәсәй Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, БР Фәндәр академияһы академигы булған тарих фәндәре докторы, профессор Раил КУЗЕЕВтың был әңгәмәлә әйткәндәре бөгөн дә бик актуаль булыуы бәхәсһеҙ. Күп ғалим һәм академиктарыбыҙ таныуынса, башҡорт халҡының яртыһы тик тел үҙенсәлектәре өсөн генә үҙ милләтенән ситләштерелеп йәшәй һәм сит халыҡҡа күсә бара бит. Зәйтүнә Хановаһың Раил Кузеев менән әңгәмәһе лә ошо хаҡта.**



# ҒӘҘЕЛ БАҺАНЫ ТАРИХ БИРӘ

-Үҙемдең ғилми биографиямды башҡорттарҙың этнографияһын өйрәнеүгә бағышланым. Тормошомдоң шул дәүере иң яҡыны, иң ҡыҙыҡлыһы. Хәтеремдә, "Башҡорт шәжәрәләре" өсөн бик ҡаты киҫәтеү алғайным, ниндәйҙер иҫкемоҫко тамғалар баҫтырып ятаһың, тип тиргәнеләр...

Шунан башҡорттарҙың килеп сығышы тураһында китап сығарҙым. Ләкин тормош беҙҙең Рәсәйҙә барыбер ҡатмарлы. Шуның өсөн археография һәм бик ныҡ ҡына бөгөнгә көн - этносоциология менән дә шөғөлләнеп алдым. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, беҙ, этнологтар ғына түгел, ә тарихсылар, химиктар, физиктар ҙа хәҙерге тормош менән ҡыҙыҡһына башланы. Шул юҫыҡта мин һуңғы 10 йыл эсендә байтаҡ хеҙмәттәр баҫтырып сығарҙым. Әле, 70 йәшемә еткәс, яңынан эгнографияға, йәғни классикаға ҡайтам, тип хыялланам. Унан һуң, бик күп әҙер әйберҙәрем нәшер ителмәй ята.

Беренсенән, миндә төрки халҡының ете-һигеҙ мең тамғаһы йыйылған. Шуның ете меңе тигәндәй - башҡорт тамғалары. Социаль тормош буйынса, башҡорттарҙың килеп сығышы һәм миграция тураһында бик бай сығанаҡ был. Ошо тамғалар, тарихи риүәйәттәр, шәжәрәләр, ырыу-ҡәбилә исемдәре, йәғни этнонимия, этногония тигән аңды билдәләй. Сөнки байтаҡ ҡына халыҡтың яҙмаһы, алфавиты булмаған.

**▸ Уның ҡарауы, тамға менән яҙғандар. Шул иҫәптән башҡорттар ҙа...**

-Башҡорттарҙың ана шул тамғаларын мин 20-25 йыл йыйҙым. Дүрт китапҡа һыйышлы илле шәжәрә бар, төньяҡ-көнсығыш һәм Көньяҡ Урал буйлап. Шунан Дим башҡорттарыныҡы. Бигерәк тә төньяҡ-көнбайышҡа ныҡ иғтибар иткәйнем. Ә һуңғы йылдарҙа, дәүерҙең законы дарына баш эйеп тигәндәй, бөгөнгә тормош, социология һәм иң башты ауырттырған мәсьәлә - беҙҙең республика халыҡтарының, башҡорт халҡының киләсәге. Быныһы беҙҙең ғалимдар өсөн иң мөһим мәсьәлә. Ошоға бәйле, Хөкүмәтебеҙ Фәндәр академияһына "Башҡортостан халыҡтары" программаһын эшләүҙе йөкмәтте. Беҙ уны әҙерләнек. Ул хаҡта бик ҙур бәхәс ҡупты. Өс мәртәбә уны семинарға тикшереүгә ҡуйҙыҡ. Башҡорттар, Рәсәйҙә йәшәп, ассимиляцияға, окультурацияға бирелмәсме икән, тигән мәсьәлә ҡуйыла. Минең фекеремсә, ундай хәүеф янай. Бер нисә сәбәп бар. Бер яҡтан, окультурацияна, ассимиляциянан ҡурҡып, халыҡты артҡа саҡырып булмай ҙа инде. Халыҡ алға барырға тейеш. Милләттең мәҙәниәтендә бик көслө нигеҙ, ҡаҡшамаҫ таяу - традицион компонент булырға тейеш. Әммә мәҙәниәт һәр ваҡыт яңыртылып (модернизация) торғанда ғына йәшәйеш алға бара. Бөгөн донъя технологияһы бик юғары икән, беҙ бит башҡортостандарға, унда йәшәгән халыҡҡа интернеттан, компьютерҙан ситтә тороғоҙ, тип әйтә алмайбыҙ. Унан һуң, Башҡортостанда йәшәгән халыҡ үҙенең туған теленән башҡа, рус, инглиз телдәрен дә белергә, ҡайһы берәүҙәр немец, француз телдәрен өйрәнергә тейеш. Модернизация барыбер кәрәк. Был - бер яғы. Ә икенсе яғы - ассимиляциянан, окультурациянан ҡурҡҡан милләт артта ҡалған халыҡ була.

**▸ Беҙ ниндәй халыҡ? Башҡорт теленең тормоштоң бөтә өлкәләренән дә ҡыҫырыҡлап сығарылыуы, халыҡтың күпселегенең ауылда йәшәүе, юғары белем алыуҙа иң артта килеүе, тормош кимәленең иң түбән булыуы һәм башҡа факттар беҙҙе түбәнгә төшөрә түгелме?**

- Улай уҡ түгел. Әле Башҡортостан үҫеш юлында. Һуңғы тиҫтә йылдар эсендә республика ныҡ үҙгәрҙе. Элек беҙҙең урамдарҙа башҡорт һәм татар телдәрен ишетеп булмай ине. Бөгөн университет яғына барһаң, трамвайға йәштәр килеп тула һәм барыһы ла йә татарса, йә башҡортса рәхәтләнеп ҡысҡырып һөйләшә. Магазинда, театрҙа ла шул уҡ хәл. Хәҙер бит театрҙар халыҡ менән туптулы. Башҡорт театрына барыр өсөн билетты алдан алырға кәрәк. Икенсенән, Хөкүмәтебеҙ, Конституциябыҙ бар. Башҡорттарҙы, республика халыҡтарын Конституция яҡлай. Инде беҙгә мәктәптәр етмәһә - төҙөйбөҙ, кластар кәрәкһә - асабыҙ. Татарҙарҙың театры юҡ икән - һалабыҙ. Мариҙарға шарттар булдырабыҙ. Элек Башҡортостанда ундай хәл булғаны юҡ ине. Иң мөһиме, халыҡтар араһында дуҫлыҡ булырға тейеш. Һәм уны бик ныҡ һаҡларға кәрәк.

**▸ Закондар сығарыу Палатаһының башҡорт һәм рус телдәренә дәүләт статусын биреүсе закон проектына тауыш биреүе, нигеҙҙә, тыныс ҡабул ителде. Тимәк, сит дәүләтселектәр, бигерәк тә күрше республикалар, беҙҙең эске сәйәсәткә килеп ҡыҫылмаһа, проблемалар еңелерәк хәл ителә.**

- Бер төрлө генә ҡараштыкөтөү барыбер дөрөҫ булмаҫ. Халыҡ мәғлүмәт һәм үҙаң йәһәтенән айырыла, яуап реакцияһы ла төрлөсә. Телдәр тураһындағы законды аңлап ҡабул итер өсөн ваҡыт кәрәк.

**▸ Һеҙ хаҡлы, әлбиттә.**

- Беҙҙең Урал халыҡтары бүлеге тел мәсьәләләрен семинарға сығарып, бәхәс ҡороп, тикшереүгә сығарырға бер нисә тапҡыр тәҡдим иткәйне. Сөнки проблемалар бар. Мәҫәлән, 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса 235 мең башҡорт туған телен татар теле тип атаны.

**▸ Мәктәптә гел Ҡаҙан дәреслектәре менән татарса уҡытылып, татар радиоһын тыңлап, Ҡаҙан телевидениеһын ҡарап, сит дәүләт мөхитендә йәшәгәнгәләр...**

- Шулайҙыр. Әммә Пермь өлкәһенең Барҙа районында гәйнә башҡорттары бар, улар ҙа шул төркөмгә керә. Уларҙың телен татар теле тип тә, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты тип тә була. Сәриә Миржанованың "Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты" тигән китабы бар. Ҡаҙандың Тел һәм әҙәбиәт институты директоры Мирфәтих Зәкиев тә ошо уҡ фекерҙе таный. Ә мин йәш саҡта Таһир Байышевты бик яҡшы белә инем. Уның менән бергә бер нисә йыл Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләнем. Бик һәйбәт кеше ине. Беҙҙең төньяҡ-көнбайыш райондарға ҙур-ҙур экспедициялар ойошторҙо. Уның отчеты беҙҙең ғилми архивта һаҡлана. 600-700 битлек отчет "Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты" тип атала. Ул татарлашҡан башҡорттарҙың телендә - лексикала, фонетикала бик күп башҡорт теле элементтары таба. 1979 йылдан алып 1989 йылға тиклем башҡорттар былай ҙа 120-130 мең кешегә кәмегән. Уны ҡайһы берәүҙәр башҡорт халҡының, йәнһе, бөтөн барыуынан, йәиһә миграциянан күрә. **Был райондарҙа башҡорттар кәмей, татарҙар күбәйә, йәғни ассимиляция, окультурация бара. Ә минең фекеремсә, Башҡортостанда башҡорт күпселек булмаһа ла, уларҙың һаны күберәк булырға тейеш. 22 процент түгел, 35-40 процентҡа күтәреү мөмкинлеге лә бар, минеңсә.**

**▸ Нисек итеп?**

- Бер яҡтан, ул процесс бара. Хәҙер башҡорттар йәшәгән бөтә ерҙә лә башҡорт кластары асыла, телде өйрәнеү ныҡлап ҡуйыла. Күптән түгел генә Саҡмағош районының Ҡарьяуҙы ауылына барҙым. Ул башҡорт ауылы, ләкин унда барыһы ла татарса һөйләшә. Ауылға Мәғариф министрлығынан комиссия килеп, балаларығыҙҙы ниндәй телдә уҡытаһығыҙ, тип һораған. Халыҡтың 50 процентын ашыуы, башҡорт телендә, тип яуап биргән.

**▸ Төньяҡ-көнбайыштың күп кенә ауылдарында ла шул уҡ һүҙҙәрҙе ишетергә мөмкин.**

- Бына шулай. Унан һуң, хоҡуҡи дәүләт закондары буйынса башҡорттар бөгөн ике телле һаналырға тейеш, сөнки халыҡ 300 меңгә яҡын булһа, аҙ һанлы халыҡ булып иҫәпләнмәй. Юғиһә, ҡайһы бер кешеләр, күсһендәр шулар, ти, татар милләтенә.

**▸ Юҡ, улар күсергә теләмәй.**

- Эйе, улар күсергә теләмәй шул. Беренсенән, үҙандары көслө һаҡланған, бер халыҡ иҫәбен алыуҙан икенсеһенә тиклем, быуаттар буйы шулай башҡорт булып һаҡланып киләләр. Уларҙы милләтенән өҙөп алып ташлау дөрөҫ булмаҫ, һеҙ был йәһәттән хаҡлы.

**(Дауамы 15-се биттә).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә йыл башынан алып сентябргә тиклем 10,7 мең бала тыуҙы. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 7,6 процентҡа күберәк. Ә бына үлем осраҡтары былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 6,6 процентҡа артҡан. Был йәйҙең аномаль эҫе килеүенең һөҙөмтәһе. Йәй көнө баш ҡалала йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан үлеүселәр һиҙелерлек күбәйҙе.

✓Наркотиктар менән көрәшкә һәр кем үҙ өлөшөн индерә ала. Бының өсөн (8(347)250-20-30, 8-800-347-20-30 һандарына ышаныс телефоны буйынса шылтыратып, наркотиктар һатыусылар тураһында хәбәр итергә генә мөмкин. Ошо юл менән бер аҙнала ғына 32 наркоенәйәт асыкланған, 32 енәйәт эше ҡуҙғатылған. 400 г героин, 2 кг марихуана, 150 г гашиш майы, 45 г гашиш тартып алынған. Улар өсөн наркотик һатыусылар 850 мең һум аҡса эшләр ине.

✓Өфөнөң 650 йортонда йәшәүселәр был арала коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү тураһындағы квитанцияларында "Энергоресурсҙарҙы иҫәпләү приборҙары ҡуйыу өсөн" тигән яңы юл өҫтәлгәнен күрер. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Ирек Ялалов әйтеүенсә, приборҙарҙы ҡуйыу федераль законға ярашлы тормошҡа ашырыла. Приборҙар ҡуйған өсөн түләү, мәҫәлән, бер бүлмәле фатирҙа йәшәүсе өс кешенән торған ғаилә өсөн айына уртаса 95 һум тәшкил итәсәк. Ошо режимда өфөләләр иҫәпләү приборы өсөн биш йыл буйы түләйәсәк. Ә был приборҙар ярҙамында 30 процентҡа тиклем энергоресурсҙарҙы экономияларға мөмкин буласаҡ.

✓Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһы идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, машиналарын иҫәпкә ҡуйырға йә иҫәптән төшөрөргә йыйынғандар өсөн автобаҙарҙа яңы теркәү бүлеге асылған. Ә РЭП-тарҙың эш ваҡыты киске 8-гә тиклем оҙайтылған.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендә Кадрҙар сәйәсәте һәм муниципаль хеҙмәт идаралығы булдырылды. Уның начальнигы Айгөл Сабирова әйтеүенсә, идаралыҡ эшенең төп маҡсаты - кадрҙар менән эште координациялау, Өфө территорияһында берҙәм кадрҙар сәйәсәте ҡағиҙәләре булдырыу. Шул ҡағиҙәләрҙең береһенә ярашлы, хәҙер муниципаль вазифаны һәр кем биләй ала, тик бының өсөн уға конкурс аша үтергә кәрәк.

✓ *Өфө ҡалаһында халыҡтың һаулығына бысраҡ һауа атмосфераһы айырыуса кире йоғонто яһай. 2009 йылда Өфө ҡалаһы һауаһы составында 15 зыянлы матдәнең ҡабул ителгән норманан артып китеүе күҙәтелгән.*



ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Нәсимә Күсемова Өфө ҡалаһында йәшәүселәрҙең көнитмешенә ҡағылышлы ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр еткерҙе.**

# ҺЫУЫБЫҘ НИСАУА,

## тик һауабыҙ бысраҡ...

**Өфөлә һыу һауаға ҡарағанда таҙараҡ.** Нәсимә Күсемова белдереүенсә, Өфө ҡалаһында халыҡтың һаулығына бысраҡ һауа атмосфераһы айырыуса кире йоғонто яһай. 2009 йылда Өфө ҡалаһы һауаһы составында 15 зыянлы матдәнең ҡабул ителгән норманан артып китеүе күҙәтелгән. Шул уҡ ваҡытта Өфөлә һыу менән хәлдәр күпкә яҡшыраҡ. 2009 йылда 194 мең сығанаҡтан алынған һыу өлгөһө санитар-химик күрһәткестәр буйынса тикшерелгән һәм бер тапҡыр ҙа норманан ситләшеү асыҡланмаған. Бактериологик тикшереүгә алынған 14 мең өлгөнөң тик 0,2 процентында ғына ситләшеү асыҡланған.

**Өфө ҡалаһында балалар республикала йәшәүсе тиңтерҙәренә ҡарағанда йышыраҡ ауырый.** Тотош республика менән сағыштырғанда Өфөлә балалар ауырыуҙары кимәле дүрт процентҡа юғарыраҡ. Шулай уҡ Өфө балалары араһында умыртҡа бағанаһының кәкерәйеү осраҡтары ла йышыраҡ. Бөтәһе 177 мең баланы үҙ эсенә алған тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, республика күрһәткестәренән айырмалы рәүештә, Өфө балалары араһында был сирҙән күберәк мәктәп уҡыусылары яфа сигә. Һуңғы йылдарҙа бәләкәй балалар араһында ла бындай осраҡтар артыуы күҙәтелә. Һуңғы ике йылда умыртҡа һөйәге менән бәйле ауырыуҙар мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында 3,5 тапҡырға артҡан.

**Өфөләләр һаулығы өсөн көнбағыш иң зарарлы ашамлыҡ тип табылған.** Өфөлә һатылыусы көнбағыш химик күрһәткестәре буйынса иң зарарлы ашамлыҡ тип табылған. 2009 йылда Өфөлә барлығы өс меңдән ашыу аҙыҡ-түлек өлгөләре тикшерелгән. Шуларҙың 44-е физик-химик күрһәткестәре буйынса нормаға тап килмәй. Көнбағыштан тыш, зарарлы аҙыҡ-түлек иҫәбенә консерва, балыҡ ашамлыҡтары, балалар өсөн ашамлыҡ, иҫерткес эсемлектәр һәм һыра индерелгән. Микробиологик күрһәткестәр буйынса, традицион булмаған технологиялар менән етештерелгән балыҡ, кулинария ризыҡтары һәм минераль һыу иң зарарлы ашамлыҡтар тип табылған.

**Өфө ҡалаһында демографик хәл.** Региональ мәғлүмәт фондының социаль-гигиена мониторингы (РИФ СГМ) мәғлүмәттәренән күренеүенсә, Өфө ҡалаһының медицина-демографик хәле ошондай: 2005-2009 йылдарҙа халыҡ иҫәбе 11375 мең кешегә кәмегән, уртаса алғанда был йылына 2,2 мең кешегә тиң. 2009 йылда был һан 3380 кешегә артҡан, үҫмерҙәр һаны ла күпкә кәмегән. Шул уҡ ваҡытта Өфөлә тыуым арта: 2005 йылда 1000 кешегә -10,9, 2009 йылда инде 13,5-кә еткән йәки 23,9 процент тәшкил иткән. Өфө ҡалаһында үлем осраҡтары тотош республика күрһәткестәре менән сағыштырғанда кәмерәк. Үлем осрағына алып килеүсе иң тәүге ауырыу - йөрәк-ҡан тамырҙары әйләнеше ауырыуҙары. Сабыйҙарҙың һәм бер йәшкәсә балаларҙың үлем осраҡтары йәмғиәттең һаулығын һәм социаль именлеген күрһәтеүсе мөһим фактор булып тора. Һуңғы йылдарҙа Өфөлә был күрһәткестәр буйынса кәмеү тенденцияһы күҙәтелә. Ғөмүмән, Өфө ҡалаһында демографик хәл тотороҡло тыуым артыуын, үлем осраҡтарының кәмеүен, халыҡтың тәбиғи үҫешенең ыңғай булыуын күрһәтә.

ИҪӘБЕБЕҘ МӨҺИМ...

# "ҺАУМЫҺЫҒЫҘ! МИН ҺЕҘҘЕҢ ИҪӘП АЛЫУСЫ"-

## Рәсәйҙә халыҡ иҫәбен алыу шундай сәләмләүҙән башланды

**Кесе йома көндө тотош ил буйынса сираттағы халыҡ иҫәбен алыуға старт бирелде. Баш ҡалала тәүгеләрҙән булып Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов һәм уның ҡатыны Гөлшат Хәмитова иҫәп алыусының һорауҙарына яуап бирҙе. Алдан уҡ белдереүенсә, республика башлығы үҙенең башҡорт булыуын һәм туған теле тип башҡорт телен һанауын теркәтте. Бынан тыш, Президент рус телен дә камил белә, инглиз телендә лә иркен һөйләшә ала, юғары белемле һәм фән докторы дәрәжәһенә эйә. Иҫәп алыусының һорауҙарына яуап биргәндән һуң, Рөстәм Хәмитов һорауҙарҙың ябай һәм аңлайышлы булыуын, был сараны артыҡ сәйәсиләштерергә ярамағанлығын, ә уның мөһимлеген һәр кем аңлап ҡабул итергә тейешлеген әйтеп үтте.**

Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу 25 октябргә тиклем дауам итәсәк. Ошо ваҡытта республика буйынса барлығы 631 иҫәп алыу участкаһы, 2,5 мең инструктор һәм 10 меңдән ашыу төп иҫәп участкалары эшләйәсәк. Шулай уҡ һорауҙар килеп тыуһа, уларҙы **8-800-347-11-02** "ҡыҙыу бәйләнеш" телефоны буйынса иртәнге туғыҙҙан киске һигеҙгә тиклем бирә алаһығыҙ. Абонент өсөн шылтыратыу - бушлай.

2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙан айырмалы, был юлы анкетаға белем кимәле тураһындағы һорау өҫтәлгән. Йәғни кеше юғары белемле икән, унан мотлаҡ рәүештә кем булыуын - бакалавр, белгес, магистр - асыҡлаясаҡтар. Кемдәр белемде мәғарифтағы реформаға тиклем алған, улар үҙҙәрен белгес, тип кенә яҙҙырасаҡ. Бындай өҫтәмә һорауҙарҙың индерелеүе - заман талабы, сөнки тормош бер урында ғына тормай. Ә халыҡ иҫәбен алыу тап халыҡ тормошондағы айырмалыҡтарҙы асыҡларға, властың ысынбарлыҡ һәм уйҙырма араһында айырма барлыҡҡа килеүе тураһында иҫкәртергә тейеш. Был бик мөмкин, әммә иҫәп алыуға сәйәсәтте ҡатыштырмағанда ғына.

Юҡһа, илебеҙҙә ниндәй генә кампания булмаһын, быны тиҙ генә сәйәсиләштерергә әҙер торалар. Был бер бөгөн генә килеп тыуған хәл түгел, уның тамырҙары тәрәндә ята. Мәҫәлән, 1937 йылда власть иҫәп алыуҙы ойоштороусыларға үҙенең идеологик ҡараштарына тап килгән халыҡ бәхете параметрҙарын әйтеп ҡуя. Халыҡ, партия һәм хөкүмәт ҡушыуы буйынса, йылдан-йыл яҡшыраҡ һәм күңеллерәк йәшәргә тейеш була. Сталин һорау алыу ҡағыҙҙарын шәхсән тикшереп, дөйөм картинаны боҙорлоҡ йәки "насар" социаль процестарҙы асыусы пункттарҙы алып ташлай. Ләкин ысынбарлыҡ бөтөнләй икенсе булып сыға (иҫәп алыуҙарҙан һуң хаҡлыҡ ике яҡлы булғаны ябай миҫалда ла күренә: гәзиттә, ғаиләле ҡатындар ғаиләле ирҙәргә ҡарағанда күберәк йәки ир менән ҡатын бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәп тә, айырылған булыуы мөмкин). Һөҙөмтәлә иҫәп алыуҙы ойоштороусылар "халыҡ дошманы" тип репрессиялана. Иҫәп алыу ҡабат уҙғарылып, уныһы халыҡтың бәхетле тормошонда "социалистик төҙөлөштөң киң ҡолас алыуын" асыҡлай.

Бөгөн дә Рәсәйҙең рәсми сығанаҡтары күрһәткән илдең иҡтисады һәм демократияһы халыҡ-ара бойондороҡһоҙ сығанаҡтар күрһәткесенән ныҡ айырыла. Мәҫәлән, БМО-ла ҡабул ителгән мөһим күрһәткестәр буйынса Рәсәй үҫешкән илдәрҙән генә түгел, хатта бик күп үҫешеүсе илдәрҙән етди ҡалыша. Ә "дәүләт идараһы һөҙөмтәлелеге"нең дөйөмләштереүсе индексы буйынса Иран йәки Венесуэла кеүек илдәр кимәлендә тора, Африканан әллә ни алға китмәгән. Сөнки исем алышынып, ҡоролош үҙгәрһә лә, идара итеү системаһы һаман элекке ҡалыплашҡан юлдан алып барыла.

Хәйер, аптырайһы ла түгел, халыҡ иҫәбен алыуға тотонолған сығымдарҙы ла экономиялайбыҙ. Башҡортостанда был сараны уҙғарыуға 200 миллион самаһы аҡса бүленгән. Был аҡса, нигеҙҙә, иҫәп алыусыларға эш хаҡын түләүгә китәсәк. Ошо осорҙа иҫәпсе булып эшләүселәр уртаса 5000 эш хаҡы аласаҡ. Бынан тыш, Рәсәй бюджетынан урындағы үҙидара органдарына субвенция сифатында тағы ла 62 миллион һум бүленгән. Ә сит илдәрҙә был сумма күпкә юғары.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нисек кенә тимәйек, иҫәп алыуҙарһыҙ илдең нисек йәшәгәнен, нисә милләт һәм халыҡ барлығын, белемлеләрҙең һәм асарбаҡтарҙың һанын белеп, һөҙөмтәлә иҡтисади сәйәсәтте лә күҙаллап, тотороҡлолоҡ булдырып, бәхетле тормошта йәшәү мөмкин түгел.**

**Шәрифә ЙӘНТҮРИНА.**



## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Сентябрҙә Өфөнән ситтәге йорттарға һәм коттеджларға хаҡ 1,5 процентҡа артҡан һәм бер кв метрына 27,1 мең һум тәшкил иткән. Ә ер участкаһына хаҡтар 5 процентҡа арзанайған, йәки сотыйы 53,7 мең һум булған. Бөгөн Иглин кеүек ҡасабала 30 кв метрлы йортто 900 мең һумға һатып алып була. Ә Зубовола 420 кв метр майҙанлы йорт 17 млн һум тора.

✓ Баш ҡаланың Ленин районында прокуратура, милиция, һалым инспекцияһы ҡомарлы уйын эшмәкәрлеге өлкәһендәге законлылыҡты тикшерҙе. Мәҫәлән, "Леон" һәм "Росар" лотерея клубтарында лотерея уйнатырға тейештәр һымаҡ ине. Әммә бында уйын контрафакт билдәләре булған программа ҡуйылған ҡоролмаларҙа тормошҡа ашырылыуы асыҡланды. Тикшереү һөҙөмтәһендә ошондай 58 ҡоролма тартып алынды, клуб хужаларына енәйәт эше ҡуҙғатылды.

✓ Өфө ҡала округы хакимиәтенең Муниципаль милек менән идара итеү буйынса комитеты ер участкаһы булыуы-булмауы тураһында белешмә алыуҙың электрон системаһын булдырҙы. Граждандар был хеҙмәт төрө менән www.kums-ufa.ru сайтында "Белешмә алыуға ғариза" тигән бүлектә таныша ала. Бынан тыш, Комитеттың рәсми сайтында үҙеңдең бурыстарың тураһында белергә, Комитет рәйесе Рәмил Дилмөхәмәтовҡа муниципаль милеккә ҡағылышлы һорауҙар биреп була.

✓ Башҡортостандан был көҙҙә 12360 кеше Рәсәй армияһы сафтарына хеҙмәт итергә китәсәк. Саҡырылыш 16 октябрҙән старт ала. Һалҡын тейҙереп ауырыусылар терелгәнгә тиклем өйҙәренә ҡайтарыласаҡ. Башҡортостан территорияһындағы хәрби часта хеҙмәт итеүгә был юлы тәжрибә рәүешендә республиканың үҙенең егеттәре генә ҡалдырыласаҡ. Беренсе сиратта бында ата-әсәһе пенсионер булғандар, өйләнгәндәр, балаһы булғандар ҡалдырыласаҡ.

✓ Өфөлә "Урал" халыҡ ижады галереяһында "Ҡорама-туй" Республика ҡорама фестивале старт алды. Унда Башҡортостандың төрлө төбәктәренән оҫталар ҡатнаша. Сара октябрь аҙағына тиклем дауам итәсәк.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

**Республикабыҙҙың урта һәм башланғыс профессиональ белем биреү системаһы үҙ эсенә 98 башланғыс һәм 93 урта профессиональ белем биреү учреждениеһын ала. Улар бөтәһе бергә илебеҙгә йыл һайын йөҙ меңдән ашыу профессиональ белгес әҙерләп сығара. Әгәр был уҡыу йорттарында уҡытыу сифаты юғары һәм сығарылыш уҡыусылары үҙ һөнәренә тоғро ҡала икән, тимәк, бигерәк тә етештереүсе тармаҡтар белгестәрһеҙ ҡалмаясаҡ, тигән һүҙ. Стәрлетамаҡ ҡалаһында профессиональ башланғыс һәм урта белем биреү учреждениелары етәкселәренең республика кәңәшмәһенә йыйылыусылар тап ошо турала - кадрҙар әҙерләүҙең сифатын күтәреүгә йүнәлтелгән саралар, проекттар тураһында һөйләште. Түбәндә беҙ кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙың бер нисәүһенең фекерен тәҡдим итәбеҙ.**



# СТАНОКТАР АРТЫНА...

## осраҡлы эшселәр баҫмаһын өсөн

**Илшат БУРАНҠАЕВ, Мәсетле районы 153-сө һөнәрселек училищеһының директор урынбаҫары:** Профессиональ белем - ул юғары, урта махсус һәм профессиональ-техник уҡыу йорттарында, шулай уҡ махсус курстарҙа уҡып алған һөнәри белем. Бөгөнгө көндә шундай күренеш күҙәтелә: мәктәпте тамамлаған һәр уҡыусы юғары белемгә ынтыла, хатта унын теләге булмаған осраҡта ла, ата-әсәһе уны көсләп юғары уҡыу йортона уҡырға индерә. Юғарыла һанап үтелгән сәбәптәр арҡаһында һуңғы йылдарҙа беҙҙең һөнәрселек училищеһында уҡыусылар һаны кәмене. Беҙ уларҙы тәрләсә үҙебеҙҙең училищеға йәлеп итергә тырышабыҙ. Югиһә, барыһы ла уҡытыусы йә табип булып бөтһә, завод-фабрикаларҙа кем эшләр, кем ер һөрөр һәм эшкәртер? Киләсәктә илебеҙ үҫешһен, иҡтисади базабыҙ ныҡлы булһын өсөн беҙ нәҡ профессиональ йүнәлештә белгестәр әҙерләргә бурыслыбыҙ.

**Ришат ӘБДЕЛВӘЛИЕВ, Әлшәй районының Аксен ауыл хужалығы техникумы директоры:** Беҙ умартасы, ветеринар, зоотехник, агроном кеүек ауыл хужалығында кәрәкле белгестәр әҙерләйбеҙ. Техникум быға тиклем уҡыусыларға ҡытлыҡ кисергәне юҡ, матди база ла йылдан-йыл нығына бара. Бөгөнгө көндә ауыл хужалығына кәрәкле һөнәрҙәрҙе үҙләштереүселәр һаны арта, бигерәк тә агрономияға килеүселәр һаны күп. Был беҙҙе ҡыуандыра, тимәк, киләсәктә ауыл ерендә эшләп, ауыл хужалығын үҫтереүселәр күбәйәсәк. Тимәк, ауылдар бөтә, тигән хәбәр ҙә буш һүҙ булып ҡаласаҡ.

**Рәшит БАЯНОВ, Сибай ҡалаһының 24-се профессиональ лицейы директоры урынбаҫары:** Мин профессиональ лицейға уҡытырға килгәнгә тиклем производствола эшләгәнмен. Шул ваҡытта беҙҙә квалификациялы эшсе кадрҙар етешмәй ине. Үҙем профессиональ лицейға уҡытырға килгәс, ысынлап та, кадрҙар әҙерләү проблемаһы барлығына инандым. Ул проблема башлыса уҡыу йорттарының матди базаһы иҫкереүгә бәйле. Тимәк, иң тәүҙә техникум, училищеларҙа матди базаны яҡшыртырға, заманса шарттар тыуҙырырға кәрәк. Шулай уҡ уҡыусыларға төплө, нигеҙле белем бирерлек талапсан уҡытыусылар ҙа кәрәк. Ә дөйөм алғанда, уҡыусыларға ҡытлыҡ кисергәнебеҙ юҡ. IX кластан һуң беҙгә үҙ теләктәре менән түгел, балаларҙы күбеһенсә ата-әсәһе алып килә. Ә бына XI кластан һуң уҡыусылар үҙ теләге менән, ысынлап та үҙҙәре теләгән һөнәрҙе үҙләштереү маҡсатында уҡырға килә.

**Дамир ӘБҮБӘКИРОВ, Учалы сәнғәт училищеһы директоры:** Һуңғы йылдарҙа абитуриенттар һаны кәмеүе бер аҙ күнелде төшөрә. Бының сәбәптәре бер нисә: беренсенән, беҙҙеке кеүек уҡыу йорттары күбәйҙе, икенсенән, был проблема демографик хәлгә лә бәйле - нәҡ 1991-1993 йылдарҙа тыуым һаны әҙ булғайны. Шуға ҡарамаҫтан, үҙебеҙҙең уҡыу йортона абитуриенттарҙы нисек тә йәлеп итергә тырышабыҙ. Беҙҙең училищены тамамлаған студенттар артабан уҡыуҙарын Өфө дәүләт сәнғәт академияһында һәм башҡа юғары уҡыу йорттарында дауам итә. Бәлки, күптәр урта белем биреү йорттарында уҡыуҙы ваҡыт әрәм итеү, тип һанайҙыр, әммә, минеңсә, нәҡ ошо уҡыу йорттарында белем тәрәнерәк бирелә. Шуға күрә баланың башта урта йәки башланғыс белем алыуында бер ниндәй ҙә зыян юҡ.

**Шулай итеп...**
**Ысынлап та, проблема бар. Мәктәпте тамамлаусыларҙың барыһының да юғары уҡыу йорттарына ынтылыуы, квалификациялы эшселәр әҙерләүсе уҡыу йорттарының уҡыусыларһыҙ ҡалыуы... завод станоктары артына осраҡлы кешеләр баҫыуына килтерә. Был сифатһыҙ тауарҙар етештереүгә генә түгел, ә тотош производствола хәүефле шарттар тыуҙырыуға ла булышлыҡ итә. Тимәк, кәңәшмәлә күтәрелгән мәсьәлә урынлы: бөтә ил буйынса профессиональ уҡыу системаһын яңынан аяҡҡа баҫтырырға, уны яңы технологиялар ҡулланып, яңы алымдар индереп, заман талаптарына яраҡлаштырырға.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## ИНЕРҘӘН АЛДА СЫҒЫРЫН УЙЛАҺЫН

**Фатирыма кеше индергәйнем, хәҙер сығара алмайым. Яҙма килешеү төҙөмәнек, бер йылға тип үҙ-ара ғына һөйләшеп килештек. Был фатир хәҙер минең үҙемә ашығыс кәрәк, килһәм, эстән ишек бикле, асмайҙар, асҡыстарҙы бирмәйҙәр. Уларҙы нисек сығарырға?**

- Фәҡәт суд аша. Фатирығыҙ урынлашҡан район судына юллау ғаризаһы менән мөрәжәғәт итегеҙ. Әгәр яуап тотоусылар иғтибарға алырлыҡ сәбәпһеҙ суд ултырышына килмәһә, суд эште улар ҡатнашлығынан башҡа ла ҡарай ала.

## ӘХИРӘТЕМДЕ ЯҘҘЫРҺАМ...

**Икенсе ҡаланан әхирәтем килде, мин уны үҙемдең фатирға теркәргә уйлайым (бер үҙем йәшәйем). Эшкә урынлашып, аҡса туплағас та үҙемә торлаҡ табырмын, тип вәғәҙә итә. Тик аҙаҡ уны ҡаршылыҡһыҙ ғына фатирҙан сығара алырмынмы икән?**

- Теркәүҙән төшөрөү мәсьәләһен суд хәл итә. Һеҙгә юллау ғаризаһы яҙып, суд ҡарарын көтөргә кәрәк буласаҡ.

## ТАЛАП ИТӘ АЛАҺЫҒЫҘ

**Шаһит булараҡ, мине тәфтишсегә һорау алырға саҡырттылар, унда биш сәғәтләп эш ваҡытымды сарыф иттем. Повестканы эшкә килтереп биргәс, етәксе, был ҡағыҙ кисәге өсөн эш көнөнә түләмәйәсәкбеҙ, тип белдерҙе. Был нисек була инде - мин допросҡа үҙ иҫәбемә йөрөп ҡайтыумы?**

- Эш биреүсе был осраҡта хаҡлы түгел. Әлеге повестканы, һорау алыу протоколы күсермәһе менән еңәйәт эше номерын ҡушып, тикшереү бүлегендә үткәрген эш ваҡытығыҙ өсөн түләүҙе суд тәртибендә талап итә алаһығыҙ.

## НИСЕК АЙЫРЫЛЫШЫРҒА?

**Айырылышыуға ғариза бирергә йыйынғанһы, ирем ғариза бирер тә үлгөргән. Нисек инде? Никах тураһында таныҡлыҡ (төп нөсхәһе) миндә ине. Бәлки, аңлатырһығыҙ: айырылышыу өсөн ниндәй документтар кәрәк?**

- Ир менән ҡатындың икеһененң дә ризалығы менән бергәләп ғариза яҙғас, ЗАГС-та ла айырылышырға мөмкин. Ә инде уларҙың береһе ҡаршы булһа, эште суд ҡараясаҡ. Судҡа юллау яҙғанда, никах тураһында таныҡлыҡтың төп нөсхәһе, шулай уҡ дәүләт пошлинаһы түләү хаҡында квитанция кәрәк. Таныҡлыҡ юғалған хәлдә, ЗАГС-тан унын дубликатын алырға мөмкин. Ирегеҙ тап шулай эшләгән дә, күрәһең.

## БИШ ЙЫЛ ҮТКӘН БУЛҺА

**Район хакимиәтендә торлаҡ алыуға сиратым етте. Ләкин мине торлаҡҡа мохтаждар исемлегендә булған осорҙа юрамал торлаҡ шарттарын насарайтыуҙа ғәйепләү ташлайҙар, йәнәһе, фатирҙы алмаштырып, мин торлаҡ майҙанын кәметкәнмен. Ә ниңә, был ярамай инеме ни?**

- Эйе. РФ Торлаҡ кодексының 57-се статьяһына ярашлы, гражданға социаль яллау килешеүе буйынса торлаҡ бирелгәндә, биләгән торлаҡ майҙанының кәмеүенә йә иһә уның башҡа төрлө ситләтелеүенә килтергән ғәмәлдәр һәм гражданлыҡ-хоҡуҡи килешеүҙәр иҫәпкә алына. Әйтелеп үткән был ғәмәлдәр һәм килешеүҙәр гражданға торлаҡ бирелерҙән алдағы Рәсәй Федерацияһы субъекты законы билдәләгән осор иҫәпкә алына, ләкин ул биш йылдан да кәм булмаған осраҡта.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



## Йөрәк ауыртҡанда

Сама менән бер ҡалаҡ ҡырҡаяҡ үләненә (мокрица) 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, тағтамалға урап 6 сәғәт төнәтергә. Ашар алдынан 30 минут алда ярты-шар стаканлап көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә. Дауаны 2-3 аҙна дауам итергә.

Тағы ла бер рецепт. Гөлйемешкә ярты литр һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәткәндән һуң, һөҙөгөҙ. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Дауалау курсы - бер ай.

## Организмды таҙартыу

Үт юлдарын таҙартыу һәм үтте организмдан сығарыу өсөн: ярты литрлы банка менән таҙартылмаған һоло алығыҙ һәм яҡшылап йыуығыҙ. Уға 4 литр һыуыҡ һыу ҡойғас, 40 минут бешерергә. Һыуынғас, һөҙөргә һәм һыуытҡысҡа ҡуйырға. Ҡулланыр алдынан мотлаҡ йылытырға. 1-2 балғалаҡ бал өҫтәп, көнөнә 4 тапҡыр 250 мл-лап ашар алдынан эсергә.

1 балғалаҡ әремде 200 мл һыуҙа төнәтергә, ашар алдынан 20 минут алда 25-30 мл эсергә. Бер аҙна эскәс, бер аҙна ял итергә. Ошо рәүешле 2 ай дауаланырға.

Еләк ҡанды яҡшы таҙарта. Дауалаunion өсөн урман еләге, баҡсаныҡы ла ярай. Еләк өлгөргән саҡта (әгәр ҙә аллергия булмаһа) уны 8 килограмға тиклем ашарға мөмкин.

## Трофик язванан дауа

Был ҡатнашманы әҙерләү өсөн түбәндәге майҙар кәрәк: гиоксизон (мазь) - 1 тюбик (10 г); гентамицин (мазь) - 1 тюбик (15 г); синафлан (мазь) - 1 тюбик (15 г); митилурацил (мазь) - 25 г; стрептоцид (порошок) - 4 пакет (һәр пакетта 2-шәр грамм); вазелин - 3 тюбик (30-ар грамм).

## Баш шаулаһа

1 кг лимонды ит турағыстан үткәрергә һәм 1 кг бал менән бутарға. Ҡатнашманы банкаға һалып, һыуытҡысҡа ҡуйырға һәм көн һайын ашар алдынан 1 ҡалаҡ ашарға. Баш шаулауы баҫылғансы дауаны дауам итергә.

*✓ БАССР-ҙа татарҙарҙың һаны артыуы, бер яҡтан, 1939 йылда мишәрҙәрҙең һәм типтәрҙәрҙең татарҙар составында иҫәпләнеүе менән аңлатылһа, икенсе яҡтан - башҡорттарҙың ассимиляцияланыуы һөҙөмтәһе.*




## ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Аралашыу ҡағиҙәһе

● Халыҡ тураһында яҡшы фекерҙә булығыҙ. Яҡшы эштәрҙе генә һөйләгеҙ. Яман эштәрҙе йәшерегеҙ. Үлгәндәр хаҡында изгелектәренән башҡа иҫкә алмағыҙ. Кешеләр менән аралашыуығыҙ шулай булһын. Донъяла торғанда һеҙҙе һөйһөндәр, вафат иткәндә юҡһынһындар, ҡайғырып илаһындар.

● Халыҡҡа ярҙам итеү зарур ваҡыттарға бәйле. Башҡа ваҡытта һис кем башҡаға һалынып тороуы дөрөҫ түгел. Шуның өсөн кешеләргә һалынмағыҙ, уларҙың малдарына ауыҙ асмағыҙ. Үҙ ризығығыҙҙы үҙегеҙ эҙләгеҙ, үҙегеҙ үҙегеҙҙе ҡарағыҙ.

● Антығыҙға тоғро булығыҙ. Вәғәҙәләрегеҙҙе үтәгеҙ. Дуҫтарығыҙға тоғро булығыҙ. Кешеләрҙең ҡайғы һәм шатлыҡтарын уртаҡлашығыҙ. Үҙегеҙ яратмаған әйберҙәрҙе уларға эшләмәгеҙ. Әгәр аралашыуығыҙ бындай нигеҙгә ҡоролһа, арағыҙҙа яҡшылыҡ хөкөм һөрөр, дуҫлыҡ урынлашыр.

● Халыҡ һәм хаҡлыҡ өсөн үткәргән ваҡытығыҙҙы юғалтыу тип иҫәпләмәгеҙ. Сөнки башҡаларҙы һөйөү, уларға ярҙам биреү, уларҙың етештерә алмаған ерҙәрен етештереү бөйөклөк һәм кешелеклелек билдәһеләр.

### Йәмғиәт ҡағиҙәһе

Тәндең ағзалары бер-береһенә мохтаж кеүек, был донъяла йәшәгән осорҙа әҙәм балаһы ла тормош көтөү өсөн бер-береһенә мохтаждыр. Кешеләр бергә йәшәгәндә ихтыяждары эшләнер, хаҡтары үтәлер, нәҫелдәре сәләмәт ҡалыр. Бергә йәшәүҙең әҙәбе һәм шарттары, ҡағиҙә һәм ҡанундары була, уларға иғтибарлы булырға кәрәк. Шуның өсөн бер-берегеҙҙе һәр ваҡыт хөрмәт итегеҙ. Аралашҡанда инсафлы булығыҙ. Йәмғиәт ҡағиҙәләрен үтәгеҙ. Үҙегеҙҙең файҙағыҙ өсөн башҡаларҙы йәберләмәгеҙ. Эштә тотанаҡлы булығыҙ.

● Бергә йыйылыуҙың маҡсаты - бер кеше эшләй алмаған эштәрҙе эшләү, ярҙам итешеү һәм кәрәкле кәңәштәр бирешеү, милләт, ватан хеҙмәттәрен уртаҡлашыу. Шуның өсөн бындай сәғәттәрҙә ярҙам күрһәтеүҙе, бындай эштәргә ҡатнашыуҙы йәнегеҙ өсөн шөкөр тип белегеҙ. Әҙәм балаһы бер үҙе аҙ булһа, ҡарындаш һәм дуҫтары менән күп була. Әгәр бындай сәғәттәрҙә йәмғиәткә хеҙмәтегеҙ теймәһә, барлығығыҙға ҡарағанда юҡлығығыҙ артыҡтыр.

● Шәриғәт бойорған өлөштәрҙе дин һәм милләт файҙаһы өсөн сарыф иткән кешеләр, гүйә әхирәттә алыу шарты менән Йәнәб-и Аллаһҡа бурыс биргән кеүек булырҙар. Әгәр һеҙ ошоно иҫәпкә алып, малығыҙҙан өлөш сыҡҡан булһа, дин һәм милләт файҙаһына ҡулланығыҙ. Донъяла шөкөр һәм рәхмәт ишетерһегеҙ һәм әхирәттә тулыһынса, бәлки, артығы менән ҡайтарып алырһығыҙ.

● Мосолман кешенең теленән, ҡулынан мосолмандар сәләмәт булырға тейеш. Шуның өсөн телегеҙ, ҡулығыҙ һәм хәрәкәтегеҙ менән мосолмандарҙы рәнйетмәгеҙ. Юлға сыҡмаҫтан элек юлдаш табығыҙ. Йорт алмаҫ борон күрше алығыҙ. Кеше көлдөрәсәк һүҙҙе һөйләмәгеҙ. Ҡул аҫтығыҙҙа булғандарҙың холоҡ һәм фиғелдәрен һаҡлағыҙ.

**(Дауамы бар).**

ИҪӘБЕБЕҘ МӨҺИМ

# БАШҠОРТОСТАН, ЭЙЕ, КҮП МИЛЛӘТЛЕ,

## әммә унда башҡорт - аҫаба!




### Тамырҙарҙы биш йылда онотоу мөмкинме?

1926 йылда (Оло Башҡортостан ойошторолғандан һуң 3,5 йыл үткәс) беренсе Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу уҙғарыла һәм ул беренсе тапҡыр илдең бар территорияһын да солғап ала. Иҫәп алыу мәғлүмәттәре башҡорт халҡының 1920 йыл менән сағыштырғанда 300 мең кешегә кәмеүен күрһәтә (таблицаны ҡара).

1926 йылғы халыҡ иҫәбен алғанда Башҡортостан Үҙәк статистика идаралығының СССР Үҙәк статистика идаралығы тарафынан раҫланған инструкцияһына ярашлы, мишәрҙәр һәм типтәрҙәр татарҙарҙан айырым иҫәпләнә. Ул ваҡытта республикала 136 мең мишәр һәм 23,3 мең типтәр була. Таблицала улар татарҙар иҫәбенә ингән. Әгәр уларҙы алһаҡ, татарҙарҙың һаны 461,9 мең кеше була, йәғни республиканың аҫаба халҡынан 164 мең кешегә кәмерәк.

1926 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мишәрҙәр һәм типтәрҙәр тарихында уларҙы айырым иҫәпләүҙең һуңғыһы була. Артабанғы иҫәп алыуҙарҙа улар (Учалы типтәрҙәренән тыш) татар булып теркәләләр.

Һуғышҡа тиклемге ҡабат уҙғарылған иҫәп алыу мәғлүмәттәре буйынса, СССР-ҙа 843,6 мең, шул иҫәптән РСФСР-ҙа - 824,7 мең, Башҡорт АССР-ында 671,2 мең башҡорт иҫәпләнә. БАССР-ҙа татарҙар һаны 777,2 мең кеше тәшкил итә. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, 1926 - 1939 йылдарҙа (иҫәп алыуҙар араһында) республикала аҫаба халыҡтың һаны ни бары 45,3 мең кешегә, ә татарҙар 315 меңдән ашыуға арта. БАССР-ҙа татарҙарҙың һаны артыуы, бер яҡтан, 1939 йылда мишәрҙәрҙең һәм типтәрҙәрҙең татарҙар составында иҫәпләнеүе менән аңлатылһа, икенсе яҡтан - башҡорттарҙың ассимиляцияланыуы һөҙөмтәһе. 1920 йылда Өфө губернаһының 156,8 мең башҡорт иҫәпләнгән Минзәлә өйәҙе яңы ойошторолған (РСФСР Совнаркомының һәм ВЦИК-тың декреты буйынса) Татар АССР-ына бирелә. Биш йылдан саҡ ҡына ашыуыраҡ ваҡыттан һуң (1926 йылғы иҫәп алыуҙа) башҡорттарҙың өйәҙҙә ни бары 1752 кеше булыуы асыҡлана. Икенсе төрлө әйткәндә, биш йыл эсендә 155 мең башҡорт, үҙҙәренең боронғо тамырҙарын онотоп, татар булып китә. Был хәл хатта йөҙәр йылдар дауамында ла булырға мөмкин түгел, был хаҡта Пермь (ғәйнә) башҡорттарының тарихы раҫлай.

Ғалимдарҙың тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, 1939 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдарында башҡорттар буйынса мәғлүмәттәр кәметелгән (РФА мөхбир ағзаһы Р. Ғ. Кузеев), ә Башҡорт АССР-ында татарҙар буйынса - арттырылған (Р. Ғ. Кузеев, З. М. Дәүләтшина. "Башҡортостандың татар халҡы" монографияһы).

XIX быуат һуңында 9,5 мең башҡорт иҫәпләнеп, 1924 йылда Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһына күсенергә теләк белдереүе билдәле булһа ла, 1939 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙың матбуғатта баҫылған төп йомғаҡтарында Куйбышев (хәҙерге Һамар) һәм Һарытау өлкәләрендә башҡорттар бөтөнләй юҡ.

Молотов (хәҙерге Пермь) өлкәһендә халыҡ иҫәбен алыу ни бары 28,9 мең башҡортто ғына иҫәпкә ала, был ысынбарлыҡҡа тап килмәй: 1920 йылда Пермь, Көнгөр, Оса һәм Усольск (Соликамск) өйәҙҙәрен үҙ эсенә алған Пермь Кама буйында 48,4 мең башҡорт теркәлә. Тулы булмаған ике тиҫтә йылда (1920 йылдың августынан 1939 йылдың ғинуарына тиклем) автохтон халыҡты бер ярым тапҡырға кәметеү дөрөҫлөккә тап килмәй.

1939 йылғы иҫәп алыуҙа Татар АССР-ы (Минзәлә өйәҙендә 1897 йылда 199 мең башҡорт була, ә 1920 йылда - 156,8 мең), Вятка губернаһы (1897 йылда - 13,9 мең) башҡорттары иҫәпкә алынмай.

Һөҙөмтәлә үҙенең этник тыуған ерендә башҡорттар татарҙарға ҡарағанда әҙерәк килеп сыға.

### Иҫәпте һуғыш ҡына кәметмәй…

Киләһе халыҡ иҫәбен алыу 1959 йылда уҙғарыла. Уның үҙенсәлеге шунда: ул кешелек тарихындағы иң ҡан ҡойошло, төп юғалтыуҙарҙы илебеҙ кисергән һуғыштан, шулай уҡ һуңғы иҫәп алыуҙан һуң 20 йыл үткәс ойошторола.

Иҫәп алыу мәғлүмәттәре буйынса, республика халҡы 3336,2 мең кеше тәшкил итә (һуғышҡа тиклем - 3337 мең). 1959 йылда үҙенең 40 йыллығын билдәләгән республикала рустар (1418, 1 мең), татарҙар (768,6 мең), башҡорттар (737, 7 мең), сыуаштар (11,0 мең), мариҙар (93,9 мең), украиндар (83,6 мең), шулай уҡ мордвалар, удмурттар, белорустар, немецтар, йәһүдтәр, ҡаҙаҡтар, латыштар, әрмәндәр һ.б. йәшәй. 1939 йылдан 1959 йылға тиклем рустарҙың һаны 136,7 меңгә, башҡорттарҙыҡы 66,5 меңгә арта, ә татарҙар 8,6 меңгә кәмей. Был мәғлүмәттәр ҡайһы бер ғалимдарҙың 1939 йылда БАССР-ҙа татарҙарҙың статистик мәғлүмәте һиҙелерлек арттырылған булыуы тураһындағы фекерен раҫлай.

Артабанғы иҫәп алыу 1970 йылда уҙғарыла. Уның мәғлүмәттәре буйынса, СССР-ҙа 1240 мең башҡорт, шул иҫәптән Башҡортостанда 892, 2 мең башҡорт йәшәй. Шулай уҡ башҡорттар Силәбе, Пермь, Ырымбур, Свердловск, Куйбышев, Һарытау, Ҡурған һ. б. ҡасандыр үҙҙәренең этник тыуған иле булған өлкәләрҙә, Ҡаҙағстанда (21,4 мең), Үзбәкстанда (20,8 мең), Таджикстанда (4,8 мең), Ҡырғыҙстанда (3,2 мең), Төркмәнстанда (2,6 мең), Украинала (3,7 мең), Татар, Удмурт, Коми АССР-ҙарында йәшәй. 1959 йылдан 1970 йылға тиклем Советтар Союзында башҡорттарҙың һаны 251 мең кешегә (25,4 процентҡа), Башҡортостанда - 154 меңгә (20,1 процентҡа) республиканан ситтә - 97 меңгә (38,6 процентҡа) арта.

Үткән быуаттың 60-сы йылдарында республика халҡы йылына уртаса 1,3 процентҡа артҡан. Артабанғы ун йыллыҡта уның үҫеш темпы һиҙелерлек кәмей. Был ниндәйҙер кимәлдә халыҡтың күпләп республиканан ситкә китеүе көсәйеүе менән аңлатыла. 1960 йылдарҙа йылына уртаса миграция (китеүселәр һаны килеүселәр һанынан артып китә) 19 мең кеше була. 1959 - 1970 йылдарҙа көслө миграция һөҙөмтәһендә республика 230,6 мең кешеһен юғалта.

| Кантондар | Бөтөн халыҡ | Шул иҫәптән | | |
|---|---|---|---|---|
| | | рустар | башҡорттар | татарҙар* |
| Өфө | 568494 | 309068 | 57552 | 98906 |
| Арғаяш | 100851 | 31897 | 40984 | 27602 |
| Бәләбәй | 556681 | 142470 | 118152 | 192719 |
| Бөрө | 535647 | 148536 | 177812 | 121238 |
| Йылайыр | 195036 | 81894 | 80784 | 10884 |
| Мәсәғүт | 160219 | 86371 | 41521 | 27173 |
| Стәрлетамаҡ | 429490 | 194054 | 73187 | 89613 |
| Тамьян-Ҡатай | 119419 | 70417 | 35854 | 12483 |
| Йәмғеһе | 2665837 | 1064707 | 625845 | 621121 |
| | | -39,90% | -23,50% | -23,30% |

* Татарҙар иҫәбенә мишәрҙәр һәм типтәрҙәр индерелгән.

Һөҙөмтәлә 1979 йылғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу республикала 3848,6 мең, 1970 йыл менән сағыштырғанда ни бары 30,5 меңгә генә күберәк, кешене иҫәпкә ала.

1970 йылдан 1979 йылға тиклем республиканың этник структураһы бер ни тиклем үҙгәреш кисерә. 1979 йылда башҡорттар республика халҡының 24,3 процентын тәшкил итә, рустар - 40,3 процент, татарҙар - 24,5 процент, сыуаштар - 3,2 процент, мариҙар - 2,8 процент, украиндар - 2,0 процент, мордвалар - 0,9 процент. Башҡа халыҡтарҙың һаны (башҡорттар менән рустарҙан тыш) һиҙелерлек кәмей: мордва, сыуаш, удмурт һәм татарҙар - 4,1 мең кешегә (1970 йылда 944,5 мең булһа, 1979 йылда 940,4 мең). Аҫаба халыҡтың артыуы 43,6 мең кеше, йәғни 4,9 процент тәшкил итә, рустар - 1,6 мең, йәки 0,1 процент. Барлыҡ халыҡтарҙың да ҡалала йәшәүселәр һаны, йәһүдтәр һәм немецтарҙан башҡа, артҡан, бигерәк тә башҡорттарҙа (50 процентҡа), татарҙарҙа (26,1 процентҡа), рустарҙа (10,7 процентҡа). Ауыл ерендә, киреһенсә, башҡорт халҡы - 6,2, татарҙар - 20,7, рустар 26,1 процентҡа кәмегән.

### Союздағы һуңғы иҫәп алыу

1989 йылда йәмғиәтте һәм дәүләтте радикаль трансформациялау шарттарында һуңғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу үткәрелә. Башҡорт АССР-ында ул 3 млн 943 мең кешене, шул иҫәптән 863,8 мең башҡортто, 1 млн 548 мең русты, 1 млн 121 мең татарҙы иҫәпкә ала.

Халыҡ иҫәбен алыу араһында, 1979 - 1989 йылдарҙа, татарҙар менән рустарҙан башҡа, барлыҡ халыҡтарҙың да тиерлек һаны кәмей. Рус халҡының үсеше һиҙелерлек булмай: ун йыл эсендә ул ни бары 398 кешегә арта. Татарҙар 180,2 мең кешегә күбәйә. Бигерәк тә аҫаба халыҡтың һаны 72,1 мең кешегә кәмей. Башҡорттарҙың һаны 54 ауыл районының 46-һында аҙая: Балтаста (18,1 меңгә), Борайҙа (16,9 меңгә), Туймазыла (14,4 меңгә), Илештә (10,6 меңгә), Кушнаренкола (10,5 меңгә), Благоварҙа (9,8 меңгә), Дүртөйлөлә (9,4 меңгә), Янауылда (7,5 меңгә), Саҡмағошта (7,4 меңгә), Йәрмәкәйҙә (7,0 меңгә), Шаранда (6,2 меңгә).

Был райондарҙа татар халҡы күпкә арта: Балтаста - 12,8 меңгә, Борайҙа - 8,7 меңгә, Благоварҙа - 8,5 меңгә, Кушнаренкола - 8,2 меңгә, Туймазыла - 7,5 меңгә, Дүртөйлөлә - 6,2 меңгә, Илештә - 5,5 меңгә, Йәрмәкәй менән Өфө районында - 4,3-әр меңгә, Шаранда - 4,0 меңгә , Тәтешлелә - 3,4 меңгә, Саҡмағошта - 2,3 меңгә.

Республиканың 33 районында татар халҡының бер аҙ кәмеүе билдәләнә. Ауырғазы (3,2 мең), Ҡариҙел (3,0 мең), Стәрлебаш (2,7 мең), Ғафури (1,8 мең), Ҡырмыҫҡалы (1,5 мең), Нуриман (1,3 мең), Дәүләкән (1,2 мең), Бишбүләк (1,0 мең) райондарында сағыштырмаса һиҙелерлек кәмеү күҙәтелә.

1979 йылғы халыҡ иҫәбен алыу көнбайыш төбәктә 209,1 мең башҡортто һәм 276,8 мең татарҙы һанай. Киләһе иҫәп алыу буйынса (1989 йыл) башҡорттар 143,6 мең булһа, татарҙар - 347, 3 мең кеше. Аҫаба халыҡтың һаны 65,6 меңгә кәмеһә, татарҙарҙың һаны 70,5 меңгә арта.

Тәбиғи, һорау тыуа: шундай ҡыҫҡа, етмәһә, тыныс ваҡытта бер милләт кешеләренең икенсеһенә күсеүе мөмкинме? Был һорауға яуап бирер өсөн халыҡтың һанын арттырыусы бер нисә факторға мөрәжәғәт итеү урынлы булыр. Тәү сиратта - был халыҡ эсендә йәштәрҙең өлөшө. 1979 йылда башҡорттарҙың дөйөм һанында йәштәр 32,7 процент тәшкил итһә, татарҙарҙа - 27,1 процент. 1989 йылда был күрһәткес 29,3 һәм 26,1 процент. Айырма күҙгә күренеп тора. Шул уҡ ваҡытта халыҡ структураһында йәштәрҙең өлөшө уның артыу һәләтенә туранан-тура бәйле. Тыуым да ошо факторға бәйле. 1979 йылда тыуым коэффициенты (мең кешегә тыуым) башҡорттарҙа 17,9 булһа, татарҙарҙа - 18,3. Һуңғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыу йылында мең башҡортҡа 23,5 тыуым тура килһә, татарҙарҙа был һан 18,7 була. Башҡорттарҙа тыуым күҙгә күренеп үҫкәндә, татарҙарҙа ул бер кимәлдә 18,3 - 18,7 ҡатып ҡала.

Халыҡ һанының артыуында төп фактор булып, һис шикһеҙ, уның тәбиғи артымы (тыуыусылар һәм үлеүселәр араһындағы айырма) тора. 1989 йылда башҡорттарҙа мең кешегә артым 15,2 булһа, татарҙарҙа - ул - 10,1. Артабанғы йылдарҙа артым туҡтай. Ул республика халҡының береһен дә урап үтмәй. Әммә ул башҡорттарҙа (4,1) барыбер татарҙарға (0,5) ҡарағанда юғары була. Башҡа демографик характеристикаларҙы ла килтерергә мөмкин (халыҡтың йәш структураһының боҙолоуы, никахлашыуҙың кәмеүе, айырылышыуҙар артыуы һ.б.).

Ҡайһы берҙә, 1979 йылдағы иҫәп алыуҙа БАССР етәкселеге ҡушыуы буйынса республикаға исем биреүсе милләт ер йөҙөнән юғалмаһын өсөн татарҙарҙың бер өлөшө, үҙҙәренең ихтыярынан тыш башҡорт тип яҙылған, тигән нигеҙһеҙ раҫлауҙар ишетергә тура килә. 1987 йылда, сираттағы халыҡ иҫәбен алыу алдынан, КПСС Үҙәк комитеты пленумы трибунаһынан КПСС Үҙәк комитеты секретары Е. К. Лигачевтың, йәнәһе лә, Башҡортостанда татарҙарҙы көсләп башҡортлаштыралар, тигән провокацион, яуапһыҙ белдереүе яңғыраны. Һис шикһеҙ, был белдереү республиканың партия элитаһына үрләгән осраҡлы, яуапһыҙ кешеләрҙең әйтеүе буйынса тормошҡа ашырылды. Әммә, үкенескә күрә, ул КПСС Үҙәк комитеты тарафынан тейешле баһа алманы.

**Шулай итеп...**

**1979 йылдан 1989 йылға тиклем (ике иҫәп алыу араһы) көнбайыш төбәктә башҡорттарҙың 65,6 мең кешегә кәмеүе тәбиғи кәмеү түгеллеген, ә был төбәк татарҙарының һаны 70,5 мең кешегә артыуы тәбиғи артым түгеллеген аңлар өсөн атап үткән фактор ҙа етә. Икенсе факторҙар ҙа булған, әммә улар демографияны өйрәнеүсе фәнгә бүйһонмай.**

**Мөхәмәт МЫРҘАБУЛАТОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**(Дауамы бар).**

*ҠЫҘЫҠ ХӘБӘР!*

# САЛАУАТТЫҢ НӘҪЕЛДӘШТӘРЕ...

## Хабаровский крайында ла бармы?

**Мин былтыр бер учреждениеның һаҡ хеҙмәтенә эшкә урынлаштым. Көндөҙ сауҙала эшләйем, төнгөлөккә автомашина магазинын һаҡлайым. Кис көндәре тарихи әҫәрҙәр уҡыйым. Тарих менән бала саҡтан ҡыҙыҡһындым, күп тарихи ваҡиғаларҙы ҡартатай, ҡартәсәйҙәрҙән ишетә торғайным.**

Минең алмашсым Федор бер саҡ минең тарихи китап уҡып ултырғанға иғтибар итеп, үҙе менән булған хәл тураһында һөйләне.

- 1985 йылдарҙа мин Хабаровский крайында булдым, - тип башлап китте ул.- Иптәштәр менән балыҡ тоторға барырға һөйләштек һәм бер көндө ошо ниәтебеҙҙе бойомға ашырырға булдыҡ. Үҙебеҙ менән аҙыҡ-түлек алып торманыҡ, беҙ бара торған йылға янында бер ауыл барлығын юлдаштарым белә ине, шундағы магазинға һуғылырбыҙ, тинек. Йылғаға барып еткәс, иптәштәр балыҡ тоторға әҙерләндә, ә мине яҡындағы шул ауылға аҙыҡ-түлек алып килергә ебәрҙеләр. Мин ауыл яғына атланым. Яҡынлашҡас, ауыл ситендәге юлтаҡтаға ҡараным: "с. Минская" тип яҙылған. Минская, булғас, был белорус ауылылыр инде, тип уйланым ниңәлер. Тик ауылға ингәс, аптырап ҡалдым: урам тултырып башҡорттарға оҡшаған малайҙар уйнап йөрөй. Ҡаршыға бер әбей осраны, мин уның менән русса иҫәнләштем, ә ул мине башҡортса сәләмләне. Мин, Башҡортостандан килгән кеше булараҡ, башҡорттарҙың һөйләшен әллә ҡайҙан айырам һәм аңлайым, сөнки минең ҡатыным төркмән ҡыҙы. Төркмән һәм башҡорт теле оҡшаш тиерлек. Мин шулай аптырана-аптырана ауыл магазинына барып индем. Унда кеше күп ине. Мин юрый башҡортса иҫәнләштем, бындағы халыҡ та башҡортса яуап бирҙе. Шунан мин: "Мин Башҡортостандан килдем һеҙҙең яҡтарға, бында ла, күрәм, башҡорттар йәшәй, ахры..."- тинем. Улар ҡыуанып китеп шаулашты. Аҙаҡ уларға: "Һеҙ был яҡтарға нисек килеп урынлаштығыҙ?" - тигән һорау бирҙем.

- Беҙ Салауат Юлаев тоҡомдары, - тине бер ир.- Салауат Юлаев ихтилалы баҫтырылғас, бөтә нәҫелебеҙҙе ылауға тейәп, каратель отрядтары менән ошо Себер яҡтарына оҙатҡандар. Беҙҙең атай-олатайҙар башлыса Тәкәй һәм Мең ауылдарынан күсерелгән. Шулай итеп, был яҡтар беҙҙең өсөн икенсе илебеҙгә әйләнгән.

- Был яҡтарҙа башҡорттар өс ауылда йәшәй: беренсеһе - Түбәнге Мең ауылы, икенсеһе - Үрге Мең ауылы, өсөнсөһө - Тәкәй ауылы, - тип тө өҫтәне тағы береһе.

-Башҡортостанға барғанығыҙ бармы, балаларығыҙ беҙҙәге уҡыу йорттарында уҡыймы? - тигән һорау бирҙем.

- Бер нисә бала Өфөләге уҡыу йорттарына барып ҡараһа ла, инә алманы, кире ҡайттылар. Башҡаса бәйләнеш булдыра алғаныбыҙ юҡ, - тиеште улар. Шунан Башҡортостан тураһында төрлө һорауҙар яуҙырҙылар. Мин үҙем белгәнсә яуап бирергә тырыштым, Башҡортостан тураһында һөйләнем. Бына шундай ҡыҙыҡ осрашыу булғайны Хабаровский крайында. Элек ул хаҡта таныш-тоноштарға ғына һөйләгәнмендер, әммә ҡайҙалыр юғарыраҡҡа йә журналистарға барып һөйләү тураһында уйлап та ҡаралмаған. Бына әле уйлайым, башҡорттар өсөн, тарих өсөн ҡыҙыҡ бит инде был. Бәлки, һин, тарих менән ҡыҙыҡһыныусы башҡорт кешеһе, белешеп ҡарарһың әле, ул башҡорт ауылдары әле бармы икән?..

Федор һөйләгән ваҡиғаларға 25 йыл ваҡыт үткән. Һуңғы йылдарҙа ситтә йәшәгән милләттәштәр менән ҡайһы бер бәйләнештәр булдырылды, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайҙары үтте. Әлеге Федор иҫләгән Хабаровский, Приморье крайҙарындағы башҡорт ауылдары әле иҫәнме, уларҙы беләме икән беҙҙең ғалимдарыбыҙ, республика етәкселәребеҙ? Бер картала Приморье крайында Мең тигән йылғаны шәйләнем, бәлки, шул йылға исеме әлеге Мең ауылынын алынғандыр? Ғалимдар ни әйтер икән ошо мәғлүмәт тураһында?

**Миңнислам ӘХМӘТЙӘНОВ.**
**Иглин районы Иҫке-Ҡобау ауылы.**

*КИТАБЕННАС*

# ЯҢЫ ТАРИХИ БИТТӘР...

## көнбайыш башҡорттарына арнала

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһының "Хан" нәшриәтендә "Көнбайыш башҡорттары: сәйәси тарихы, этник оҡшашлыҡ проблемаһы" монографияһы донъя күрҙе. Тикшеренеүҙәрҙең авторҙары - тарих фәндәре кандидаты Юлдаш Йосопов, философия фәндәре кандидаты Рәфил Аҫылғужин һәм Татарстан ғалимы Таир Салауши.**

Монография борон-борондан Көньяҡ Кама арьяғында йәшәгән байлар, бүләр, гәрәй, йәнәй, ҡырғыҙ, юрмый, һарайлы-мең, ирәкте һәм башҡа көнбайыш башҡорттарының этник һәм сәйәси тарихына арналған. Тарихи архив һәм урындағы халыҡтың шәжәрәһе нигеҙендә унда башҡорт халҡының этногенезы һәм төбәктә күп милләтле халыҡ формалашыуы процесы анализлана. Ысынында, был күп йылдар дәүерендә Башҡортостан ғалимдарының көнбайыш башҡорттарын беренсе тапҡыр тикшереүе.

- Был фәнни хеҙмәттең баҫылып сығыуы иң тәүҙә халыҡтың үҙаңы үҫеүенә, милләттең милли үҙ билдәләнеш процесы көсәйеүенә бәйләнгән, - тип билдәләй Юлдаш Йосопов. - Һуңғы йылдарҙа халыҡтың үҙенең тамырҙарын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуы күҙгә күренеп артты, был бигерәк тә республикабыҙҙа изге традицияға әүерелгән шәжәрә байрамдарынан күренә.

Совет осоронда көнбайыш башҡорттары көслө ассимиляция процесы кисерә. Нәҡ ошо күҙлектән ғалимдар көнбайыш башҡорттарының тарихи тамырҙарын һәм төп билдәләнеш процестарын тикшерә башлай. Тикшеренеүҙәр мәләндә ғалимдар йәмғиәттәге күп төрлө стереотиптар менән осраша.

- Беҙ уҡыусыларға үҙҙәренең тарихы тураһында еңеләйтелгән стереотип күҙаллауҙарҙан ситкә китергә кәңәш итәбеҙ. Этник оҡшашлыҡты билдәләү өсөн үҙеңдең тарихи тамырҙарыңды, килеп сығышыңды белеү мөһим, - ти Юлдаш Йосопов.

Монография өс бүлектән тора: уларҙың беренсеһе Урта быуат дәүерендә көнбайыш башҡорттарының этносәйәси тарихына, икенсеһе - XIX-XXI быуат башында йәшәгән Көнбайыш Башҡортостан халҡына, өсөнсөһө - Татарстан Республикаһындағы ултыраҡ башҡорттарға арналған. Рәфил Аҫылғужин әйтеүенсә, монографиялар Татарстандың һәр көнсығыш райондары буйынса әҙерләнгән. Елабуға һәм Сарапул өйәҙе башҡорттары тураһындағы китап баҫыла башлаған да инде. Был ҙур күләмле фәнни эш.

"Көнбайыш башҡорттары: сәйәси тарих, этник оҡшашлыҡ проблемаһы" монографияһы - БР Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институты хеҙмәткәрҙәренең тикшеренеү эшенең башы ғына әле. Тикшеренеү материалдары "Татарстан башҡорттары" документаль фильмының нигеҙен тәшкил итә, киләсәктә "Тарихи Башҡортостан" тип аталған тағы бер фильм төшөрөләсәк.

***✓ Шулай ҙа кемделер танышлыҡ аша кейәүгә биреү йә өйләндереү уның яҙмышын боҙоу ҙа булыуы ихтимал бит. Юлдары киҫешкән кешеләрҙе бит Хоҙай бер-береһе менән осраштыра, таныштыра, ҡауыштыра...***



**Ырымбур өлкәһенең Александровка районы Ҡотос ауылында тыуып үҫкән Зимфира Ҡотлоәхмәтова һөнәре буйынса мәғлүмәтте һаҡлау буйынса инженер, юрист, һалым инспекцияһында бухгалтер, арбитраж идарасы булып эшләй, аудит менән шөғөлләнә. Ул бала сағынан психология, тарих, археология фәндәре менән ҡыҙыҡһына, әлеге ваҡытта "Евразия күскенселәренең донъяны арауыҡ һәм ваҡыт күҙлегенән ҡабул итеүе" тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһы өҫтөндә эшләй. Бер үк ваҡытта Зимфира "Димсе" агентлығын ойоштороусы ла. Күреүегеҙсә, уның эшмәкәрлеге төрлө яҡлы һәм төрлө йүнәлешле. Башта Зимфира менән осрашып, гәзитебеҙ өсөн әңгәмә-монолог ҡына эшләргә ниәт иткәйнем. Әммә уның милли психологияға, этнографияға, тарихҡа бәйле ҡыҙыҡлы фекерҙәрен тыңлай торғас, ул һөйләгәндәрҙә үҙемдең дә фекерҙәрем менән ауаздашлыҡ тойоп, әңгәмәсем менән диалогҡа инеп киткәнемде лә һиҙмәй ҡалдым. Һеҙҙең иғтибарға шул әңгәмәне тәҡдим итәм.**

**Әхмәр:** Зимфира, һинең төрлө йүнәлештәге, төрлө характерҙағы эшмәкәрлек-хоббиларың араһында иң мөһимдәрен билдәләү ҡапыл ғына мөмкин дә түгел һымаҡ. Шулай ҙа бына һинең димселек эше менән шөғөлләнә башлауың башҡалары фонында көтөлмәгән ғәмәл һымағыраҡ булып күренә. Йәғни ул тәүгеләренә бөтөнләй бәйләнмәгән кеүек. Бынын, бәлки, үҙ сәбәптәре лә барҙыр? Ғөмү-

**Әхмәр:** Дөрөҫ, димселек институты элек-электән халҡыбыҙ тормошонон айырылғыһыҙ өлөшө булған. Шулай ҙа кемделер танышлыҡ аша кейәүгә биреү йә өйләндереү уның яҙмышын боҙоу ҙа булыуы ихтимал бит. Тормоштағы төрлө осраҡлыҡтар, ҡаршылыҡтар, ваҡиғалар үҫеше юҫығында юлдары киҫешкән кешеләрҙе бит Хоҙай бер-береһе менән осраштыра, таныштыра, ҡауыштыра...

ты көүҙәле был кеше үҙ тәжрибәһендә кешеләрҙе шул тиклем алдап өйрәнгән һәм алдай торғас, кешеләргә ышаныһын да юғалтҡандыр. Шуға күрә 50 йәше тулыуға ҡарамаҫтан, һаман да ғаиләһен ҡора алмайҙыр. Ул күп нәмәгә ирешкән, шуға күрә теләһә ниндәй ҡарарҙы инҡар итергә була, тип уйлап, яңылыша.

**Әхмәр:** Аҡыллы ҡатын-ҡыҙ үҙенән интеллектуаль яҡтан

ҙең милләт эсендә шундай бер тенденция күҙәтелә: ауылдарыбыҙҙа егеттәребеҙ өйләнмәйсә, ҡыҙҙарыбыҙ ҡалаларға килеп, кейәүгә сыҡмайынса ҡартая. Уларҙың ҡайһылары хәҙер инде пенсия йәшенә етеп килә. Был күренеш хаҡында оҙаҡ уйланып йөрөнөм: сәбәптәрен тәүҙә урбанизацияла, тәрбиәлә, социаль шарттарҙа тапҡан кеүек булдым. Хәҙер инде ул фекерҙәремдән дә кире ҡайттым. Күп ғаиләләрҙең төҙөлмәүе, балаларҙың тыумауы, миненсә, беҙҙең тарихҡа бәйле. Беҙ һуңғы биш быуат эсендә шул тиклем ҙур юғалтыуҙар кисергәнбеҙ, яу артынан яуға сапҡанбыҙ, ихтилал артынан ихтилалға күтәрелгәнбеҙ. Тәбиғи, милләт ни тиклем күп юғалтыуҙар кисерһә, уның күп өлөшө шул тиклем оҙайлы ҡайғы (стресс, депрессия) кисереп йәшәргә мәжбүр. Әйткәндәй, беҙҙең боронғо оҙон көйҙәребеҙҙең һағышлы булыуы ла

лар. Мин тәүҙә уларҙың фантазияһына ғәжәпләндем. Тормош ағышынын, һәр көндөң эҙмә-эҙлелеге булырға тейеш. Минә мөрәжәғәт итеүсе ҡыҙҙарҙа мин ошо эҙмә-эҙлелекте тойҙом, улар ысынбарлыҡҡа реаль ҡарай. Тик бына егеттәрҙең - үҙҙәре башҡортса һөйләшһәләр ҙә - әйткәндәрен бөтөнләй аңларлыҡ түгел. Улар, нисектер, үткән быуаттарҙа аҙашып йөрөгән кеүектәр, шуға күрә һөйләгән һүҙҙәре, буласаҡ кәләшен күҙаллауы хәҙерге заман ысынбарлығына бөтөнләй тура килмәй. Миненсә, хәҙерге замандa беҙҙең милләттең менталитетына тура килмәгән, уларҙың аңы ҡабул итә алмаған процестар бара. Мин бында интеллектуаль кимәл, аҡыл тураһында һүҙ йөрөтмәйем. Башҡорттар араһында физиктарҙың, математиктарҙың күп булыуы, киреһенсә, уларҙың тәбиғәттән юғары ки-

# КҮП ҺӘЛӘТТӘРЕБЕҘҘЕ

## яугирлыҡты, йондоҙҙарға ҡарап эш итеүҙе,

мән, уларҙың барыһын бер логик епкә теҙеп буламы һуң?

**Зимфира:** Улар араһында логик бәйләнеш булмаһа ла, сәбәп-бәйләнеш бар. Юрист, бухгалтер - уҡып алған белемем буйынса һөнәрҙәрем, ә фән менән шөғөлләнеүемде хобби тип алһаҡ, димселек менән шөғөлләнеүем иң тәүҙә йәшәр өсөн, ипотекаға түләр өсөн аҡса эшләргә ынтылыуҙан килеп сыҡҡандыр ул.

Өфөлә барлығы 5 агентлыҡ димселек менән шөғөлләнә. Уларҙың эш принцибы ябай ғына: кем менәндер танышырға, яҙмышын бәйләргә теләүсе ҡатын-ҡыҙ йә ир-ат агентлыҡҡа килеп, килешеү нигеҙендә күпмелер ваҡытҡа картотекаға үҙе хаҡында мәғлүмәт, фотоһүрәт һәм телефон ҡалдыра. Әлбиттә, был хеҙмәт түләүле. Шунан һуң кем менәндер танышырға теләгән ир-ат йә ҡатын-ҡыҙ агентлыҡҡа килеп, картотеканан үҙенә кәрәкле кешенең телефонын ала. Һуңғы ваҡыт агентлыҡҡа мөрәжәғәт итеүсе өс ирҙең береһе һаҡсы-ҡарауылсы булып эшләй, ғөмүмән, ир-аттарҙың күбеһе ҡатын-ҡыҙ менән ғаилә ҡорор өсөн түгел, күңелле итеп ваҡыт үткәреү өсөн генә танышырға теләй. Элек фәҡәт димселек институты эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә ҡыҙ-ҡатындың яңғыҙ ҡалыуына бөтөнләй юл ҡуйылмаған. Бөгөн иһә нескә зат тормошонда ике тенденция үҫеш алған. Берәүҙәр аҡыллы, бай, мыҡты көүҙәле, фатирлы һәм машиналы принц көтөп ғүмерен уҙғара, икенселәр иһә кемдәндер бала табып ала ла, үҙҙәре бар нәмәгә өлгәшеүҙе маҡсат итеп ҡуйып йәшәй башлай һәм балаһын атай тойғоһонан мәхрүм итә. Ҡатын-ҡыҙ бөгөн үҙенең репродуктив функцияһы менән бик оҫта файҙаланырға өйрәнеп алды. Уларға ирҙәр кәрәкмәй. Әсәлек капиталы ла ошо маҡсатҡа хеҙмәт итә.



түбәнерәк булған ир-атты аҡыллы ир-аттан өҫтөнөрәк ҡуя. Ни өсөн тип уйлайһығыҙ?

**Зимфира:** Мин аҡыллы икән, минә үҙемдән дә аҡыллыраҡ кеше нимәгә ул? Сөнки минең аҡылымды тормошҡа ашырырлыҡ кеше лә кәрәк бит әле. "Аҡыл" һүҙенең нигеҙендә "аҡ" тамыры бар. Аҡыллы, мәғлүмәтле булыу хакимлыҡ хоҡуғын да бирә. Ике аҡыл бер ғаиләгә, ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыймай - бында логика ябай ғына. Аҡыллы ҡыҙ-ҡатын ғына түгел, аҡыллы ир-ат та үҙенән ин-

шунан килә. Әйтәйек, шул биш быуаттан алдараҡ тыуған "Урал", "Сынрау торна" кеүек йырҙарға һағыш түгел, рух юғарылығы, күңел бөтөнлөгө, илйорт, Уралтау менән ғорурланыу тойғоһо хас. Ә депрессия менән йәшәү нормаль тормош өсөн ҡамасаулай. Бәлки, шуның өсөн дә, йәғни киләсәктә көтөләсәк катаклизмдарҙан, ҡырылыштарҙан һаҡланыр өсөн дә милләт үҙ-үҙен һан яғынан арттырмау юлы менән һаҡларға итәлер. Ни өсөн тигәндә,

***Ҡуласа әйләнешендә доминантаға әйләнгән халыҡ һәр ваҡыт башҡаларҙы үҙенә тартып-бойһондороп тора, һөҙөмтәлә башҡалар үҙҙәрен шул халыҡ вәкиле итеп тоя башлауы ла ихтимал. Әйтәйек, бөгөн Рәсәй кимәлендә рустар доминанта, шуға күрә лә рус телендә һөйләшеү арҡаһында ғына үҙҙәрен ошо милләт вәкиле итеп тоя башлаусыларҙың ни өсөн был юлға барыуын аңларға була. Әммә ҡуласа бер туҡтауһыҙ әйләнеп тора һәм беҙ, теләйбеҙме-юҡмы, Рәсәй киңлегендә, Евразияла икенсе бер милләт доминанта ролен башҡара башлаясаҡ. Хикмәт шунда: доминанта эстафетаһын рустарҙан кем ҡабул итеп алыр һуң?***

**Зимфира:** Мин был хаҡта бик оҙаҡ уйланып йөрөнөм. Ысынлап та, кемделер кем менәндер таныштырып, мин уларҙың яҙмышын икенсе юлдан ебәрмәйемме һуң? Һуңынан үҙемде үҙем тынысландырҙым. Ни өсөн тигәндә, мин бит уларға бер-береһен яҡынданыраҡ белеү мөмкинлеге генә бирәм, ә бына ғаилә ҡороу-ҡормау мәсьәләһен танышыусылар үҙҙәре хәл итә бит. Яңыраҡ миңә 50 йәштәр самаһындағы бер адвокат килеп инде. Картотека менән танышып сыҡты ла (унда һәр икенсе ҡыҙ ут һылыуы һәм фән кандидаты булыуға ҡарамаҫтан), үҙенә ярағлы кандидатура таба алмайынса сығып китте. Миненсә, закондарҙы яҡшы белеүсе, тәжрибәле, мыҡ-

теллектуаль яҡтан түбәнерәк ҡыҙ-ҡатынды аҡыллыһынан өҫтөнөрәк ҡуя. Ҡыҙ-ҡатын, ираттан айырмалы рәүештә, үҙ белемен ниндәйҙер маҡсатта камиллаштыра. Ир-ат аҡылы иһә логикаға ҡорола һәм ирҙәр һәр саҡ ниндәйҙер эҙмә-эҙлелектең барлығын иҫбатлауҙы үҙмаҡсат итеп ҡуя. Ир-ат аҡылы ул предметка, төшөнсәгә ситтән ҡарап үҫешә, ә ҡыҙ-ҡатындың аҡылы эҙмә-эҙлелекле түгел, йәғни ул предметка, төшөнсәгә урталыҡтан тороп ҡарай. Ҡыҙ-ҡатын логикаһының зирәклеге лә ошонда ята, йәғни ул бер үк ваҡытта иренә лә, балаһына ла, ҡайны-ҡәйнәһенә лә ярарға тырыша.

**Әхмәр:** Үткән быуаттың 80-90-сы йылдарынан башлап беҙ-

милләт - ул тере организм һәм уның беҙ белмәгән эске регуляция механизмы ошо рәүешле уның һанын арттырмай тоталыр. Әлбиттә, был минең фаразым ғына, шулай ҙа һөләктәй һылыу ҡыҙҙарҙың, баҫҡан ерҙәренә ут сығарған егеттәрҙең ғаилә ҡормай ҡартайыуын мин башҡаса аңлата алмайым. Кешелек тарихынан алған сакта ла боронғо милләттәр һан яғынан артыуҙы үҙмаҡсат итеп ҡуймай.

**Зимфира:** Мин дә һуңғы ваҡытта ошо хаҡта уйланам. "Димсе" агентлығы эшмәкәрлеге буйынса "Йәшлек" гәзитендә иғландар бирә башлағайным. Иғлан баҫылып сығыуы булды, Баймаҡ, Әбйәлил, Йылайыр, Учалы районддарынан бер туҡтауһыҙ шылтырата башланы-

мәлгә эйә булыуы хаҡында һөйләй.

Хәҙер инде ошо күренештең сәбәптәре хаҡында фекер йөрөтәйек. Белеүебеҙсә, элек беҙҙең ир-егеттәр атта оҫта йөрөүсе яугирҙәр, мәргән атыусы уҫсылар булған. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: бер үк ваҡытта сабып барған ат уҫсины бер туҡтауһыҙ аҫҡа-өҫкә ташлай, етмәһә, балдаҡ менән йәйә арауығы кәмеүе йә артыуы ла деформацияға килтерә һәм ошо бер туҡтауһыҙ һелкенеү шарттарында уҡты балдаҡ аша атыу өсөн һөнәр оҫталыҡ кәрәк! Был уҫсыларҙың үҙҙәренә генә мәғлүм булғандыр. Һәр хәлдә, ошондай динамикалы структурала күҙ менән тоҫҡап атыу мөмкин түгел. Яугирҙар был осраҡта ке-решенең осон ҡолаҡтары эргәһенән ысҡындырған, йәғни улар был осраҡта тауышты, киңлек һәм ваҡыт берлеген файҙаланған. Күрәһең, ат тояғы тауышы, аттың өҙөк-өҙөк тын алыуы һәм башҡа тауыштар йәнәшәлеге был осраҡта уҡты керештән ысҡындырыуы өсөн сигнал булып торғандыр. Яугирҙар быға үҙҙәренең балаларын кесе йәштән өйрәткән. Был оҫталыҡты аҡыл менән аңлатып булмай, ул тәбиғәттең үҙе кеүек. Беҙ хәҙерге ваҡытта ошо һәләтебеҙҙе юғалтҡанбыҙ. Өйләнешеүгә килгәндә инде, тәҡдимде бит ир-егеттәр яһай, ә егеттәребеҙ, миненсә, киңлек һәм ваҡыт берҙәмлеге тойғоһон юғалтыуы арҡаһында тарихта аҙашып йөрөгән кеүектәр. Бәлки, шуға күрә лә улар үҙҙәренең ниәтен ҡыҙҙарға аңлата алмайҙыр.

**Әхмәр:** Тауыш тигәндән, беҙҙең телдәге үҙенсәлекле "ғ", "ҫ", "ҙ", "ҡ", "һ" өндәре нострати дәүер (кешелектең милләттәргә бүленмәгән тәүге осоро) һөйләшендә лә булған. Башҡорт

***✓ Ырыуһыҙ кеше булмайҙыр ул, бары тик күптәр хәҙерге ваҡытта үҙенең ниндәй ырыуға ҡарағанын онотҡан ғыналыр. Мәҫәлән, американлыларҙа ырыу төшөнсәһе бөтөнләй юҡ. Ырыуы булмағандарҙа әхлаҡ булмай.***

# ЮҒАЛТҠАНБЫҘ,

## ысынбарлыҡты тойоу хисен…

һөйләше төрлө дәүерҙә төрлө үҙгәрештәр кисерһә лә, был өндәр беҙҙең телдә һаҡланып килгән, һаҡланып ҡына ҡалмаған, беҙҙең милли үҙаңды, рухты һаҡлауға булышлыҡ иткән. Тимәк, халҡыбыҙ ҡасандыр тауыш менән күреүҙе бер үк мәғлүмәт сығанағы итеп ҡабул иткән.

**Зимфира:** Нәҡ шулай, "ғ", "ҫ", "ҙ", "ҡ", "һ" кеүек үҙенсәлекле өндәр, әйтәйек, инглиз телендә лә бар. Әммә был телдә ул өндәрҙең мәғәнәүи һәлмәклеге беҙҙең телдәге кеүек үк түгел. Был өндәр беҙҙең телдә ҡулланғанда кешене ниндәйҙер хәрәкәткә әүҙемләштерә. Элек беҙҙең ата-олатайҙарыбыҙ был өндәрҙең көсөн аңлаған, ҡулланған. Хәҙер беҙ шулай уҡ был һәләтебеҙҙе юғалтҡанбыҙ.

**Әхмәр:** М.Өмөтбаев үҙенең "Йәдкәр" китабында аҫаба башҡорттоң өс йәшәү шарты хаҡында яҙа. Шуларҙың өсөнсөһө - йондоҙҙарға ҡарап эш итә белеү.

Ысынлап та, боронғо ата-бабаларыбыҙ йондоҙҙарҙың серен аңлаған һәм шул арҡала беҙ үҙебеҙҙе һаҡлап ҡала алғанбыҙ. Мәрхүм Рәшит ағай Әхтәри күп кенә йондоҙҙарҙың башҡортса атамаһын да белә торғайны. Ә бына йондоҙҙар нисек итеп беҙҙе һаҡлаған һуң? Йондоҙҙарҙың телен аңлаған ата-бабаларыбыҙ уларҙың төрлөсә урынлашыуына ҡарап, бер нисә йылдан ҡара ҡыш (бер нисә йыл рәттән йәйен ямғыр, ҡышын ҡар яумаған) килерен билдәләп, ҡара ҡыштарҙы үткәрер өсөн әҙерләнә башлаған, мәмерйәләрҙә һыу һаҡлаған, ит ҡаҡлаған, һөт ризыҡтары киптергән, һ.б. Бына ошо рәүешле улар ҡара ҡыштарҙы үткәреп ебәргән. Әйткәндәй, "ҡарғыш" һүҙе "ҡара ҡыш"тан килеп сыҡҡан булырға тейеш. Ҡарғыш- ҡарғау, йәғни кешегә ҡара ҡыш теләү. Йондоҙҙарҙың телен аңлау һәләтебеҙҙе лә юғалтҡанбыҙ, үкенескә ҡаршы.

**Зимфира:** Башҡорттар донъяны башҡаларға ҡарағанда икенсерәк ҡабул итә. Быны ла аңларға була, сөнки беҙ йондоҙҙарға бәйле тағы ла бик күп аҡыл-тәжрибәбеҙҙән мәхрүм ҡалғанбыҙ. Түбәнге аңыбыҙҙа йәшәй ул аҡыл һәм ул башҡалар күҙлегенән беҙҙе адекват итеп күрһәтмәй. Ҡайһы бер диндәрҙә "сома" төшөнсәһе бар. Беҙҙеңсә әйткәндә, "сома" "сума"ны йәғни сумыуҙы аңлаталыр ул. Бына һеҙ һауаға, ағастарға ябай күҙ менән ҡарағыҙ ҙа, ошо уҡ күренешкә һыуға сумып, аҫтан-өҫкә, һыу ҡатламы аша ҡарағыҙ. Бөтөнләй икенсе күренеш килеп сыға. Беҙ айға ҡаҡлығып, адаптацияланған ҡояш нурын ҡабул итәбеҙ. "Сума" принцибын беҙ "Аҡбуҙат" эпосында күрә алабыҙ, йәғни ундағы ваҡиғалар һыуҙың теге яғында бара.

**Әхмәр:** Быының менән беҙ бөгөн ысынбарлыҡты тойоу хисен юғалтҡанбыҙ тиһегеҙме?

**Зимфира:** Тап шулай. Сөнки беҙ бөгөн күп кенә төшөнсә-мәғәнәләр буталған заманда йәшәйбеҙ. Беҙ хатта мөхәббәт тойғоһон да секс менән бутайбыҙ. Башҡаларға эйәрергә тырышабыҙ. Тағы ла йондоҙҙарға әйләнеп ҡайтһаҡ, һуңғы осорҙа донъя ғалимдары ҡояш тирәһендә теҙелгән ун ике йондоҙлоҡтоң һәр береһен ниндәйҙер өндәр менән билдәләй. Һәм, беләһегеҙме, уларҙың ҡайһылары беҙҙең үҙенсәлекле "ғ", "ҫ", "ҙ", "ҡ", "һ" өндәрен тәшкил итә. Тимәк, бында башҡорт теленең йондоҙлоҡтарҙың бер-береһенә йоғонтоһо һөҙөмтәһендә тыуыуы хаҡында әйтергә хаҡыбыҙ бар.

Кем белә, бәлки, М. Өмөтбаев тап шуның өсөн дә аҫаба башҡорттоң йондоҙҙар менән эш итә белеүен төп йәшәйеш шарты тип атағандыр. Бөгөн беҙ, ошо өндәрҙе үҙ телебеҙҙә ҡулланып йәшәгән милләт, тап ошо өндәрҙең беҙҙең рухты һаҡлап, үҙебеҙҙе йәшәтеп килгәнен аңлап та бөтөрмәйбеҙ. Кешелек тә цивилизацияның был өлкәһенән күпкә ситләште, шуның өсөн кешелек тарафынан да беҙ адекват булып ҡабул ителмәйбеҙ. Беҙ ул өндәребеҙҙе нисек итеп файҙаланырға белмәйбеҙ. Беҙ ошо өндәрҙән торған һүҙҙәребеҙҙе аңлы рәүештә әйтергә өйрәнмәйенсә тороп, алға китә алмаясаҡбыҙ. Шул уҡ ваҡытта йөҙ йыл буйы өлгәшә алмаған уңышҡа ла бер төн эсендә ирешеп була. Әгәр ҙә беҙ үҙ өндәребеҙҙе күк есемдәре әһәмиәтендә яңғырата алһаҡ, яҙыу-һыҙыуҙың да кәрәге ҡалмаҫ ине. Яҙыу-һыҙыу ни өсөн барлыҡҡа килгән? Сөнки кешелектең хәтере юйыла башлаған. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең тарихыбыҙҙың, халыҡ ижадыбыҙҙың ҙур өлөшө хәтеребеҙ аша беҙгә килеп еткәнен дә онотмайыҡ.

Әгәр ҙә беҙ кешелек майҙанын оло дала итеп күҙ алдына килтерһәк, ул далала һәр дәүерҙә кемдер хакимлыҡ иткән. Беҙ ҙә үҙебеҙҙең ул дәүеребеҙҙе үткәргәнбеҙ. Күктә Етегән йондоҙо булған кеүек, ерҙә лә кешелек һәм айырым халыҡ йәшәйеше "Ете ырыу принцибы"на таяна.

**Әхмәр:** Был йәһәттән ҡарағанда, минең дә үҙ фекерҙәрем бар. Әйтәйек, еүешлеккә, эҫегә, һыуыҡҡа, эрозияға, коррозияға бирешмәй торған матдә, деталь йә предмет бер юлы үҙендә шуларға ҡаршы тороплоҡ сифаттарға эйә була. Минеңсә, "Ете ырыу принцибы"ла шуға оҡшаштыр. Бына беҙҙең милләтте 7 ырыу ойошторған, әммә милләтебеҙ эсендә йөҙҙән ашыу ырыу-ҡәбилә иҫәпләнә. Тимәк, һәр ырыу, һәр ҡәбилә милләтебеҙгә үҙенең ниндәйҙер төп сифаты менән килеп ингән һәм уны шул сифат менән байытҡан, төрлө тарихи шарттарға ҡарап, шул ырыуҙың береһе доминанта ролен үтәп, дөйөм милләтте һаҡлап ҡалыуға өлгәшә. Тимәк, милләт составында нисә ырыу булһа, уның шунсама ғүмере була, тигән һүҙ. Әлбиттә, бында "ғүмер" төшөнсәһен шартлы рәүештә килтерәм. Ошо күҙлектән ҡарағанда, мин милләтебеҙҙең ошоғаса үткән ғүмерен бер нисә осорға бүләм. Әйтәйек, милләтебеҙҙең ике ҡитғаны бер итеп ирәүән йәшәгән осоро - Бөрйән ырыуы осоро. Тап шул саҡта ҡурай моңо башлап яңғыраған, бөрйән ырыуы батыры Алдар Иҫәкәев тап шул осорҙо юғалтмаҫ өсөн һуғышҡан. Икенсеһе - Ҡыпсаҡ ырыуы осоро (Һундар, Алтын Урҙа, ихтилалдар), өсөнсөһө - Юрматы ырыуы осоро - Азия саялығын һәм Европа аҡылын үҙенә һеңдергән заттарҙың яңыса шарттарҙа Башҡортостан дәүләтселеген төҙөүгә ирешеүе. Тағы ла шуныһы: тәүге осор иң оҙоно, икенсеһе унан ҡыҫҡараҡ, өсөнсөһө - тағы ла ҡыҫҡараҡ, йәғни фәнни-техник прогресс үҫеше принцибы һымаҡ һәр бер осор ҡыҫҡара барған һымаҡ. Шулай итеп, беҙ әлегә милләтебеҙҙең йөҙҙән ашыу йәшәү потенциалының бары тик 2-3 процентын ғына файҙаланғанбыҙ булып сыға.

**Зимфира:** Доминанта принцибы тарихи шарттарға ғына бәйле түгел, минеңсә. Бында йондоҙлоҡтарҙың (был осраҡта ырыуҙарҙың) ниндәй ҡулса буйынса урынлашыуы ла (дөйөм милләт өсөн әһәмиәте) ҙур роль уйнайҙыр. Икенсенән, беҙҙең милләттең фекерләүе лә башҡасараҡ, беҙ киңлек менән фекер йөрөтәбеҙ. Ябай ғына әйберҙе йә бүлмәне беҙ башҡаларҙан айырмалы рәүештә шул әйбер йә бүлмә итеп кенә түгел, тағы ла киңерәк итеп күҙаллайбыҙ. Әммә хәҙерге шарттарҙа беҙҙең был һәләтебеҙ кешелек өсөн кәрәкмәй, сөнки улар әле ҡабул ителгән хоҡуҡ нормаларына тура килмәй. Әгәр ҙә беҙ кешелек үҫешенең - күк есемдәре әйләнешенең ошо ҡулсаһы буйлап әйләнәбеҙ икән, ҡасандыр үҙебеҙҙең старт алған урыныбыҙға - асылыбыҙға ла килеп етәсәкбеҙ һәм кешелек үҫешенең "Ете ырыу принцибы" ҡануны буйынса доминанта ролен башҡарасаҡбыҙ.

**Әхмәр:** Донъяла ҡайһы бер милләттәрҙең ырыуҙары юҡ, тимәк, улар "Ете ырыу принцибы" менән йәшәй алмай булып сыға бит...

**Зимфира:** Ырыуһыҙ кеше булмайҙыр ул, бары тик күптәр хәҙерге ваҡытта үҙенең ниндәй ырыуға ҡарағанын онотҡан ғыналыр. Мәҫәлән, американлыларҙа ырыу төшөнсәһе бөтөнләй юҡ һәм был дәүләттең кешеһе хатта үҙ атаһын-әсәһен дә танырға теләмәй. Ырыуы булмағандарҙа әхлаҡ булмай.

***Үткән быуат аҙағында беҙҙең милләтте борсоған ике ҙур проблема бар ине: эскелек һәм ҡатнаш никахтар. Аллаға шөкөр, милләтебеҙ эскелектән арына бара, һәр хәлдә, ҡалаларҙа бөтөнләй эсмәгән ике-өс быуын вәкилдәре быуын нығытты, ауылдарҙа үткән туйҙарҙа ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар эсерерлек кеше таба алмай. Ҡатнаш никахтарға килгәндә, күберәген ҡыҙҙарыбыҙ башҡа милләт вәкилдәре менән никахҡа инә. Әммә бында уларҙы рухһыҙлыҡта, тәрбиәһеҙлектә йә үҙ милләтенә хыянатта ғәйепләп булмайҙыр. Улар был аҙымға ирекһеҙҙең көнөнән, үҙ милләте вәкилдәре араһынан үҙенең үҙенсәлеген һаҡлар көслө зат таба алмағанға бара. Һөҙөмтә, әлбиттә, төрлө факторҙар арҡаһында күп осраҡта киреһенсә килеп сыға, йәғни ҡатнаш никахтарҙан тыуған балаларҙың күбеһе беҙҙең милләтте ҡабул итмәй.***

**Әхмәр:** Үткән быуат аҙағында беҙҙең милләтте борсоған ике ҙур проблема бар ине: эскелек һәм ҡатнаш никахтар. Аллаға шөкөр, милләтебеҙ эскелектән арына бара, һәр хәлдә, ҡалаларҙа бөтөнләй эсмәгән ике-өс быуын вәкилдәре быуын нығытты, ауылдарҙа үткән туйҙарҙа ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар эсерерлек кеше таба алмай. Ҡатнаш никахтарға килгәндә, күберәген ҡыҙҙарыбыҙ башҡа милләт вәкилдәре менән никахҡа инә. Әммә бында уларҙы рухһыҙлыҡта, тәрбиәһеҙлектә йә үҙ милләтенә хыянатта ғәйепләп булмайҙыр. Улар был аҙымға ирекһеҙҙең көнөнән, үҙ милләте вәкилдәре араһынан үҙенең үҙенсәлеген һаҡлар көслө зат таба алмағанға бара. Һөҙөмтә, әлбиттә, төрлө факторҙар арҡаһында күп осраҡта киреһенсә килеп сыға, йәғни ҡатнаш никахтарҙан тыуған балаларҙың күбеһе беҙҙең милләтте ҡабул итмәй.

**Зимфира:** Был хәл кешелек үҫешенең "Ете ырыу принцибы"на бәйле. Йәғни ҡуласа әйләнешендә доминантаға әйләнгән халыҡ һәр ваҡыт башҡаларҙы үҙенә тартып-бойһондороп тора, һөҙөмтәлә башҡалар үҙҙәрен шул халыҡ вәкиле итеп тоя башлауы ла ихтимал. Әйтәйек, бөгөн Рәсәй кимәлендә рустар доминанта, шуға күрә лә рус телендә һөйләшеү арҡаһында ғына үҙҙәрен ошо милләт вәкиле итеп тоя башлаусыларҙың ни өсөн был юлға барыуын аңларға була. Әммә ҡуласа бер туҡтауһыҙ әйләнеп тора һәм беҙ, теләйбеҙме-юҡмы, Рәсәй киңлегендә, Евразияла икенсе бер милләт доминанта ролен башҡара башлаясаҡ. Хикмәт шунда: доминанта эстафетаһын рустарҙан кем ҡабул итеп алыр һуң?

**Әхмәр:** Кешелек үҫешенең "Ете ырыу принцибы"нда беҙ ҡасан доминанта була аласаҡбыҙ, тип уйлайһығыҙ?

**Зимфира:** Минеңсә, беҙ ҡуласа әйләнә башлағанда доминанта ролен үтәгәнбеҙ һәм иң аҙаҡтан да шул ролебеҙҙе башҡара алырбыҙ. Ул ваҡыт ахырызаман буламы, Туфан һыуы ҡалҡамы, һәр хәлдә, тап шул саҡта ниндәйҙер үҙгәрештәр көтөләсәк.

**Әхмәр:** Япондар кешенең аҫҡы аңын уҡый алыуға өлгәште. Рәсәйҙең ҡайһы бер билдәле кешеләре ошо юл менән үҙҙәренең тамырҙарын юллай икән. Бик ҡыҙыҡлы ғына факттар бар, әйтәйек, билдәле актер Михаил Боярскийҙың тамырҙары Африкаға барып тоташа имеш. Аҫҡы аңды уҡый алыу тәфтишселәрҙең эшен еңеләйтерәсәк, улар ҡулға алынған енәйәтсенең енәйәтен иҫбат итеү өсөн уны бары тик ошо аппарат янына ғына ултыртасаҡ. Шулай ҙа аҫҡы аңды уҡыу серҙәренә өлгәшеү кешелекте дөйөм хаосҡа алып килмәҫме?

**Зимфира:** Улай ғына ла түгел, улар ҡылған мажараларҙы ҡараған кешеләр ысынбарлыҡ тойғоһон юғалтасаҡ.

**Әхмәр:** Ә майялар ҡайҙа булған һуң? Мулдашев уларҙы ниндәйҙер параллель донъяға күсеп, үҙҙәренең доминанта мәлен көтә, тип белдерә.

**Зимфира:** Улайһа, үҙегеҙгә шундай һорау: былтырғы үлән кире үҫәме?

**Әхмәр:** Юҡ. Әммә тамыры иҫән ҡалһа, үҫә.

**Зимфира:** Тамыры иҫән ҡалһа ла, унан былтырғы түгел, бөтөнләй икенсе үлән үҫеп сыға...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Димселек институты хаҡында башланған һөйләшеү ана ниндәй төшөнсә-темаларға барып ялғанды. Ғөмүмән, хәҙерге көнөбөҙҙөң, йәшәйешебеҙҙең ниндәй генә проблемаһы хаҡында фекер йөрөтә башлаһаң да, һәр ваҡыт тарихҡа барып сығабыҙ. Хәҡиҡәт быны беҙҙән үҙе талап итәлер, күрәһең. Сөнки тарихһыҙ - хәҙерге көн, хәҙерге көнһөҙ киләсәк юҡ. Ахыры, хәҡиҡәт үҙе лә ошо өс тағанға таяна.**



**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Ни өсөн тап шул исемде ҡушҡандарын ҡасандыр ул атаһынан һорашҡайны. "Яҡташыбыҙ - тулы "Дан ордены" кавалеры Тәфтизән Миңлеғоловтың хөрмәтенә олатайың бирҙе һиңә был исемде", тине атаһы…***






Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ

# АҠ СЫЙЫРСЫҠ

(ПОВЕСТЬ)

Яҙғы саҡырылышҡа алыныусы егеттәр тейәлгән поезд, оҙон юлда арып талсыҡҡан юлсылай, әкрен генә Шарман станцияһына яҡынлашты. Ҡасандыр дәһшәтле йәҙрә ҡоралын һынаған иң тәүге полигондарҙың береһе булған Семицветик ҡалаһынан алыҫ булмаған был станция шулай тип атала. Әле алдында ятҡан ярайһы ғына оҙон, ҡатмарлы, борма-борма, һикәлтәле хәрби хеҙмәт юлын тик ағалары, йә иһә танышточоштары һөйләүе буйынса ғына белгән, йә булмаһа, кинофильмдарҙа ғына күргән йәш егеттәрҙең һәр береһе үҙ уйына сумған. Өфө саҡырылыш пунктынан эшелонға тейәлеп ҡуҙғалып киткән ваҡыттағы шау-шыу, шаярыпкөлөшөүҙәренең эҙе лә ҡалмаған.

- Килеп еттек. Әйберҙәрегеҙҙе йыйығыҙ. Вагонда сүпсар ҡалдырмағыҙ, - тип бойорҙо оҙатып килеүсе етди ҡарашлы йәш капитан. Призывниктар, теләр-теләмәҫ кенә, ултырған, ятҡан урынынан ҡуҙғалышып, үҙ-ара мығыр-мығыр һөйләшә-һөйләшә, сумка, рюкзактарына үҙҙәренән ҡалған аҙыҡ-түлек, һауыт-һабаларын йыйыштыра башланы. Башҡортса йә татарса һөйләшкән тауыштар ҙа ишетелгеләй.

- Сәғәт нисә икән? - тип һораны күрше кәштәлә әле генә йоҡоһонан уянған Илһам, ике ҡуллап күҙҙәрен ыуа-ыуа.

- Таңғы алты, - тип, Тәфтизән ҡулындағы "ЗИМ" сәғәтенә ҡарап алды. - Башҡортостанда әле саҡ дүрт...

Станцияға еткәс, поезд һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә "шыуып" килеп туҡтаны.

- Выходи! Строиться! - тигән команда вагон буйлап яңғыраны. Рюкзактарын иңбаштарына аҫҡан килеш, утыҙлаған егет бер-бер артлы теҙелешеп, перронға сыға башланы. Башҡаларҙан алдараҡ сыҡҡан тәпәш кенә буйлы ерән сержант, ситкәрәк алып китеп, иҫке-һоҫҡо кейемдәренән ҡотолоп өлгөрмәгән егеттәрҙе теҙергә тотондо. Барыбер тиҙҙән был кейемдәрен һалдырып, өр-яңынан хәрби формаға кейендерәсәктәр, тип, ҡайһы берәүҙәр (айырыуса ҡала егеттәре) өйҙән кейеп килгән курткаларының еңдәрен, салбар балаҡтарын буйлайына нәҙек кенә таҫмаларға телгеләп өлгөргән.

Ситтән ҡарағанда, кинофильмдарҙа күргән егерменсе йылдарҙағы берәҙәктәр төркөмөн хәтерләткән буласаҡ һалдаттар сафының "тигеҙ рәт"ен боҙоп, ярты аҙымдай ситтәрәк, ян-яғына ҡаранып онотолоп торған ҡолғалай оҙон рус егете ерән сержанттың иғтибарын йәлеп итте һәм ул "ҡолға" янына етеҙ генә килеп, кирза итегенең башы менән тегенең аяғына типте: "Кем һиңә стройҙан сығырға рөхсәт итте?"

Йәш һалдат ҡаты кирза эләккән аяғы ныҡ ауыртыуҙан сирнайып, ыңғырыша-ыңғыраша, ике ҡуллап балтырын тотҡан килеш бөгөлөп төштө.

- Отставить, сержант Колупаев! - Был хәлде әллә ҡайҙан күрә һалып ҡалған капитандың ҡәтғи бойороғо яңғыраны. - Часҡа килеп өлгөрмәгәнбеҙ, һин инде уставты боҙа ла башланыңмы?

- Юҡ, иптәш капитан, мин былай, еңелсә генә, дуҫтарса...
- Ерән сержант хәйләле йылмайып, үрелә биреп, теге оҙон егеттең яуырынынан ҡаҡты. - Шулаймы?..

Әле йөҙөнөң сирнайыуы бөтмәгән Васильев (оҙон егеттең фамилияһы шулай ине) "Эйе" тигән һымағыраҡ баш ҡаҡты һәм йылмайырға маташты. Аяғындағы әрнеү бер аҙ баҫылғас, иңендәге рюкзагын төҙәткеләп, стройҙың эсенә инеп торҙо.

Арттараҡ торған Тәфтизән Васильевты яҡлашып, сержантҡа ниҙер әйтергә уйланы ла, капитандың тауышын ишеткәс, өндәшмәне. Ғәҙәтенсә, ҡулындағы сәғәтенә ҡарап алды. Хеҙмәткә оҙатҡанда ошондай сәғәттәрҙе уға һәм уның менән саҡырылырға тейешле тағы өс егеткә колхоз рәйесе клубта, оҙатыу кисәһендә бүләк иткәйне. Бына ул "Сними часы!" тигән тауышҡа һиҫкәнеп китте. Уның янында мыҫҡыллы йылмайып әлеге тәбәнәк буйлы сержант тора ине. Яҡында икенсе бер офицер менән һөйләшеп, тәмәке тартып торған капитанға бер ҙә иғтибар итмәй был сержант ишараты. Йәнәһе, уның өсөн офицер бар ни ҙә юҡ ни...

Тәфтизән сәғәтен фуфайкаһының еңе эсенә йәшерҙе лә теге Колупаевҡа ҡараны.

- Ты че, не слышишь, глухой что ли? - Әллә офицерҙар ишетмәһен тип, әллә йәш һалдатты ҡурҡытыр өсөн ярым шыбырҙап өндәште сержант. Уның шулай өндәшеүе Тәфтизәнгә йылан ыҫылдаған һымаҡ тойолдо.

- Нет, не глухой, - тине ул мөмкин тиклем тынысыраҡ булырға тырышып.

- Тогда сними, быстро!

Тәфтизән башҡаса яуап ҡайтарманы. Сержант үҙенә иғтибар иткән офицерҙарҙың ҡарашын тойопмо, яһалма йылмайҙы ла, егеттең яуырынына "дуҫтарса" ҡағылып, ишетелер-ишетелмәҫ кенә:

- Беҙ һинең менән тағы казармала осрашасаҡбыҙ. "Иптәш сержант, зинһар өсөн, алығыҙ инде минең сәғәтемде", тип, минең алда теҙләнеп ялынасаҡһың!" тине лә, итек табанына ҡағылған тимер дағаларын шыҡ-шыҡ иттереп баҫып, рәттәр буйлап китеп барҙы.

Аяғына сержант типкән оҙон Васильевтың әрнеүҙән нисек ғазапланғанын күргән Тәфтизән бер аҙҙан инде турайып торған теге егеткә:

- Нишләп үҙенең аяғына типмәнең, әллә ҡурҡтыңмы? - тине. Тегеһе:

- А ты сам попробуй, - тип танау төбөнән генә мыңғырҙаны, әйтерһең дә, уға Тәфтизән әле генә ниндәйҙер насарлыҡ эшләгән.

- Мин һинең урынында булһам, яуапһыҙ ҡалмаҫ инем барыбер...

- Минең урында ла булырһың... Тик, ҡаршылашырға кәңәш итмәҫ инем. "Дед" бит ул!..

- Юҡ, мин барыбер ҡурҡмайым!..

Йәш һалдаттарҙы станцианан алып ҡайтырға састан асыҡ бортлы ике йөк машинаһы ебәргәйнеләр. Ҡуйы йәшел төҫкә буялған ҡалын таҡталарҙы кеше ултырыуға ярагаштырып, кузовҡа бик ыҡсым итеп арҡыры теҙгәндәр. Капитандың бойороғо буйынса егеттәр етеҙ генә машиналарға тейәлеште. Кузовтың иң артҡы эскәмйәләрендә сержанттар урын алды. "Старший кузова" тип атала икән улар ваҡытлыса үтәгән вазифа. Ә офицерҙар "старший машины" булып кабина эсенә водитель янында урынлашты. Шундай тәртип бар, күрәһең, армияла.

- Берәүгә лә аяғөҫтө баҫып тормаҫҡа! - тип бойорҙо сержанттарҙың береһе. - Һәм тәмәке тартмаҫҡа, - тип өҫтәне. Янындағы бер егеттең ҡулынан тәмәке ҡабын йәһәт кенә тартып алды. Үҙе ҡапты асып, унан сигареттар һурып алып, янында ултырған сержанттарға һуҙҙы.

- Угощайтесь, "гражданка" еҫе сыҡҡан күстәнәс менән, - тине көлә-көлә. Әрменең "әсесөсөһөн" татыған был өс егет йәштәрҙең күҙҙәрен ҡыҙҙырып, көйрәтеп ебәрҙе...

* * *

Иге-сиге күренмәгән, һис бер ағас ишараты булмаған ҡылғанлы-ҡомло икһеҙ-сикһеҙ дала буйлап, артынан саң ҡойоно уйнатып, барҙы ла барҙы машина. Кистән поезда туйғансы ашап йоҡлап килеүҙәренә ҡарамаҫтан, ярайһы ғына асыҡтырҙы. Ул ғына ла түгел, "үлтереп" һыуһаттырҙы. Етмәһә, был "старший"ҙар тәмәке лә тартырға рөхсәт итмәй...

- Тағы оҙаҡ барырғамы? - тип һораны Тәфтизән янындағы сержанттан, ҡулындағы сәғәтенә тағы берҙе ҡарап алғас.

- Барып етергә ике сәғәт самаһы бар әле, - тине сержант йәшкелт-һоро туҡыма менән тышланған "армейская фляга" эсенән һыу уртлай-уртлай.

Теге Колупаев Тәфтизәндең сәғәтенә бер күҙ менән генә ҡарап алды, ләкин бер ни ҙә өндәшмәне. Күрәһең, үҙенең буласаҡ табышы башҡа олораҡ сержанттарға эләгеп ҡуйыуынан шөрләне...

Быдайын да яланғас икһеҙ-сикһеҙ даланы Тәфтизән Башҡортостандың иң көньяҡ райондарының береһе - Хәйбуллала ла күргәне юҡ. Бер нисә йыл элек Таштуғайҙа йәшәгән апаларына барырға тура килгәйне. Ялан яҡ булыуға ҡарамаҫтан, унда, исмаһам, кескәй йылға үҙәндәрендә булһа ла йәшел үҫемлек-маҙар күренгеләй. Иге-сиге күренмәгән иген баҫыуы. Тыуған яғын иҫләй башлағас та, ата-әсәһе, туғандары, дуҫтары күҙ алдына килде.

- Нимә, сәғәтеңде сисеп, өйҙә ҡалдырманың? Барған көндө үк берәй "старикка" бүләк итәһең инде, - тине ҡустыһын оҙатырға килгән, бер аҙ күңелләнеп алған Хәсән ағаһы вокзалда. - Һин мине, ҡарт һалдатты тыңла, ҡустым. Сәғәтеңде лутсы миңә ҡалдыр, бер йылдан посылка менән ебәрермен...

- Һәрмәп ҡараһын... - тип көлдө Тәфтизән. - Бына ошо сәғәтте ике йылдан һуң ҡулыма таҡҡан көйө әйләнеп ҡайтмаһаммы...

- Әллә, ҡустым, икеләнәм... Ике йыл буйы һалдат һурпаһы һемереп йөрөп, бер ҡасан да "молодой"ҙарҙың сәғәт тағып йөрөгәнен күргәнем юҡ...

Олатаһы ихата тышына тиклем генә, ә атаһы менән әсәһе уны ауыл ситенә тиклем оҙатты. Унан алда ике улдары әрмелә имен-һау йөрөп ҡайтҡанғалыр, әллә ни борсолғандары ла һиҙелмәне. Шулай ҙа хушлашҡан саҡта әсәһе күҙ йәштәрен тыя алманы, бер аҙ мышнап илап алды. "Именаман ғына йөрөп ҡайт инде, балам", тип теләктәрен теләп ҡалды. Ә атаһы: "Тырыш хеҙмәт ит, беҙҙең Абдуловтар исеменә тап төшөрмә", - тип кенә әйтте.

Һөйгән ҡыҙы Әмилә, әлбиттә, уны оҙатырға вокзалға килде. Бик теремек кенә ҡыҙ ул. Һаҡмар буйында үҫкән зифа талдай һомғол буйлы, тулҡынланып торған оҙон һары сәсле, тулған ай кеүек түңәрәк аҡ йөҙлө, аяҙ күк йөҙөндәй зәңгәр күҙле сибәркәйенең бит остарына тәгәрәп төшкән ынйылай күҙ йәштәре әле булһа уның күҙ алдында. "Мин һине яратам, Тәпез, ҡайтҡаныңды өҙөлөп көтәсәкмен", тине ул егеткә күҙ йәштәре аша моңһоу ҡарашын төбәп. Һүҙгә һараныраҡ булған Тәфтизән уға бер ни ҙә өндәшмәне, тик ҡыйыуһыҙ ғына ҡосаҡлап, битенән үпте. Әй, бешмәгән, исмаһам, "Мин дә яратам", тип әйтергә лә эшкинмәгән. Егет уйы менән үҙен шелтәләп алды...

Көньяҡ халыҡтары кеүек ҡарағусҡыл битле, ҡара ҡашлы, осҡонланып торған ҡара күҙле, үткер ҡарашлы, Урал аръяғы башҡорттарының күптәренә хас булған уртаса буйлы Тәфтизәненә "Тәпез" тип яратып, иркәләп тик Әмиләһе генә өндәшә. Ә үҙе йәшәгән төбәктә Тәфтизән - бик һирәк осрай торған исем. Ни өсөн тап шул исемде ҡушҡандарын ҡасандыр ул атаһынан һорашҡайны. "Яҡташыбыҙ - тулы "Дан ордены" кавалеры Тәфтизән Миңлеғоловтың хөрмәтенә олатайың бирҙе һиңә был исемде", тине атаһы...

- Подъезжаем, - тигән әкрен генә тауыш уның татлы уйҙарын бүлде. Офоҡ һыҙығында боронғо ҡәлғәне хәтерләткән бейек таш ҡоймалы ҡоролма күренде. Ҡойма артындағы йорттарҙың ҡыйыҡтары ла асыҡ ҡына беленә. "Казармалар", тип уйланы Тәфтизән, күптән түгел ҡараған ниндәйҙер кинофильмдағы күренеште хәтерләп. Бына ҡайҙа алып килеп ташланы һине яҙмыш...

Тәүҙә уларҙы күпмелер ваҡытҡа ошо йәш һалдаттар өсөн бүленгән казарманың актовый залына индерҙеләр. Сәхнәлә трибуна янындағы ҡыҙыл туҡыма ябылған оҙон өҫтәл артында бер нисә офицер ултыра. Еегттәрҙе берәм-һәрәм урындарынан ҡалҡытып, кем ниндәй һөнәргә эйә, йә иһә, кем нимә менән мауыға, тигән һымағыраҡ һорауҙар биреп, үҙҙәренең алдында ятҡан ҡағыҙҙарға ниҙер яҙғыланылар. Ә инде "Ҡайһы өлкәнән килгән пополнение?" тигән һорау килеп тыуғас, офицерҙарҙың береһе асыҡ ҡына ишетелерлек итеп:

- Әгәр мөмкин булһа, үҙемдең частағы личный составты фәҡәт Башҡортостан егеттәренән генә формировать итер инем, - тине. Шул саҡ күңелдәре үҙ иле өсөн ғорурлыҡ

***✓ Күрше район үҙәгенән булған Илһамды ла буш ҡалдырманы сержант. Ахырҙа, сират Тәфтизәнгә етте. Юлда сәғәтен һалдырып ала алмаған "молодой"ға кесе командирҙың иҫәбе айырыуса ине.***

тойғоһо менән һуғарылған егеттәр үҙ-ара еңелсә геүләшеп алды... Һуңынанырак был офицерҙар - ошо соединениелағы полк командирҙары икәне асыҡланды.

Көтмәгәндә коридорҙағы дневальныйҙың казарма яңғыратып "Смирно!" тигән бойороғо ҡолаҡтарҙы тондорҙо. Шул арала актовый залдың ишегенән яғаларына имән япрағы төшөрөлгән, салбар балаҡтарының ике ягына асы ҡыҙыл таҫма тегелгән, иңдәренә ҙур ғына берәр йондоҙло погон таҡҡан олораҡ йәштәге бер офицер килеп инде. Сәхнәләгеләр барыһы ла аяғүрә баҫып ҡатып ҡалды. Араларынан береһе аяҡтарын юғары күтәреп, тәҙ-тәҙ атлап, тегенең ҡаршыһына барып баҫты:

- Товарищ генерал-майор...

- Вольно!

Генерал етеҙ хәрәкәт менән тәүҙә йәш һалдаттарға, унан сәхнәләгеләргә алмаш-тилмәш ҡарап алды ла, уларҙың араһынан йыуантағыраҡ бер офицерҙы баҫтырып ҡуйып:

- Товарищ майор, солдат покормили? - тип һораны. Теге майор (уның начпрод икәне һуңынанырак билдәле булды) ыҡ-мыҡ итеп, ниҙер әйтеп аҡлана башлағайны, генерал уны ҡырҡа бүлдерҙе:

- Отставить собеседование! Немедленно в столовую! Шагом марш!..

Һалдат ашханаһында ҡаҙимге генә тамаҡ ялғап алғас, уларҙы яңынан теҙеп, мунсаға алып килделәр. Һалдат мунсаһына алып килеүселәрҙең береһе теге бәләкәс ерән сержант ине. Сержанттың тағы ла сәғәт һорап ҡаҡшатырын алдан һиҙенгән Тәфтизән мунса ишеге алдында торған янғын таҡтаһына эленгән, айҙар буйы әҙәм ҡулы теймәгән, ҡыҙыл төҫкә буялған биҙрәнең эсенә һиҙҙермәй генә сәғәтен сисеп һалды...

Мунсаның сисенеү залында Колупаев Тәфтизәндең беләгенән күҙен алманы. Бөтөнләйгә сисенеп бөткән йәш һалдаттың ҡулында бер нәмә лә күренмәгәс, иҙәндә күбәләй булып өйөлөп ятҡан иҫке кейемдәрҙең кеҫәләрен берәм-һәрәм тентей башланы... Бәләкәс сәүек этте хәтерләткән был сержанттың ҡылығына ҡарап, Тәфтизәндең һыны ҡатып көлгөһө килде. Ҡыҫҡырып көләп ебәреүҙән көскә тыйылып, йыуыныу бүлмәһенә инде.

Оло юлдан арып-талып килгән егеттәр өсөн мунсала йыуыныуы ашханала һалдат бутҡаһы ашаған кеүек үк рәхәт булды. Тик сабына торған ерҙәре юҡ икән, шуныһы үкенесле... Һалдаттар әсе мунса ташында янып, яңылыш берәй йәрәхәт алмаһын өсөн, оборона министры ҡасандыр һалдат мунсаларындағы мейестәрҙе ҡәтғи тыйған, имеш. Ярай әле, йылы һыуҙы тыймаған...

Йыуыныу бүлмәһенең икенсе ишеге кейенеү залына ҡарай асыла. Унда ҡорһағы ныҡ ҡына алға бүлтәйеп торған, ҡайһы бер кинокомедияларҙағы немец фельдфебеленә оҡшаған прапорщик таҙарынып сыҡҡан йәш һалдаттарға өр-яңы хәрби кейем өләшә. Янына килгән һәр һалдатҡа күҙҙәре менән етеҙ генә баштан аяҡ ҡарап ала ла, шунда уҡ янында торған ярҙамсыһына кейемдәрҙең үлсәме буйынса бойороҡ бирә. Ә Ахмедов (ярҙамсы һалдаттың фамилияһы шулай ине) кәрәкле үлсәмдәге кейемдәрҙе тиҙ генә таба һалып, шәрә һалдатҡа тоттора. Тулы комплект форма алғандар шунда уҡ стенаға беркетелгән ғәйәт ҙур көҙгө алдына барып баҫып, үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр һалдат кейемен кейә башлай...

Складта оҙаҡ ятыуҙан таушалған, нафталин еҫе аңҡып торған йәшкелт-һоро төҫтәге өр-яңы хәрби формалағы йәш һалдаттар, тышҡа сыҡҡас, ҡапыл да бер-береһен танымайыраҡ та торҙо. Күптәренә ят кейем ҡаҙимгә генә килешә, ә ҡайһы берәүҙәргә, киреһенсә, һыйыр өҫтөнә һалынған эйәр һымаҡ... Меҫкен, оҙон Васильевҡа ҡарап та Тәфтизәндең көлгөһө килде. Сөнки тегенең саманан тыш нәҙек, ит әҫәре ҡунмаған һын-ҡиәфәте һалдат формаһы кейгән бакса ҡараҫҡыһын хәтерләтә ине. Пилотканы ла бер-ике размерға ҙурыраҡтан биргәндәр, ахырыһы. Уныһы ҙа ябыҡ бите тағы ла бәләкәйләнеп ҡалғандай. Оҙон кәүҙәһен бер аҙ алға эйеберәк йөрөгән был һалдаттың әллә ҡырҡ алтынсы, әллә унан да ҙурыраҡ кирза итеге атлаған һайын "гүлт-гүлт" тигән тауыш та сығарған һымаҡ...

Армияға ҡәҙәр физик эшкә күнегеп, йәй буйына тиерлек бесән сабып, утын ярып, унан үҙе яһап алған штангала өҫтәлмә күнегеүҙәр арҡаһында мускулдарын нығытып алған Тәфтизәнгә форма бик тә килешеп тора. Үлсәмдәрен дә үҙе әрһеҙләшеп, бик ентекләп һайлап алғайны шул. Хатта нимәһе менәндер инде берәр йыл хеҙмәт итеп йөрөгән һалдатты ла хәтерләтә... Уңайын табып, мунсаның тәүге ингән ишеге яғына сығып, биҙрә эсенә йәшерелгән сәғәтен янынан алып, беләгенә тағып алды.

- В две шеренги становись! - ҡайҙандыр аңғармаҫтан пәйҙә булған Колупаевтың әсе тауышы яңғыраны.

Утыҙлаған һалдаттан торған взвод ике рәт булып теҙелешә.

- Слышьте, салаги, - тип башланы строй алдында әтәс кеүек ҡуҡырайып алған Колупаев, - хәҙер мин һеҙгә строевой смотр үткәрәсәкмен. Берәйегеҙҙең тышҡы ҡиәфәтендә бер етешһеҙлек тапһам, үҙегеҙгә үпкәләгеҙ. - Ҡулындағы аҫҡыстар бәйләмен һуҡ бармағы тирәһендә әйләндергеләп, строй алдында уңға-һулға йөрөгәләгән был кесе командир тештәрен шыҡырҙатҡан һымаҡ тойолдо. Йөҙөнә асыу билдәләре сыҡҡан, әйтерһең дә, уның саманан тыш ҡыҫҡа буйлы булыуына ошо йәш һалдаттар ғәйепле. Кес кенә кирза итегенең үксәләрен ике мәртәбәгә ҡалынырак итеп яһаттырып алыуына ҡарамаҫтан, ул буйға стройҙың иң һуңында торған йәш һалдаттан да тәпәшерәк. Саф башында иң беренсе булып торған Васильевтың ҡап яртыһындай ғына тойолған был сержант ни өсөндөр уны дошманындай күреп ҡабул итте. Әле лә йөҙөнә әшәке мыҫҡыллы йылмайыу билдәләре сыҡҡан был кесе командир туп-тура баҫып, иң тәүҙә стройҙың уң флангыһына килде һәм Васильевтың ҡаршыһына барып баҫты. Баштан-аяҡ ҡарап алғандан һуң, уның беләктәй нәҙек биленә тағылған ҡайышына тотондо. Ярайһы ғына ныҡ итеп һыҡтырылған биле менән ҡайыш араһына көсләп уң ҡулын тыҡты ла кинәт кенә һелкетә тартты. Биле ауыртыуҙан "ыңҡ" иткән өн сығарған һалдат йәш тал сыбыҡтай сайҡалып ҡуйҙы. Аҫҡы яңағын алға сығара биреберәк, йөҙөнә ажар төҫ бирергә тырышып, "Пащ-ще-му ремень слабый?" тип һорау биреү ыңғайына, аңғармаҫтан, бар көсөнә киҙәнеп, һалдаттың эсенә төрттө. Тегеһе ике ҡуллап эсен тотоп, ергә сүгәләнә. "Стоять, салага!" тип, Васильевтың яғаһынан ике ҡуллап күтәреп торғоҙорға итте, ләкин уның кескенә буйы ике метрлы оҙон һалдатты яртылаш күтәрергә генә етте. Ул ҡулдарын ҡапыл ысҡындырып, Васильвты артҡы рәттә торған һалдаттар өҫтөнә ҡарай этәрҙе. Тегеләр уны ергә йығылдырмай тотоп алып, аяғына баҫырға ярҙам иттеләр.

Үҙен бик оло начальник итеп тойған Колупаев рәт буйлап башҡаларҙы тикшерергә кереште. Һалдаттарҙың һәр береһендә ниндәй ҙә булһа етешһеҙлек табырға тырышты. Йә ҡайышы бушаҡ, йә пилоткаһы ҡыйыш, йә булмаһа, берәй төймәһе эленмәгән... Һәр береһенә сержанттан тос ҡына "күстәнәс" эләгә. Күрше район үҙәгенән булған Илһамды ла буш ҡалдырманы сержант. Ахырҙа, сират Тәфтизәнгә етте. Юлда сәғәтен һалдырып ала алмаған "молодой"ға кесе командирҙың иҫәбе айырыуса ине. Уның тапҡырына килеп еткәс, ғәҙәтенсә:

- Пащему... - тигән ыңғайы бәләкәс кенә йоҙроғон һалдаттың ҡайышы менән гимнастеркаһы араһынан үткәрмәк булғайны, егеттең таш кеүек ҡатырылған эс мускулдары сержанттың бер бармағын да үткәрмәне. Шунан сержант бер аҙ көләмһерәп торған Тәфтизәнгә:

- Весело, да, салага? - тип екерҙе һәм бар көсөнә киҙәнеп, уның күкрәгенә төрттө. Былдай һөжүмде көтөп, әҙерләнеп торған йәш һалдат еңелсә сайҡалып ҡуйҙы, әммә йығылманы. Һалдаттың йығылмағанына тағы ла нығыраҡ асыуланған сержант, ғәйрәтләнеп, икенсегә киҙәнде, әммә көтөлмәгән хәлдән бөтә строй "ох" итеп ҡалғандай булды. Бер-ике секунд үтеүгә, әле генә әтәсләнеп йөрөгән Колупаев ике ҡулы менән эсенә тотоноп, ерҙә ята ине...

Шул арала ҡайҙандыр килеп сыҡҡан ике сержант Колупаевҡа ерҙән ҡалҡынырға ярҙам иттеләр һәм Тәфтизәнде стройҙан саҡырып алып, мунса артына алып инеп киттеләр...

**(Дауамы бар).**

КӨЛКӨФӨ



# БЫЛ ХӘЛДӘР КҮҢЕЛДӘ - йылмайта бөгөн дә

## ТАШЫ ТИГЕҘ ИКӘН

Ауылда 7-се синыфты тамамлап, синыфташым Бибинур менән Өфөгә, 9-сы башҡорт интернат-мәктәбенә юлландыҡ. Ишембайға тиклем тура юлдан йәйәү барып поезға ултырҙыҡ. Өфөгә еткәс, сабаталарҙы сисеп ташланыҡ та, интернатты ялан аяҡ эҙләп киттек. Үҙ-ара: "Тигеҙ таштан атлауы ҡалай рәхәт, ауылда ла шулай булһын икән", - тип һөйләшәбеҙ. Барҙыҡ, документтарҙы тапшырҙыҡ, тик ятырға урын ҡалмаған икән. Уныһына иҫәбеҙ китмәне, кискә тиклем рәхәтләнеп тигеҙ ташта ялан аяҡ йөрөнөк. Шуныһы ҡыҙыҡ: беҙҙең ялан аяҡ икәнлегебеҙгә бер кем дә иғтибар итмәне. Һуғыштан һуң бит.

## АУЫЛ БИСӘҺЕ

Кис етте, ҡайҙа төн үткәрергә икән, тип баш ватып торғанда, эргәбеҙгә бер ҡатын килде. Өҫтөндә иҫке күлдәк, башында төҫө уңған яулыҡ, ялан аяҡта кәүшәйеп бөткән шәпәтә. Үҙебеҙҙе белмәй, ҡалай был хәс тә ауыл бисәһе, тип хихылдашабыҙ. Теге апай ауылға эшкә китеүҙәрен һәм фатирында ҡалдырырға кеше эҙләп йөрөүен әйтте һәм беҙҙе өйөнә алып ҡайтты. Аксаков урамындағы ике ҡатлы ағас йортта йәшәп, һынауҙар биреп, интернатҡа ла урынлаштыҡ. Шулай итеп, ҙур ҡалала "ауыл бисәһе" ярҙамында ауырлыҡ күрмәнек. Хәҙер ҙә улар күберәк булһа, асығып йөрөүсе ташландыҡ балалар аҙыраҡ булыр ине лә бит..

## ҺАУМЫҺЫҒЫҘ...

Интернатта йәшәй башланыҡ, кейендерҙеләр. Урамға ла сығып йөрөйбөҙ, ундағы халыҡ менән башҡортса, урыҫса, татарса һаулыҡ һорашабыҙ. Берәүҙәр яуап бирә, бәғзеләре яман ҡарап китә, көлөүселәр ҙә булды. Бүлмәгә ҡайтҡас, ҡыҙҙарға һөйләнәк, тегеләр тәгәрәп көлә: ҡалала иҫәнләшмәйҙәр, имеш. Шулай итеп, ауыл менән ҡаланың тәүге айырмаһын да аңланыҡ.

## ҠАРА КҮҘЛЕК

Инде Өфөгә үҙләшеп бөттөк, бармаған, инмәгән урын ҡалманы. Бер тапҡыр китеп барһаҡ, бер хәрби кеше ҡара күҙлек кейгән, төрлө тауарҙан тегелгән күлдәк кейгән ҡатынды ҡултыҡлап китеп бара. Теге ҡатынды, һуҡырҙыр инде, тип, эй йәлләйбеҙ, ҡорама итеп тегелгән күлдәгенә аптырайбыҙ. Аҙаҡтан ғына ҡара күҙлекте, төрлө туҡымаларҙы ҡатнаштырып, модалы итеп тегелгән күлдәкте белдек.

## ӘРТИС БУЛАМ!

Уныпсы синыфҡа бара торған йылда интернатҡа иртәрәк барҙыҡ. Барһам, унда синыфташым Лина ла килгән. Көнө буйы урамда ял итеп, афишалар ҡарап йөрөйбөҙ. Театр училищеһына студенттар йыйыуҙарын белеп ҡалғас, юрый ғына шунда барып ҡарарға булдыҡ. Бер бүлмәгә инһәк, бер ағай ултыра. Ул беҙгә һынау үткәрергә булды һәм атайыбыҙҙың һуғыштан ҡайтып килеүен күрһәтеүҙе, ни эшләр инегеҙ, шуны уйнап күрһәтегеҙ, тине. Беҙ икәүләшеп иләмһеҙ тауыштар сығарып, ишеккә ташландыҡ. Хәрәкәттәребеҙ ҙә, тауышыбыҙ ҙа бик ҡурҡыныс булғандыр инде, теге ағай артыбыҙҙан "Иҫәрҙәр!" тип ҡысҡырып ҡалды. Ҡайҙа ул кире инеү, урамға йүгерҙек.

## ТӘСБИХ

Интернат ашханаһында компот бирәләр. Бөр көндө компот эсеп бөткәс, өҫтәлгә күҙ һалһам, иҫ китте: тәсбих теҙә торған финик һөйәктәре тулып ята. Мин сыҙамай, уларҙы йыйып алдым, аҙаҡтан уларҙы ауылда ололарға тараттым. Үҙемә лә тәсбих яһағайным, уны аҙаҡтан кеше аша 1-се гимназия-интернаттың музейына биреп ебәргәйнем, барып етмә-юҡмы, белмәйем.

## УРЫҪ БАЙРАМЫ

Китапханаға барыу һылтауы менән урыҫ байрамдарына ла бара торғайныҡ Бибинур менән. Бигерәк тә "йомортҡа байрамы" төшөмлө була торғайны, буялған йомортҡа, кәрәндил, аҡса ла эләгә. Ашап туйбыҙ, ҡалғанын урамдағы малайҙарға бирәбеҙ. Аҙаҡ Стәрлелә уҡығанда ла урыҫ байрамдарына йөрөнөк. Унда артҡан аҙыҡ менән студент егеттәрҙе һыйлай инек.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# МАЖАРА ЭҘЛӘҮ...

## гендарҙан килә

■ Көҙгө депрессиянан Ер йөҙөндәге һәр бишенсе кеше яфалана, тип белдерә Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы. Моңһоу көҙ кешенең физик һәм эмоциональ хәленә кире йоғонто яһай. Кәйефте яҡшыртыуҙың бер ысулы - төҫ терапияһы, тип белдерә табиптар. Ҡыҙыл төҫ ҡан баҫымын күтәрә, тыш алышын тиҙләтә, кешегә ышаныс бирә, ижадҡа этәрә. Был төҫ эмоцияларға иң бай төҫ иҫәпләнә. Ул иң тәүҙә күҙ селтәрендә туплана. Әммә ҡыҙыл төҫ агрессия тыуҙырыу һәләтенә лә эйә, шуға ла кейемдә уны деталдәрҙә ҡулланыу яҡшы. Һары төҫ эндокрин һәм аш һеңдереү системаһы эшмәкәрлеген күтәрә. Ул күңелде күтәрә, иғтибар тупларға ярҙам итә. Әгәр ҙә кешенең тирәяғында һары төҫ артыҡ икән, уны борсоу, ҡурҡыу тойғоһо биләп алыуы ихтимал. Ҡыҙғылт һары төҫ - тормоштоң төрлө үҙгәрештәренә әҙерлекте аңлата. Йәшел - тынысландыра, күңелдә өмөт уята. Ул күҙ һәм ҡан баҫымын түбәнәйтә, ишетеү һәләтен яҡшырта. Күк төҫтәге кейемдә эшкә йөрөү яҡшы, сөнки ул мейе эшмәкәрлеген әүҙемләштерә.

■ Гел ҡыҙыҡлы мажаралар эҙләп, төрлө ваҡиғаларға тарып йөрөү ғәҙәте гендарға һалынған була, тип белдерә Америка ғалимдары. Гендарында билдәле бер мутациялар булған кешеләр, нимә менән шөғөлләнеүенә ҡарамайынса, бер ҡасан да бер урында ултырып сыҙамай. Билдәле булыуынса, холоҡтоң бындай һыҙаттары булған кешеләрҙең баш мейеһендә допамин бүленеп сыға. Допамин системаһындағы гендарҙы тикшереп, белгестәр унда бер нисә төр мутация барлығын асыҡлаған. Кеше характеры унаң гендары тураһындағы мәғлүмәткә генә нигеҙләнеп билдәләп булмай, шуға ла был өлкәлә тағы ла тикшеренеүҙәр буласаҡ, ти ғалимдар.

■ Британия эксперттары үткәргән һорау алыу мәғлүмәттәренә ярашлы, күп кешеләр 35-44 йәштән һуң үҙен яңғыҙ тоя һәм депрессиянан яфалана икән. Һәр кеше тормошонда була торған бындай кризистар бынан бер нисә йыл элек кенә 40 йәштән һуңыраҡ башлана ине, тип белдерә ғалимдар. Яуап биреүселәрҙең 21 проценты шәхси тормошонда, эшендә йәки өйөндә ниндәйҙер проблемалар кисерә. Тикшеренеүҙәр бөгөн буш ваҡыты булмаған ата-әсәләрҙең балалары менән тик интернет һәм телефон аша аралашыуын да асыҡлаған. Ланкастер университетынан стресс өлкәһендә тикшеренеүҙәр үткәреүсе профессор Кэри Купер фекеренсә, хәҙерге замандың иҡтисади шарттарын иҫәпкә алһаҡ, психологик кризис менән хәл бермә-бер насараясаҡ. Ул килтергән мәғлүмәттәр буйынса, Британияла психик тайпылыштары булған кешеләрҙе дауалау өсөн йылына 28 миллиард фунт тотонола.

■ Америка ғалимдары бер ҡасан да көсө бөтмәй торған батарейка уйлап тапҡан. Был батарея ядерлы һәм энергияны радиоактив изотоптар тарҡалыуы һөҙөмтәһендә ала, шуға ла унаң кеше өсөн хәүефһеҙ булыуын анаҡ ҡына әйтеп булмай. Әммә уны уйлап табыусы Миссури университеты ғалимдары әйтеүенсә, бында хәүефләнергә урын юҡ, сөнки ядерлы энергия сығанағы көнкүрештә күптән ҡулланыла, мәҫәлән, яһалма йөрәк, йыһан юлдаштары, пилотһыҙ оса торған аппараттар тап ошондай батареялар ярҙамында эшләй. Тик хәҙер ғалимдар был батареяны биш һумлыҡ тимер аҡса ҙурлығында ғына итеп яһауға өлгәшкән, уны кәрәҙле телефондарға, ноутбуктарға, фотоаппараттарға ҡуйсаҡтар. Иң мөһиме - унаң менән йөҙ йылға яҡын ҡулланып буласаҡ.

ЮЛДАР САЙТЫНДА

**Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы алдынан ойоштороу комитеты уға интернеттағы башҡорт сайттарына ҡыҫҡаса байҡау яһарға тәҡдим итә. Эш башҡарыла, әммә Ҡоролтай материалдарында ул хеҙмәт сағылыш тапмай. Әҙер мәғлүмәтте әрәм итеп, киң халыҡ иғтибарына сығармай ҡалдырыу хилаф булыр, тип, уны гәзитебеҙҙә бирергә булдыҡ. Һүҙ - интернет киңлектәрен яулау буйынса башҡорт сайттарына ҡағылышлы байтаҡ мөһим етешһеҙлектәр тапҡан һәм киләсәктә уларҙы күмәк көс менән хәл итеп булыр,тип өмөтләнгән шағир, журналист Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВҡа.**

# ИНТЕРНЕТ СЕЛТӘРҘӘРЕНДӘ...




## Башҡортостан һәм башҡорттар

### Заман менән йәнәш атларға

Сайт - бөтә донъяны ялмаған, асылда, икһеҙ-сикһеҙ мәғлүмәти селтәрҙә айырым кешенең йә ойошманың ҷаллы бер вәкиллеге. Уны юл ситендә торған, теләгән кеше инеп ҡарап сыға алған кибет менән дә сағыштырырға мөмкин, һәр кем үҙе һатып алып уҡый һәм ҡарай алған гәзиткә лә тиңләргә була. Бында икенсе сағыштырыу ысынбарлыҡҡа яҡыныраҡтыр, сөнки интернетты беҙ кешенең башҡа кеше йә берәй ойошма менән тиҙ һәм йүнәлешле аралашыу сараһы, йәғни мәғлүмәт сығанағы тип ҡабул итәбеҙ. Бар донъя туранан-тура аралашыуҙан виртуаль бәйләнешкә күскән осорҙа интернет беҙгә бындай мөмкинлекте бирә: унда мөмкин тиклем күберәк мәғлүмәт араһынан һайлап алыу бар, уны ҡабул итеү тиҙлеге бар, шулай уҡ үҙенде лә шундай уҡ сифаттарҙа һәм тиҙлектә тәҡдим итергә була.

Башҡорт сайттары беҙҙең төбәктә интернет селтәре барлыҡҡа килеү менән пәйҙә булды. Был юҫыҡта тәүге аҙымдарҙы һәр яңы нәмәне ҡыҙыҡһынып ҡабул итергә яратҡан һәүәҫкәр әҙәрмәндәр яһаны. Байтаҡ ваҡыт был фәҡәт уларҙың ғына шөғөлө булып ҡала килде. Башҡортса текстарҙы интернетта урынлаштырып булмауы кинерәк ҡоласҡа сығырға ҡамасауланы. Шуға ла хатта башҡортса тип аталған сайттарҙа ла аралашыу һәм хатлашыу рус телендә йә тик рус хәрефтәре ярҙамында алып барылды.

Хәҙер был ҡаршылыҡ йырып сығылған, тип әйтергә мөмкин. Мин үҙем, мәҫәлән, электрон почта аша көн һайын башҡорт телендә бик күп текстар алам, уларҙы журналда ла урынлаштырам. Унан һуң, барлыҡ мәктәптәрҙә лә бөтә донъя селтәренә тоташтырыу башҡорт алфавитын "интернетлаштырыу" юлында икенсе аҙым булды. Тап шуларҙан киләсәктә башҡорт Билл Гейтстары үҫеп сығасаҡ та инде. Улар бөгөн уҡ компьютер менән дуҫ-туған булып үҫә. Интернеттың "киңлеккә" үҫеше лә башланды - ул төрлө ҡатлам кешеләренең, хатта техниканан үтә йыраҡ торған кешеләрҙең дә өйөнә үтеп инә, телефон аппараттарына ла күсә.

### Виртуаль донъялағы "башҡорт диаспораһы"

Әйтергә кәрәк, интернеттағы "башҡорт диаспораһы" шаҡтай киң һәм төрлө вәкилдәрҙән тупланған. Хәҙер инде был һандарҙың сифатҡа күсергә тейешлеге тураһында һүҙ алып барырға ла мөмкиндер. Был күсеү мәсьәләләрен барлыҡ интернет-йәмғиәттең дөйөм яҫылығында - мәғлүмәттең күләме, яҡынлығы һәм алыу тиҙлеге мөмкинлектәренән сығып ҡарарға кәрәк.

Ябай ҡулланыусы күҙлегенән ҡарап, шуны әйтә алам: интернет киңлектәрен яулауҙа эш мөмкин тиклем күберәк сайттар һәм порталдар асыуҙа тормай, ә уларҙы эшлекле ҡиәфәттә тотоу мәсьәләһе мөһимерәк. Был, ғөмүмән, тотош интернеттың ҙур проблемаһы ул. Тик ул уны сикһеҙ һан артынан ҡыуыу иҫәбенә генә ҡаплатып тора. Икенсе мәсьәлә - бирелгән мәғлүмәттең дөрөҫлөккә тап килмәү ихтималлығы, ләкин унаһы инде башҡа эш. Гәзит матбуғаты күҙлегенән ҡараһаҡ, быны былайтып баһалап булыр ине: һеҙгә бөгөн иртән киоскыла кисәге гәзитте тотторалар һәм бөгөнгө гәзиттең әлегә сыҡмауы, сөнки редакцияларҙың кисә эшләмәүенә һылтаналар...

Шуның өсөн дә барлыҡ интернет-сайттарҙың да төп мәсьәләһе - барыһына ла барып етерлек мәғлүмәттәрҙең даими яңыртылып тороуы. Килешерһегеҙ, ойошманың сайтына инеп, унда директор булып бер йыл элек үк эшенән алынған кешенең фамилияһы торғанын күрһәгеҙ, ул ойошмаға ышанысығыҙ ҙа булмаясаҡ. Йә иһә кескәй генә бер хәбәрҙе асыҡлап алырға уйлап ҡына кереп ҡарарға итәһегеҙ һәм унда "был бит яңыртылыу өҫтөндә" тигән яҙыуға юлығаһығыҙ. Бындай ваҡ "етешһеҙлектәр" киләсәктә, күрәһең, бөтә донъя селтәрен яулауҙың башҡа этабына ҡалыр - үҙенең уҡыусыһының ихтирамын яулап өлгөргән ҙур гәзиттәр бит үҙ эшендә бындай ваҡ хаталарға ғына түгел, түбән сифатҡа ла юл ҡуймай...

Бөгөн үҙен ихтирам иткән һәм үҙен ихтирам итеүҙәрен теләгән һәр ойошма интернет селтәренә сыға. Электрон почта адресы хәҙер ғәмәлдәгеһен тулыһынса алыштыра, күләме, тиҙлеге һәм йылдамлығы буйынса уны уҙып та китә. Ошонан файҙаланып, ойошмалар үҙҙәренең сайттарын аса һәм үҙҙәренең реклама биттәрен, адрес-реквизиттарын элеп ҡуя. Тик шунан ары китмәй. Күптәрenә шунан артығы кәрәкмәй ҙә, ләкин күпселектә эш интернет-технологияларҙы ҡуллана белеүсе белгестәрҙең булмауына килеп төртөлә.

### Ҡайҙа һеҙ, администраторҙар?

Башҡорт сайттарына ҡараһаҡ, бер уҡ ваҡытта башҡорт һәм рус телен дә белеүсе администраторҙарҙың юҡлығын танырға тура килә. Күп сайттар башланғыс осоронда уҡ "аҫылынып" ҡала, сөнки уларҙы эшләтеү өсөн бер нисә белгес талап ителә: сайт администраторы, башҡортса текстарҙы редакторлаусы, ул текстар менән тәьмин итеп тороусы, йәғни, ҡуйыласаҡ материалды эшләүсе. Бәлки, бында көндәлек гәзитте эшләү технологияһы һымаҡ юл ярҙам итә алыр ине: унда гәзитте әҙерләү менән бер нисә кеше шөғөлләнә, ә шулай ҙа тик баш мөхәррир генә баҫманы сығарырға фатиха бирә. Был система әлегә редакцияларҙың рәсми сайттарында уңышлы эшләй, унда баш мөхәррир гәзит менән бер юлы ҡайһы материалдарҙың интернетҡа сығарыуҙы ла хәл итә һәм администраторға күрһәтмә бирә. Тик был юл менән барғанда һәр мәктәп директоры, һәр ойошма етәксеһе компьютерҙы бик яҡшы белергә һәм унаң артында даими ултырырға, йә иһә үҙенең ышанаслы урынбаҫары кимәлендә администратор тоторға тейеш була. Шулай булмаһа, иртәгә үк һинең фирмаңдың барлыҡ серҙәре интернетҡа барып сығыу ихтималлығы бик ҙур.

Интернет-технологияларҙың артабан үҫеше менән сайттарҙы администрациялау мәсьәләһе тәрәнәйә генә барасаҡ, тип фаразларға кәрәк. Был эске һәм тышҡы цензураға ла (уларҙы әлегә бер кем дә бөтөргәне юҡ), интернет аша тәҡдим ителгән хеҙмәттәрҙең киңәйеүенә һәм шуға бәйле бик күп факторҙарға ла (дәғүәселәр, фискаль органдар тарафынан контроль һ. б.) бәйле.

Тик ундай глобаль мәсьәләләрҙе ҡалдырып тороп, күктән ергәрәк төшәйек әле. Беҙҙең бөгөнгө мәктәбебеҙ, дөрөҫөрәге, информатика дәрестәре, бөгөн һәр өйҙә тиерлек ултырған һәм йылдам рәүештә үҫеүен дауам иткән ҡатмарлы аппаратурала эшләй алырлыҡ кешеләрҙе әҙерләйме? Элек физика дәрестәрендә һәр уҡыусы үҙе радиоалғыс йыя ала торғайны. Сер түгел, әле күп мәктәптәрҙә торған компьютер кластарына хатта балаларҙы индермәйҙәр ҙә, йә күрһәтеп кенә сығаралар. Бер ҡыҙыҡ хәлде үҙемә ишетергә тура килде: бер мәктәптә интернетҡа тоташтырырға килгәндәр, ә ул, бәхетиһән, күптән тоташтырылған булған, тик был хаҡта хатта директор ҙа белмәгән...

Интернет-сайттар тураһында һүҙ алып барғанда, беҙ ундағы администраторҙы гәзиттәрҙәге баш мөхәррир һымаҡ уҡ кеше тип күҙ алдына килтерәбеҙ. Йә иһә үҙегеҙҙең һәр ғаиләгеҙ тураһында стена гәзите сығарып, уны урамға сығарып элеп ҡуйып ҡарағыҙ. Тик шуны танырға кәрәк: администраторҙарҙы беҙҙә махсус рәүештә бер ҡайҙа ла әҙерләмәйҙәр. Ғәҙәттә, улар - компьютерҙы үҙенең ғүмерлек шөғөлө тип ҡабул иткән төрлө һөнәр кешеләре. Шуға интернет-киңлектәрен яулауҙы сифат йәһәтенән тап шул күҙлектән баһаларға кәрәк: башҡорт телен белеү, программалар (инглиз) телен белеү, йылдам үҫешеүсе цифрлы технологиялар ташҡынында дөрөҫ йүнәлештәрҙе билдәләй алыу кимәле.

(Дауамы бар).

*ДОНЪЯ - ҠУЛАСА*

# ҠАРТЛЫҠҠА КҮПЕРҘЕ...

## йәш саҡтан һалыу фарыз



**"Хоҙай бәхетле ҡартлыҡ, игелекле балалар бирһен..." Йыш яңғыраған был теләк беҙҙең өсөн бер ҡалыпҡа һалынған, шуға күрә беҙ уның мәғәнәһенә төшөнөп тә етмәйбеҙ, буғай. Ә шул уҡ ваҡытта янибыҙҙа ғына бәхетһеҙ олатай-инәйҙәрҙең йәшәүе ҡурҡыныс бер төш булып күренә. Тик был һаташыу түгел, ә көндән-көн йышая барған фажиғәле ысынбарлыҡ.**

Берҙән-бер улының өйләнеүен был апай ҙур шатлыҡ менән ҡабул итә. Туйға алдан йыйған аҡсаһы, ҙур бүләге булыуы уның ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары алдындағы мәртәбәһен күтәреп ебәрә. Ике тиҫтә йылдан ашыу бергә татыу ғүмер иткән тормош иптәшенең был ҡыуанысты күрмәүе генә апайҙы моңһоу уйҙарға һала. Шулай ҙа яҙмыш үлсәүенең бәхет яғы нығыраҡ тарта. Тиҙҙән бәхетле өләсәй игеҙәк ейәндәрен саф һауаға алып сыға, унан ҡунаҡтарға бергә алып йөрөй башлай. Йәштәр айырым йәшәһә лә, кескәйҙәр йышыраҡ өләсәй ҡулында тәрбиәләнә.

Берҙән-бер көндө улы әсәһе менән бергә йәшәйәсәктәрен белдерә. Был үтенес булып түгел, ә мотлаҡ үтәлергә тейешле бойороҡ кеүек яңғырай. Әсә шатланып риза була. Тик тиҙҙән күрше-тирәһе, әхирәттәре уның көндән-көн моңһоуланыуын, ябығып, йонсой башлауын күрә. Ҡатын һыр бирмәҫкә тырышһа ла, килененең уны ныҡ ҡына рәнйетеүе, ә улының әсәһен яҡлап бер һүҙ ҡушмауы тураһында хәбәр тарала. Бәлки, шул саҡта уҡ уға ниҙер эшләргә, ниндәйҙер фекергә килергә кәрәк булғандыр. Әммә апай "дошмандарҙы ҡыуандырмайым" тип, түҙеп йәшәүен дауам итә. Һөҙөмтәлә, әкиәттәге ҡуян кеүек, үҙ йортонан ҡыуып сығарыла. Күҙ асып йомған арала, донъя тағы бер асарбаҡҡа арта. Апай яҡлау һорап мөрәжәғәт итерлек кеше лә тапмай. Яҡын туғандары ла юҡ. Хоҡуҡ һаҡлау органдарына мөрәжәғәт итер ине, улының баҫымы аҫтында күптән йорт-мөлкәтте уның исеменә күсереп бөткән. Унан һуң, "Нисек үҙ балаң менән судлашып йөрөйһөң" тигән ояты бар.

Ҡатындың улы һәм килене менән йәшәйеше тураһында ишеткән кешеләрҙең аптырауының сиге булмай. "Килен тәүҙә миңә "беҙҙең менән бергә ашарға ултырма" тип бәйләнде. Унан улар өйҙә саҡта аш бүлмәһенә бөтөнләй инә алмай башланым. Инде телдәре асылған, үҙем үҫтергән ейәндәремде лә мине һуғырға, әрләргә өйрәттеләр. Шул уҡ ваҡытта ашарға бешереү, өйҙө йыйыштырыу, кер йыуыу, баҡсабарыһы ла минең өҫтә булды. Ейәндәр ҡулдан төшкәс, бер көн килен улыма: "Йә-әсәйең, йә - мин, Һайла!"-тине. Улым мине шул уҡ көндө ҡыуып сығарҙы. Шул уҡ ваҡытта үҙ өйөнә килгәндәй килеп ингән килендең әсәһен күреп, балам уны ҡосаҡлап тигәндәй ҡаршы алып, тормош иптәшем менән һалған йортҡа әйҙүкләп индереп алып китте... Иң ауыры минең өсөн шул булды".

Яңғыҙ ҡалған, инде һаулығы ҡаҡшаған, етмеште ваҡлаған әсә тәүҙә кеше тупһаһында йөрөнө. Әммә үҙ балаһы ҡыуып сығарғанда, сит әҙәмдәр уны ниңә ҡараһын? Шулай ҡаңғырып йөрөй торғас, ул һикһәнде үткән әбей менән бабайҙы ҡарарға ялланды. Әлегә уларҙың йортонда йәшәй. Әммә ата-әсәһен ҡарауҙы сит ҡатын өҫтөнә йөкмәткән кешеләр ҙә ҡарттар үлеү менән уның был йортта булмаҫҡа тейешлеге тураһында иҫкәртеп ҡуйған. Иркәләп, бәпләп кенә үҫтергән улы уға ярҙам итеү түгел, уны күрергә лә теләмәй. Был фажиғәле яҙмыш нисек барып тамамланыр, билдәһеҙ.

* * *

Ә был ваҡиға әлегеһенең ҡапма-ҡаршыһы. Ул бабайҙың ятырға йомшаҡ түшәге, ашарға ҡайнар ашы бар, әммә уны бәхетлеләр рәтенә индермәҫ инем. Кескәй генә дүрт балаһын ташлап, ситкә сығып киткән ир уларҙы тәрбиәләү түгел, тейешле алиментты ла түләмәй. Дүрт баланы үҫтереп, барыһына ла юғары белем биргән әсәгә көн-төн эшләргә, теш ҡыҫып түҙеп йәшәргә тура килә. Балаларын бик аҡыллы, уңған итеп үҫтерә ул. Тик һаулыҡҡа туйына алмаған әсә, балаларын башлы-күҙле итеп бөткәс тә үтмәй вафат була. Тиҙҙән был йортта әллә нисәмә йыл ҡайтып та урамаған ата пәйҙә була. Йәш, көслө сағын күңел асыу менән үткәргән, үҙе өсөн генә йәшәгән, хәҙер инде бабай кешенең үҙ мөйөшө булмай сыға. Ул әле бер, әле икенсе балаһын барып ҡаңғырта, йортона индереүҙе талап итә. Балаларының ғәҙел рәүештә үҙ итмәйәсәген аңлаған кәкүк ата уларҙы судҡа бирә һәм ... еңә. Уны хәҙер балалары алмашлап көтә. Бабай еңеүсе ҡиәфәтендә йөрөһә лә, уның балаларының мөхәббәтен бер ҡасан да туймаясаҡ бер мәхлүк, бахыр булыуы йәлләү тойғоларын ғына уята. Ейәндәренең дә арзанлы кәнфит бирергә маташҡан ҡартатайҙарынан ендән ҡасҡан кеүек ҡасыуы, унан ерәнеүе был бабайҙың ни тиклем бәхетһеҙ булыуын раҫлай.

Эйе, Хоҙай Тәғәлә һәр әҙәм балаһына бәхетле ҡартлыҡ насип итһен. Иҫләйһегеҙме, беҙҙең халыҡтың быуындан-быуынға тапшырылып килгән фәһемле риүәйәте бар. Унда бер ғаиләнең ҡартайған ата-әсәһен айырым ултыртып, ҡалған-боҫтоҡ аҙыҡты ағастан юнылған һауытһаба, ҡалаҡтан ашата башлауы тураһында һөйләнелә. Быны күреп йөрөгән кескәй бала бер көн ағастан ниҙер юна башлай. Ата-әсәһе уның нимә эшләүе менән ҡыҙыҡһынғас, бала: "Бына һеҙҙе ҡартайғас ашатыу өсөн һауыт, ҡалаҡ әҙерләй башланым", - ти. Шул уҡ көндө ҡарттар ғаиләнең өҫтәл түренә күсерелеп ултыртыла, уларҙы матур һауыттарҙан, иң тәмле ризыҡ менән һыйлай башлайҙар. Аҡыллыға - ишара был. Йәш саҡтан бәхетле ҡартлыҡҡа күпер һала башлағыҙ. Ә әсәһен кәрәкмәгән әйберҙәй сығарып ташлаған улдың да, килендең дә күрәсәге алда әле. Сөнки улар донъялағы иң ҡурҡыныс енәйәткүкрәк һөтөнә хыянат ҡылды...

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ИСМИ ӘҒЗӘМ ДОҒАҺЫ

**Әс-Сәмииғү** - бар нәмәне ишетеүсе, иң йәшерен уйҙарҙы ла белеүсе. Кесе йома көнө йөҙ мәртәбә "Йәә Сәмииғү" тип теләһә, Раббыбыҙ ул кешене моразына ирештерер.

**Әл-Хәбииру** - хәбәрҙар, һәр нәмәнән хәбәре бар. Уның өсөн бер нәмә лә йәшерен түгел. Булғанды ла һәм буласаҡты ла белеүсе. Фиғеле һәм холҡо яуызлыҡтан булған бәндә был исемде күп уҡыһа, яуыз фиғеле изгелеккә әйләнер.

**Әл-Хәлииму** - гонаһлы бәндәләренә яза бирергә ашыҡмай, уларҙың изгелеккә күсеп, тәүбәгә ҡайтыуҙарын көтә. Был исемде даими әйтеп йөрөгән бәндәнең мөлкәте афәттәрҙән һаҡланыр.

**Әл-Ғәзииму** - кеше аҡылы етешә алмаған дәрәжәлә олуғ, ҙур. Уның башланғысы ла, ахыры ла юҡ. Уға оҡшаш бер кем дә, бер нәмә лә юҡ. Был исемде күп уҡыған кеше халыҡ араһында абруйлы булыр.

**Әл-Ғафүүру** - үтә мәрхәмәтле, ғәфү итеүсе зат. Ҡолдарының хаталарын ғәфү итә. Ҡайғылы һәм ауырыу кеше ошо исемде ҡабатлаһа шатлыҡ һәм шифа табыр.

**Әл-Шәкүүру** - шөкөр итеүсе. Үҙенең ҡолдарына әҙ генә ғибәҙәттәре өсөн дә ҙур бүләк биреүсе. Әҙ ғибәҙәттәрҙе күбәйтеүсе.

Был исемде күп тапҡыр ҡабатлаусы бәндәһенә Аллаһы Тәғәлә үҙ рәхмәте менән уның һәр ғибәҙәтенә ҙур баһа бирер.

**Әл-Ғәлийү** - һәр нәмәнән өҫтөн, бөйөк, Ул бер кемгә лә иптәш түгел, Уға тиңләшерлек бөйөклөктә бер кем дә юҡ. Был исемде даими рәүештә ҡабатлаған, йә булмаһа яҙып, үҙе менән йөрөткән Аллаһ ҡоло ҡәҙерле, кеше араһында абруйлы, сәләмәт булыр.

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ярлылыҡтан - байлыҡҡа

Гавайя аҡыл эйәләренә - кахундарға аңдың көсө мәғлүм була. Аңлау сиктәренән сыҡҡан аң кимәлен улар "унихипили" тип атаған. Улар уны үҙ-үҙеңдәге Булдырыусы, барлыҡ киңлекте тултырыусы ҙур көскә эйә Ижадсы тип атаған. Был белем яҙма сығанаҡтарҙа теркәлмәгәнлектән, бөгөнгө гавайялыларҙа киң танылыу тапҡан тикшеренеүҙәргә нигеҙләнергә ҡала. Унихипилиҙы "илаһи көс менән бәйләнеш өсөн үҙенсәлекле канал" тип атаусы мәрхүмә Мэри Фукуи шундай абруйлы кешеләрҙең береһе була.

Был канал тураһында друидтар ҙа белгәндер. Уларҙың "мөғжизәһе" ҡул етеҙлеге һәм оптик күҙ быуыуҙар сигенән сығып, иҫ киткес матди сағылыш таба.

Бындай концепция "Нью Эйдж" йүнәлешендә тикшеренеүҙәр алып барған ғалимдарҙың эшендә раҫлау таба. Улар был рухи каналды кеше мәнфәғәте өсөн ҡулланырға саҡыра. Улар раҫлауынса, миллионлаған кеше рухи инаныстары менән ҡанатланып, махсус бойороҡ менән аңға тәьҫир итеүсе ябай көсһөҙләнеү ярҙамында үҙҙәрендәге илаһи көстө файҙаланыу мөмкинлеге ала ала.

Беренсе бүлекте уҡып, һеҙ тәүге аҙымды яһанығыҙ һәм тәнегеҙҙе лә, аңығыҙҙы ла көсһөҙләндерергә өйрәндегеҙ. Хәҙер инде беҙ Ижадсы, Булдырыусы тип атаған үҙегеҙҙәге илаһи көс менән аралашырға ярҙам итәсәк артабанғы ябай аҙымдар хаҡында белергә әҙерләнегеҙ. Ҡасандыр был бушҡа ваҡыт уҙғарыу тип һаналған. Әммә ул - кеше аңына үтеп инеү мөмкинлеген биргән иң йоғонтоло ысул. Ул өндәге төш тип атала.

Энцефалограмма мейенең пульстарын теркәй. Улар - аңдың торошо тураһында мәғлүмәт илтеүсе электр тулҡындары. Әлеге ваҡытта мейегеҙ тулҡындарының йышлығы секундына 14-20 тирбәлеүгә тиң. Әгәр беренсе бүлектә яҙылғанса, күҙегеҙҙе йомоп, көсһөҙләнһәгеҙ, мейе тулҡындары йышлығын секундына 7-14-кә тиклем кәметә алаһығыҙ. Был дәүмәл мейенең альфа-тулҡындары йышлығы тип атала. Тап ул өндәге төштө күрһәтә. Тап ул йоҡлағандағы төшкә лә тап килә.

Һеҙҙең әлеге хәл-тороштағы әүҙем мейе тулҡындары йышлығы бета-йышлыҡ тип атала. Беҙ йоҡлап киткәндә мейе тулҡындары йышлығы альфа кимәленән дә түбән, секундына 4-7 тирбәлешкә тиклем төшә (был кимәл "тета" тип атала). Ул тағы ла түбәнерәк төшөп, дельта-кимәлгә еткәс, беҙ тәрән йоҡоға талабыҙ. Тета һәм дельта кимәлдә беҙ төш күрмәйбеҙ. Әммә төнөн һәр сәғәт ярымдан һуң мейебеҙ тулҡындарының йышлығы арта, һәм ул альфа-кимәлгә еткәс, беҙ төш күрәбеҙ.Төнөн даими төш күреү ниндәйҙер кимәлдә өндәге төш менән уртаҡ. Бик йыш улар беҙ Ижадсы тип атаған сикһеҙ аң сығанағы менән һуғарылған була.

Күп йылдар матдәнең тәбиғәтен өйрәнеүсе физик Нильс Бор атомдың яңы моделен эшләү өсөн кәрәкле мәғлүмәтте төшөндә ала. Был төш уға Нобель премияһын килтерә. Был - дан ғына түгел, аныҡ аҡса ла. Төшө уны бай яһай.

Төшөндә инсулинды лаборатор юл менән алыу ысулын күргән сэр Фредрик Грант Бантигҡа ла төшө байлыҡ килтерә.

"Трель дьявола" сонатаһын ижад иткән Джузеппе Тартини төшөндә шайтанға скрипкаһын бирә.. "Мин уның нисек ҙур оҫталыҡ менән иҫ киткес матур соната уйнағанын ишеттем. Һоҡландым..."ти ул аҙаҡ. Уянғас, композитор скрипкаһын алып, төшөндә ишеткән йырҙы ҡабатларға тырыша. Яңы тыуған әҫәр уның төшөндә ишеткән көй кеүек матур яңғырамай, шулай ҙа уның барлыҡ тормошонон иң юғары ҡаҙанышы була.

Бындай төштәр ниндәйҙер кимәлдә өндәге хыялдар менән оҡшаш. Икеһе лә ижади илһамдың сығанағы булыуы мөмкин. Төндәге төштәр ниндәйҙер дәрәжәлә үҙлекле. Өндәге төш менән идара итеп була һәм улар маҡсатҡа йүнәлтелгән. Әммә улар икеһе лә ысынбарлыҡты алдан белдерә.

**Роберт СТОУН.**

ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...

# ҒӘҘЕЛ БАҺАНЫ ТАРИХ БИРӘ

(Башы 3-сө биттә).

**Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ике телле һаналырға тейеш, тигәндә, нindәй телдәрҙе күҙ уңында тотаһығыҙ?**

- Быны әйтеүе ҡыйын, уны семинар ғына асыҡлай ала. Әйтәйек, Дүртөйләлә, Илештә, Нефтекамала ғүмер иткән халыҡтың теле ул татар телеме, әллә башҡорт теленең диалектымы?

**Ҡаҙандар уны бер ваҡытта ла татар теле тип танымаған.**

- Юҡ, улар бит "ич" тип һөйләшә. "Әнкәй", "әткәй", тимәк, "әннә", "әттә", "күмәч", ти. Дусым, исеме бөтөн донъяға танылған археолог Альфред Халиҡов, һинең телең ни татарса, ни башҡортса түгел, тип әй көлә ине. Беҙҙең тел шулай бит инде... Минеңсә, ул мәсьәләне өкрен генә, закон түгел, ә ваҡыт хәл итер. Сөнки Башҡортостанда йәшәгән халыҡтың күпселеге - башҡорттар. Хәҙер Арғаяштан, Ҡурғандан, Туҡ-Сорандан бөтә башҡорттарҙы ла Башҡортостанға күсереп алайыҡ тиһәк, был бит мөмкин булмаған эш.

**Үзбәкстандан, Ҡаҙағстандан, ғөмүмән, ситтән ҡайтарырға кәрәк. Ә былары Ырымбурҙа, Пермдә, Силәбелә, Екатеринбургта - үҙ ерендә йәшәй бит.**

- Әлбиттә. Етмәһә, уларҙы яңылыш, диаспора, тиҙәр. Диаспора түгел, тарихи ерендә көн күрә улар. Гел шуны әйтә киләм: Башҡортостан - ҡеүәтле республика, ул ситтә йәшәгән милләттәштәргә ярҙам итә. Икенсенән, татар телендә һөйләшкән башҡорттар үҙҙәрен башҡорт ти икән, бер кеше лә ҡаршы төшөргә тейеш түгел. Дим буйындағыларҙы алайыҡ, уларҙың телдәре бик матур, айырылып тора. Уларҙы һалйот башҡорттары менән бергә ҡуйып булмай, бөтөнләй икенселәр.

**Раил Ғүмәр улы, шулай ҙа "Башҡортостан халыҡтары" программаһына һеҙ нindәй өмөт бағлайһығыҙ?**

- Ул 25 йылға иҫәпләнгән стратегик программа. Беҙҙең Парламент шуны сәйәсәтенең нигеҙе итеп алһа һәм ашыҡмай ғына хоҡуҡи йәмғиәтебеҙҙе төҙөһәк, Рәсәй Федерацияһында Башҡортостан иң үҫешкән һәм цивилизациялы республикаларыбыҙҙың береһе булыр ине. Шундай мөмкинлек бар. XV быуатты алайыҡ. Бында Волганан Тубылға тиклем башҡорттар йәшәгән. Ерҙәре иркен булған, сөнки күсмә тормош алып барғандар. 1552 йылда урыҫтар Ҡаҙанды ала. Был фажиғә башҡорттар өсөн көтөлмәгән хәл була һәм башҡорттарҙан башҡа, тик баярҙарға, мырҙаларға ғына бирелә, хатта дворяндар алпауыт ер биләүенә генә эйә була. Ислам дине, үҙидаралыҡ ҡала. Шулай йәшәйҙәр. XVI быуаттың икенсе яртыһында Мәскәү башҡорт ерҙәрендә ҡала-ҡәлғәләр төҙөй башлай... һәм башҡорттар азатлыҡ көрәшенә күтәрелә. XVI быуаттың икенсе яртыһынан алып XVIII быуаттың аҙағына тиклем башҡорттар ана шул Мәскәү менән Башҡортостан төҙөгән беренсе килешеүҙә ҡаралған шарттар - бойондороҡһоҙлоҡ өсөн көрәшә.

1711 йылда бит Петр Беренсе гениаль идея тәҡдим итә: Башҡортостанды һыҙыҡтар менән уратып алырға! Был гигант планды Татищев, Кирилловтар яҡлай. Бөйөк Петрҙың был эше бөгөнгө көнгә тиклем тейешенсә баһаланмаған әле. Ул Исәт, Тубыл, Яйыҡ (беҙҙең Верхнеуральскиҙан Гурьевҡа тиклем), Һаҡмар, Һамар (Волгаға хәтлем) һыҙыҡтарын төҙөтә. Йәғни түңәрәк барлыҡҡа килтерә. Был төҙөлөш XIX быуатта ғына тамамлана. Иң һуңғылары булып Иләк һыҙығы һәм Омскиҙан Уйға Тубыл тамағына тиклем һыҙыҡтар башҡорттарҙы Бүкәй Урҙаһы ҡаҙаҡтарынан ғына түгел, ә тотош Ҡаҙағстандан һәм ҡалмыҡтарҙан айыра. Араға казактарҙы һәм нуғайбәктәрҙе күсереп ултырталар. XVI быуат аҙағында татарҙар Кама аръяғына күсеп ултыра башлай. Кама аръяғы һыҙығы төҙөлгәс (Семберҙән Минзәләгә тиклем), ул ерҙәрҙән башҡорттар ситләтелә. Башҡортостан ерендә Минзәлә, Мөслим, Актаныш районлары ҡала. Былар бөтәһе лә башҡорт ерҙәре. XVII-XVIII быуатта Башҡортостанға күскенселәр бигүк күп килмәй. Нигеҙҙә көнбайышҡа татарҙар күп килә. Картаны ҡараһаҡ, беҙҙең Янауыл, Борай, Тәтешлегә - удмурттар, Мишкә, Ҡалтасы, Дүртөйләгә - мариҙар, Бишбүләккә - сыуаштар, Йәрмәкәйгә мордвалар күсеп ултыра. Ҡара тупраҡлы ерҙәргә украиндар килеп урынлаша. Иң һуңғы күскенселәр - немецтар (Благоварға), ә урыҫтар латыш менән бергә Өфө эргәһенә, Иглин тирәһенә килә. XVIII быуат аҙағында һәм XIX быуатта, башҡорт ерҙәрендә заводтар төҙөгәндә урыҫ күскенселәре күбәйә. Башта Свердловскиҙа завод төҙөйҙәр, шунан Нижневартовск, Уфалей, Мейәс, Белорет, Йылайыр, Түбәлә - барыһы ла Башҡортостан территорияһында. Күп милләтлелек - республиканың өҫтөнлөгө лә ул, сөнки бер милләтле дәүләт, ҡағиҙә буларак, аҡрын үҫешә.

**Һеҙҙең хәтерегеҙгә беҙҙең республика ғына түгел, донъя тәжрибәһе һыйған. Әйткән фекерегеҙ һәм кәңәштәрегеҙ беҙгә фәһем бирер, түҙемлек һәм сабырлыҡ менән ҡоралландырыр, киләсәккә өмөттө нығытыр, тип уйлайым.**

- Тағы ла бер генә уй-теләк: күберәк Башҡортостандың, башҡорт халҡының киләсәге тураһында уйлағыҙ. Әлеге хәленә, тарихына, киләһе көнөнә дөрөҫ баһа бирегеҙ... һәм шунан сығып дөрөҫ юлды һайларға өйрәнегеҙ. Артҡа ҡарап, тормошто алға ебәреп булмай. Бөтә донъяның йөрәк тибешен тойоп йәшәргә кәрәк.

**Зәйтүнә ХАНОВА яҙып алды.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**30 октябрҙә** ҡурайға арналған **"Һыҙҙырт, ҡурай!.."** концерты буласаҡ. Был тамашала сәнғәт һөйөүселәр мәшһүр ҡурайсылар яңғыратҡан халыҡ көйҙәрен тыңлап кинәнер, ҡурай моңо иленә сәйәхәт ҡылыр. Ҡурайҙың оркестрҙа, эстрада аранжировкаһында яңғырашы һәр кемдең күңеленә хуш килер.

Был концерт шуныһы менән дә уникаль: тамашала Азат Айытҡолов, Ишморат Илбәков кеүек исемдәре республикала ғына түгел, сит тарафтарҙа ла киң билдәле ҡурайсылар ғына түгел, милли уйын ҡоралын үҫтереүгә үҙ өлөшөн индергән данлыҡлы халыҡ ҡурайсылары, йәштәрҙән - Рушан Биктимеров, Азат Биксурин, Рөстәм Шәрипов һәм башҡалар ҡатнаша. Концерт программаһында БР-ның халыҡ ҡоралдары милли оркестры (етәксеһе - Башҡортостандың халыҡ артисы Р. Ғәйзуллин) һәм "Эстрада-джаз оркестры" (етәксеһе - О. Ҡасымов) сығыш яһай. Ҡурай байрамы һеҙҙең күңелдәрҙә онотолмаҫ хәтирә ҡалдырыр. Рәхим итегеҙ!

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**Ҙур сәхнә.**

**16 октябрь** Премьера! **"Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия.

**17 октябрь "Аты барҙың - дәрте бар"** (Н. Ғәйетбай), комедия.

**19, 20 октябрь "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ"** (М. Кәрим), хыял. Башлана 15.00.

**21 октябрь "Кәкүк ояһы"** (К. Кизи), психологик триллер.

**Бәләкәй сәхнә.**

**20 октябрь "Хәйерле иртә, Энид"** (В. Аллен), тормош фокустары.

**КЕМ АЛЫҠ!**

Беренселәрҙән булып түбәндәге һорауҙарға яуап биреүселәр спектаклдәргә саҡырыу ҡағыҙҙары менән бүләкләнәсәк! Йәгеҙ, кем алыҡ?!

1. "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" спектаклендә Г. Мөбәрәкова нindәй роль башҡара?

2. "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" спектакленең режиссеры кем?

**Тел.: 8-937-341-91-92.**

*К О Т Л А Й Б Ы Ҙ !*

Баймаҡ районы Билал ауылында тыуып үҫеп, хәҙерге көндә Өфө ҡалаһында йәшәүсе ҡәҙерле кешебеҙ **Әминев Айрат Мосауар** улын күркәм юбилейы менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ.

Ҡәҙерлебеҙ, һинә йөрәк түребеҙҙән сыҡҡан иң изге теләктәребеҙҙе, ярҙамсыл, алсаҡ, оло йөрәкле, бөтәбеҙгә лә хәстәрлекле булғаның өсөн оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Тормоштан зарланмай, ауырлыҡтарҙы сабыр үткәрә алғаның, көслө рухлы булғаның өсөн һине яратабыҙ, хөрмәт итәбеҙ. Аллаһы Тәғәлә һинә именлектә - һаулыҡта, күңел тыныслығында йәшәргә, дуҫ-иштәрең араһында һаман да шулай абруйлы булып ҡалырға насип итһен. Киләсәктә лә беҙгә, туғандарыңа, балаларыңа тормош терәге, кәңәшсе булып, ейәнейәнсәрҙәреңдең һөйөүен тойоп, Флүрә киленебеҙ, еңгәйебеҙ менән бергә оҙон-оҙаҡ йылдар татыу донъя көтөргә яҙһын.

**Атайың, Салауат, Азамат агайҙарың, Әнисә, Фәниә һеңлеләрең, Юлдаш, Иршат ҡустыларың һәм уларҙың ғаиләләре исеменән Сания апайың, Ишбулды еҙнәйең һәм беҙҙең балалар.**

Октябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Өфө ҡалаһынан** Гөлнара Фәтихованы, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Хәмиҙә Исчуринаны, Ғүмәр ауылынан Флүзә Ноғомановану, Иҫке Сибай ауылынан Миңлегөл Усмановану, Ярат ауылынан Миңлебай Дәүләтбаевты, Яңғаҙы ауылынан Мотаһар Аслаевты, Йәрмөхәмәт ауылынан Шафҡәт Мөьминовты, Йәнбикә Мөьминованы, **Баймаҡ ҡалаһынан** Сәйфетдин Әхмәтҡужинды, **Йәрмәкәй районы** Рәтамаҡ ауылынан Роза Хәбибуллинаны, Яланшишмә ауылынан Р. Сәләмовты, **Межгорье ҡалаһынан** Фәнүзә Әксәнованы, Ғәшүрә Кәримованы, **Благовар районы** Языково ҡасабаһынан Гөлсинә Фәрхетдиновану, **Учалы районы** Миндәк ҡасабаһынан Тәслимә Фәтхетдиновану, **Дәүләкән ҡалаһынан** Таңһылыу Гәрәеваны, **Ейәнсура районы** Абзан ауылынан Айгөл Ғәлиеваны, **Федоровка районы** Федоровка ауылынан Г. Баҡыеваны, Батыр ауылынан М. Аҡсуринаны, Бала Сытырман ауылынан Фәниә Рисованы, **Ауырғазы районы** Таштамаҡ ауылынан Нәсимә Сидорованы, **Аҫҡын районы** Аҫҡын ауылынан Рәүиә һәм Рәмилә Сәлиховаларҙы, **Әбйәлил районы** Әбделмәмбәт ауылынан Лена Сафинаны, Амангилде ауылынан Мәғмүрә Хәсәновану, Латифа Мостафинаны, Сәриә Йәнтүринаны, **Балаҡатай районы** Яныбай ауылынан Гөлбикә Мөхәмәтҡәримованы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ һәм ныҡлы һаулыҡ, шатлыҡ-ҡыуаныстар менән тулы бәхетле оҙон ғүмер теләйбеҙ.

**Изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ИҒЛАН

Башҡорт телендә балалар байрамдары һәм тыуған көндәр үткәрәбеҙ. Әкиәт геройҙары, милли уйындар һәм бүләктәр кескәйҙәрегеҙгә бик оҡшаясаҡ. Шулай уҡ Яңы йыл байрамына Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙы саҡыра алаһығыҙ.

**Тел.: 8-937-33-55-235, 8-937-30-50-421.**

Тулыраҡ мәғлүмәт **www.afarin-ufa.ru** сайтында.

**ИНФОРМАЦИОННОЕ СООБЩЕНИЕ**

Казенное предприятие РБ Редакция журнала "Башкортостан укытыусыхы" сообщает, что 8 октября 2010 года состоялся аукцион по адресу: г. Уфа, ул. Гоголя, 34, каб. №8 по продаже государственного имущества РБ - автомобиля DAEWOO NEXIA, 2005 года выпуска, государственный регистрационный номер С 969 ЕР 02, находящегося в оперативном управлении КП РБ Редакция журнала "Башкортостан укытыусыхы". Участники аукциона: Миргалиев Р.М. и Гаймалтдинов И.З. По итогам аукциона победителем признан Миргалиев Разиль Мидихатович (г. Уфа), которому автомобиль продан по цене **105646 (сто пять тысяч шестьсот сорок шесть)** рублей.

✓ *Әгәр ҙә һинең тормошоң үҙеңә оҡшамай икән, үҙгәрт уны.Һин рәссам, һинең туҡымаң, бумалаң һәм буяуҙарың бар. Аяҙ күкте төшөр ҙә, шунан урын ал. (Никос Казандзакис).*



ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# КӨРКӘ, УПАН-ТУПАН, ҺЫРМЫЛӘҘ, ШӘРЖӘН-ЯРА...

**Минең Латифа тигән оло еңгәйем бар. Ул да минең кеүек "Киске Өфө"нө күптән алдырып, яратып уҡый. Уның менән аралашыуы, һөйләшеүе оло кинәнес, байрам кеүек. Сөнки ул үҙ телмәрендә әсәһенән һәм башҡа өлкәндәрҙән ишеткән һирәк һүҙҙәрҙе ҡулланып, боронғоса һөйләшә. Уның үтенесе буйынса гәзиттең "Әсәйем лөғәте" рубрикаһына бер нисә һүҙен ебәрергә булдым. Еңгәйем өҫтәүенә бик мәрәкәсел, кинәйә менән һөйләргә ярата. Алдағы көндәрҙә "Алдар менән Ерәнсә коро"на ла бер-ике көләмәсен ебәрермен.**

**Көркә** - тышлыҡ, оя мәғәнәһендә. "Нишләп көркәндән сыға алмай, өйҙә ултыраһың ул?"

**Өрбағы арттырыу** - һөнәр арттырыу. "Ул да булдымы бер, өрбағы арттырыу", тиҙәр.

**Шөр** - шыр ебәреү, ҡурҡыу мәғәнәһендә. "Беҙҙе күрҙе лә, шөр булды"

**Зыйҙап** - шәп барыу. "Зыйҙап барып инеп китте".

**Упан-тупан** - күҙе шарҙай булды, мәғәнәһендә. "Мине күрҙе лә күҙе упан-тупан булып китте".

**Синнай** - "синий", йәғни күк күҙле кеше.

**Миңгәреү** - ҡунаҡты мул табын артында ҡыҫтап һыйлау мәғәнәһендә.

**Тиңгәреү** - тетелгән дебетте тиңгәреү, йәғни бер тиң итеү, бер усҡа йыйыу, герҙәрҙе бер-береһе менән тиңгәреү, йәғни бер-береһенә тейгеҙеү.

**Ҡыйҡанлау** - ауышыу, бер яҡҡа ҡыйшайыу, тиҙ генә үҙ ҡарашын үҙгәрткән кешегә "ҡыйҡандаҡ", тиҙәр.

**Бызмырлау** - яй ҡыймылдау, бызмырлаған кешегә: "Бер аяғын күтәргәнсе, икенсеһен эт ашаған", тип тә әйтәләр.

**Күпһенеү** - күңел тарлығын белдерә. "Мин барғанды күпһенде лә торҙо".

**Һырмыләҙ** - туған булып киткән ят кеше. "Ул беҙгә хәҙер һырмыләҙ булып киткән инде ул".

**Шәржән-яра** - үҙ-үҙен контролдән ыҫҡындырған кешене шулай атайҙар. "Донъяһын онотоп, шәржән-яра йөрөп ята ул".

**Аукан** - аулаҡ мәғәнәһендә.

**Тыкывабаш** - шалҡан кеүек ҙур башлы кеше, йәғни аҡыллы кеше.

**Башкауатый** - тыкывабаштың синонимы.

**Бәрәшән** - 1-се мәғәнәһе - бәрәшән йөрөй, асыҡ-яра йөрөй; 2-се мәғәнәһе - бушҡа йөрөмәй, ниндәйҙер сәбәп (причина - бәрәшән) менән йөрөй.

**Төш сулаһы** - төшкөләктөң бер миҙгеле. "Ямғыр төш сулаһы етһә, тыма".

**Удалуйҙар** - "удалой"ҙан алынғандыр. "Удалуйҙар улы өйҙә ята, эшләмәй".

**Һөсөкән** - тиҙ ҡыҙып, тиҙ үсегеп барған кешене әйтәләр."Калайткан булып тора, һөсөкән".

**Зөһрә МӘҺӘҘИЕВА.**
**Әбйәлил районы,**
**Рыҫҡужа ауылы.**

ХОККЕЙ

# ҠАРСЫҒАЛАРҘЫҢ ҠАНАТЫ ҠАЙЫРЫЛДЫ

**"Салауат Юлаев" командаһы "Өфө-Арена" спорт комплексының боҙ майҙанына күтәренке кәйеф менән сыҡты. Шулай булмай һуң! Юлаевсылар бынан алда Ҡаҙағстандың "Барыс" командаһын 5:4 иҫәбе менән еңде бит.**



Омск ҡалаһының "Авангард" командаһының теләге бер: юлаевсыларҙы еңеү. Быға тиклем "Салауат Юлаев" командаһынан ике тапҡыр еңелгәйнеләр бит. Өсөнсө тапҡырға ла еңелһәләр, Омск ҡалаһы көйәрмәндәре алдында нисек аҡланмаҡ кәрәк!

"Авангард" хоккейсыларын "Омск ҡарсығалары" тип йөрөтәләр. Бындай маҡтаулы исемгә лайыҡ булыу өсөн бары тик еңеү кәрәк.

Әммә бөтөнләй киреһе килеп сыҡты. Юлаевсылар уйын башланыу менән үк тиерлек иҫәп асты. Һөжүмсе Олег Сапрыкин һуҡҡан шайба ҡунаҡтар ҡапҡаһына Алексей Кузнецов ҡапҡаһында ояланы. Майҙан хужаларының һөжүме элекке әүҙемлек менән дауам итте. Тиҙҙән Владимир Антипов икенсе шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына сәпәне.

Беренсе осор бөтәр алдынан команда капитаны Виктор Козлов өсөнсө голдың авторы булды. Беренсе осор 3:0 иҫәбе менән тамамланды, ә икенсе осор башында тынғы белмәҫ Алексей Радулов иҫәпте 4:0 итте.

Омск ҡарсығалары сәмләнде. Улар Виталий Колесник ҡапҡаһына бер-бер артлы ике шайба индерҙе. Өсөнсө шайбаны ҡунаҡтарҙың иң оҫта һөжүмсеһе Яромир Ягр индерҙе.

Юлаевсылар һағайҙы. Былай булһа, иҫәптең тигеҙләнеүе бик мөмкин. Юҡ, улай ярамай. Команда капитаны Виктор Козлов 5-се шайбаны индереп, уйынға еңеүле нөктә ҡуйҙы.

Шулай итеп, "Омск ҡарсығалары"ның тағы ла ҡанаты ҡайырылды. Улар 5:3 иҫәбе менән отолдо.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

БАШҠАТЫРҒЫС

**Гәзит-журналдарға "Башватҡыс" исеме аҫтында сканвордтар, кроссвордтар баҫылғаны өсөн генә яҙылған уҡыусылар барлығын иҫтә тотоп, беҙ ҙә үҙебеҙсә "Башҡатырғыс" уйыны башларға ҡарар иттек. Был уйында ҡуйылған һорауҙар һәм яуаптар кинәйәгә, ишараға, ҡыҫҡаса әйткәндә, фәлсәфәгә ҡоролған. Яуаптар рәүешендә көләмәстәр, ҡыҫҡа хикәйәләр, мәрәкә һүрәттәр ебәрергә лә мөмкин. Иң ҡыҙыҡ яуаптар гәзиттә баҫыласаҡ. Шулай итеп...**

# ӘБЕЙ ҠАБАЛАНА...

**1-се башҡатырғыс:**

Далала асфальт буйлап бер әбей йәйәү атлай. Артынан килгән еңел машина тапҡырына килеп етеп туҡтағас, кабиналағы йөштәр унан Солтан ауылына юл һораша.

-Быны ошо юл алып бара, бер яҡҡа ла боролмай, туп-тура 20 саҡрым барғас, Солтанға барып етерһегеҙ. Мин дә шул ауылға китеп барам, - ти әбей, атлауынан туҡтамайынса.

-Инәй, улай булғас, әйҙә, беҙгә ултыр, урыныбыҙ бар. Бер юлы юлды ла күрһәтерһең, - ти йөштәрҙең береһе.

-Аҡса алмайбыҙ, - тип өҫтәй уларҙың икенсеһе.

-Юҡ, уландарым, ултырып тормайым. Былай ҙа ҡабаланам, - ти ҙә әбей атлауын дауам итә.

**ҺОРАУ: Әбей ҡабаланһа ла, ни өсөн машинаға ултырыуҙан баш тартҡан?**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БОЙОРОУСЫҒА ТҮГЕЛ,

## ә өйрәтеүсегә ышан

Әгәр ҙә һинең тормошоң үҙеңә оҡшамай икән, үҙгәрт уны.Һин рәссам, һинең туҡымаң, бумалаң һәм буяуҙарың бар. Аяҙ күкте төшөр ҙә, шунан урын ал.

**(Никос Казандзакис).**

Кеше тормошҡа бүләк ителмәгән, ә бурысҡа биреп торолған.

**(Публилий Сир).**

Кешенең холҡо башҡа бер кешенең холҡон асырға маташҡанда нығыраҡ асыла.

**(Жан-Поль Рихтер).**

Бойороусыларға түгел, ә өйрәтеүселәргә нығыраҡ ышанырға кәрәк.

**(Августин).**

Тормоштағы иң ҙур хата - хата яһау ихтималлығынан ҡурҡып йәшәү.

**(Элберт Хаббард).**

Һәр революция башта бер кешенең мейеһендәге уй булған.

**(РалфУолдо Эмерсон).**

Яуыз кешеләрҙең тормошо ҡурҡыу-тулҡынланыуҙар менән тулы.

**(Дени Дидро).**

Ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар "Юҡ" тигән һүҙҙе аңламай.

**(Сомали мәҡәле).**

Яҡшы аяҡтар ҙа иртәме-һуңмы әләгеп тәгәрәй башлай; тәҙ арҡа кәкерәйә; ҡара һаҡал саллана; бәҙрә сәсле баш пеләшләнә; матур йөҙ йыйырсыҡтар менән ҡаплана; тәрән ҡараштар төҫһеҙләнә; әммә изгелекле йөрәк гел яҡтыртып торған ҡояшҡа оҡшап, бер ваҡытта ла үҙгәрмәй һәм һәр ваҡыт тоғро юлдан бара.

**(Уильям Шекспир).**

Әгәр ҙә ғаилә тормошо һиндәге кешене үлтерә икән, уға нөктә ҡуйырға кәрәк.

**(Ричард Бах).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Өс кеше таш ташып йөрөй. Улар эргәһенә бер сит кеше килә һәм нимә эшләүҙәрен һорай. Беренсе эшсе, маңлайындағы тирен һөртөп, "Бил бөгәм..." ти. Икенсеһе еңдәрен төрөп, эшлекле ҡиәфәт менән "Аҡса эшләйем" тип яуаплай. Өсөнсөһө был һорауға яуап бирер алдынан күҙҙәрен бейеккә, күккә төбәп ала ла "Һарай төҙөйөм" тип яуап бирә. Өсөһө лә бер эш менән мәшғүл кешеләрҙең яуабы бына шулай төрлөсә була..."**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 4138